ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

5-11 июнь (һөтай) 2026

№22 (1217)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Тағы ла һәйкәл тураһында 3



Аҡылың булһа, ташлама! 6



Ил кото ла улар 7



Китап һөйөүселәр майҙаны 11



*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!* ***ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә республика ҡалалары һәм райондарының бөтә почта бүлексәләрендә лә 2026 йылдың икенсе ярты йыллығына 1124 һум 40 тингә яҙыла алаһығыҙ. Әйткәндәй, ике кешегә (562 һум 20 тин), өс кешегә (374 һум 80 тин) бер дана гәзит алдырыу ҙа хуплана. Һәр ваҡыттағыса, гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер матур башҡорт китаптары менән бүләкләнер.***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Халҡыбыҙҙың оло хазинаһы булған "Урал батыр" эпосы тураһында нимә беләһегеҙ, уны уҡығанығыҙ бармы? Ундағы аҡыл-фекер беҙҙең йәшәйешебеҙҙең нигеҙе, тигәнгә нисек ҡарайһығыҙ?

***Зәкирйән ӘМИНЕВ, философия фәндәре кандидаты, мифолог, этнограф:*** "Урал батыр" ҡобайырын инде илле йылдан ашыу уҡыйым, тикшерәм, өйрәнәм, унын буйынса бер нисә китап яҙҙым. Башҡорттоң был әҫәре уҡыған һайын күберәк һорауҙар тыуҙыра торған бөтмәҫ сер йомғағы ул. "Урал батыр" эпосы - башҡорт донъяһының, халҡының матрицаһы, кеше был донъяға тыуғас тап Кеше булараҡ ниндәй булырға, нимәгә ынтылырға тейеш, тигән идеяны иң алға ҡуя. Эпоста юҡҡа ғына: "Кеше булһын затығыҙ", тиелмәгәндер бит. "Кеше" һүҙе ҙур хәреф менән яҙылғанына иғтибар итергә кәрәк.

Беҙгә, башҡорттарға, был әҫәрҙе әле өйрәнергә лә өйрәнергә.... Өйрәнергә тинем дә, уйға ҡалдым. Ҡайһы берәүҙәр был әҫәргә үҙҙәренә дан-шөһрәт ҡаҙаныуға тура юл кеүек ҡарай. Мәскәүҙән бер билдәле ғалим эпос тирәһендә төрлө имеш-мимештәрҙең күбәйә башлауына иғтибар итеп, шуға борсолоп: "Урал батыр" эпосына теймәй тороғоҙ, әҙерәк тыныслыҡта ҡалдырығыҙ, мораторий иғлан итегеҙ", - тигәйне. Әлбиттә, халыҡтың иғтибары артыуы, бер яҡтан, ҡыуандыра, тикшереүселәр ҙә күбәйер, тип уйлайым Икенсе яҡтан, фәнгә яҡынлығы булмаған төрлө юҡ-бар мәҡәләләрҙән, эпостың ысынлап барлығына шик белдереүселәрҙән барлыҡҡа килеүе борсой.



Илле йылдан ашыу Урал батыр ҡобайырын тикшереүсе кеше булараҡ, был эпос донъялағы иң боронғо эпос, тип бер ниндәй шикһеҙ әйтә алам. Ғалимдар Гилгәмеш тураһындағы эпосты иң боронғо тип иҫәпләй, әммә уны тыуҙырған халыҡ бынан бер нисә мең йыл элек тарих арбаһынан төшөп ҡалған. Әгәр археологтар XIX быуатта шумерҙарҙан ҡалған кирбес киҫәктәрен тапмаған, ундағы сыймаҡланған шына яҙмаларҙы уҡымаған булһа, беҙ был донъяла ҡасандыр Шумер тигән дәүләт булғанын да, ул халыҡтың Гилгәмеш тураһындағы эпосы хаҡында ла белмәгән булыр инек. Ниндәйҙер бер осраҡлыҡ арҡаһында ғына беҙ хәҙер Гилгәмеш хаҡында уҡый алабыҙ. Ә Урал батырҙы тыуҙырған халыҡ үҙе лә, унын эпосы ла ошо көнгәсә тере көйө килеп еткән һәм уны әле булһа уҡыйҙар, өйрәнәләр, һоҡланалар, Аллаға шөкөр. Ә бит Урал батыр менән Гилгәмеш тураһындағы эпостар яҡынса бер үк ваҡыттарҙы, бер үк донъяуи ҡараштарҙы сағылдырған әҫәрҙәр. Шуларҙы сағыштырып уйлаһаң, Урал батыр - ул үҙе бер мөғжизә булғанын, унын менән һоҡланмау мөмкин түгел икәнен аңлайһың.

Урал батыр - башҡорт халҡы ижад иткән, кешелеккә борондан һаҡлап килтереп еткергән иң бөйөк әҫәр. Был ҡобайыр аша кешелек үҙенең боронғо тарихын өйрәнәсәк, тип һис шикһеҙ әйтә алам. Шунын өсөн беҙҙең ғалимдарыбыҙға төрлө имеш-мимештәрҙән ары тороп, эпосты тик фәнни күҙлектән тикшереп, уҡыусыға ундағы идеяларҙы, донъяуи ҡараштарҙы аңлатырға кәрәк.

БАШҠОРТ ҒАИЛӘҺЕ

# БӨГӨН БАЛА - ИРТӘГӘ ХАЛЫҠ.

## Бала күңеленә хаҡ шытымлы орлоҡ һалайыҡ!

**Биктимеровтар - йәмғиәт тормошонда әүҙем ҡатнашып йәшәүсе ижади ғаилә. Милләт алдында яуаплылыҡ - уларҙың булмышында. Таңсулпан РӘСҮЛ - шағирә, журналист, Башҡортостан Республикаһының Яҙыусылар союзы ағзаһы, Ибраһим Ғиззәтуллин исемендәге әҙәби премия лауреаты. Бөгөнгө көндә "Башҡортостан" гәзите хәбәрсеһе. Айҙар БАЙТИМЕРОВ - ҡурайсы, юғары категориялы педагог, Башҡортостан Республикаһының Ҡурайсылар союзы идараһы ағзаһы, Башҡортостан Ҡурайсылар ансамбле солисы, Өфөнөң 7-се Балалар музыка мәктәбенең ҡурай класы уҡытыусыһы, Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты Башҡорт музыкаһы факультеты оркестры етәксеһе, дирижеры. Ике ул үҫтерә улар, һәм туған телгә, сәнғәткә булған һөйөү, үҙ асыштары, табыштары менән ҡыуандырыу уларҙа ла асыҡ сағыла. Бөгөн ижади ғаиләнең эске тормошона күҙ һалырбыҙ, ғаилә бөтөнлөгө, тәрбиә, киләсәк алдында яуаплылыҡ тигән төшөнсәләргә тәрәнерәк бағырбыҙ.**

**(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).**



12+

@kiskeufa

Беҙҙең VK төркөмөнә рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

✓ ***Бөтә предметтар буйынса имтихандар тапшырыу өсөн резерв көндәр 22-25 июнгә билдәләнгән. Һайлау буйынса предметтарҙың береһен 8 һәм 9 июлдә яңынан тапшырырға мөмкин.***



ҠЫҪҠАСА

# ҺАБАНТУЙҘАР ГӨРЛӘЙ

**Башҡортостанда һабантуйҙар мәле етте. Яҙғы сәсеү эштәренең тамамланыуын символлаштырған "һабан байрамын" тәүгеләрҙән булып 30 майҙа Әбйәлил, Ғафури, Йылайыр, Ҡалтасы һәм Күгәрсен райондары халҡы билдәләне.** 6 июндә 20 районда һабантуй ойошторолдо. Артабан халыҡ байрамдары 12-13 июндә була. Һабантуйҙар миҙгеле 18 июлдә Белорет районында тамамлана. Байрам ҡунаҡтары һәм унда ҡатнашыусылар өсөн мөһим мәғлүмәт: һабантуй уҙғарылған көндәрҙә тейешле муниципалитет биләмәләрендә хәмер һатыу тыйыла. Республиканың Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығында белдереүҙәренсә, бындай сара күмәк халыҡ ҡатнашлығындағы байрамдарҙа хәүефһеҙлекте һәм хоҡуҡ тәртибен тәьмин итеү өсөн индерелә. Тыйыу кафе, бар һәм рестарандарға ҡағылмай.

✓ **Өфөлә Рәсәй, Куба, Иран һәм Беларусь республикаһының йыйылма командалары араһында волейбол буйынса халыҡ-ара турнир үтеүе ихтимал.** Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибовтың Бөтә Рәсәй волейбол федерацияһының генераль директоры урынбаҫары Михаил Подлозный һәм Бөтә Рәсәй волейбол федерацияһы президенты кәңәшсеһе Павел Гидулян менән осрашыуында ошо хаҡта һүҙ барҙы. Турнир быйыл августа Көрәш һарайында үтер тип көтөлә. "Башҡортостанда спорт инфраструктураһы үҫешкән, халыҡ-ара ярыштар, шул иҫәптән 2018-2019 йылдарҙа Милләттәр лигаһы этаптарын ойоштороу тәжрибәһе бар. Яңы халыҡ-ара турнирҙы үткәреү беҙҙең төбәкте һәм илебеҙҙе йәнә халыҡ-ара аренала лайыҡлы күрһәтер", - тип билдәләне Руслан Хәбибов.

✓ **Башҡортостанда "Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре" программаһына үҙгәрештәр индерелде. Премьер-министр Андрей Назаров Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең тейешле ҡарарына ҡул ҡуйҙы.** Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, проект ауылға, эшселәр ҡасабаһына йәки ҡала тибындағы ҡасабаға, 50 меңгә тиклем кеше йәшәгән ҡалаға эшкә ҡайтҡан (күсеп килгән) мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренә бер тапҡыр бирелә торған компенсация түләүҙе күҙ уңында тота. Үҙгәрештәр мәҙәниәт хеҙмәткәренең бер тапҡыр бирелә торған компенсация түләүен тулы күләмдә (йәки уның бер өлөшөн) республика бюджетына кире ҡайтарыуына ҡағыла. Түләмәгән осраҡта Мәҙәниәт министрлығы суд тәртибендә кире ҡайтарырға хоҡуҡлы. Ваҡыты мәҙәниәт хеҙмәткәре ошо талапты алған көндән алып 30 календарь көндән артмаҫҡа тейеш. Шулай уҡ яңы редакцияла проектта ҡатнашыусы вазифалар исемлеге бар.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ҺӨҘӨМТӘ ҮҘЕН АҠЛАЙ

**"Минченко консалтинг" федераль коммуникация холдингының "Дәүләт советы 2.0" төбәк башлыҡтарының сәйәси тотороҡлолоғо рейтингы баҫылып сыҡты. Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров губернаторҙарҙың "йәшел" зонаһына инде, был уның юғары сәйәси тотороҡлолоғо тураһында һөйләй.**

"Минченко консалтинг" коммуникация холдингы президенты Евгений Минченко "Башинформ"ға Башҡортостан Башлығының позициялары ныҡыныуына ҡарата үҙ фекерен белдерҙе: "Һуңғы ваҡытта Хәбировтың уңыштары байтаҡ, тип уйлайым. Оҙайлы һәм дауамлы сәйәси дистанцияла ул юғары тотороҡлолоҡто һаҡлай. Яңы йүнәлештәр барлыҡҡа килә, мәҫәлән, яһалма интеллект индереү, сәнәғәтте, агросәнәғәт комплексын үҫтереү буйынса ҙур эш алып барыла, бында ла яһалма интеллект ҡулланыла. Радий Хәбиров һәм Башҡортостан, Мәскәү һәм Липецк өлкәһе менән бер рәттән, төбәктәр араһында яһалма интеллектты үҫтереү повесткаһы лидерҙарының береһе булып тора. Республикала Башҡортостан Башлығы ҡарамағында Һанлы үҫеш һәм яһалма интеллект технологияларын индереү мәсьәләләре буйынса совет булдырылды, ул медицинаға, производствоға, дәүләт идаралығына инновациялар индереү өсөн яуап бирә. Эске конфликттар кәмене, - тип билдәләне Евгений Минченко. - Өфө мэрына ҡаршы енәйәт эше Хәбировтың позицияһына зыян килтермәй, сөнки был кеше Радий Фәрит улы командаһынан түгел һәм үҙ ваҡытында уны тәғәйенләү тураһында ҡарар төбәк элиталары менән компромислы килешеүҙәр һөҙөмтәһе булып тора. Рейтингҡа ярашлы, Башҡортостан Башлығы халыҡ-ара тректа әүҙемлек күрһәтә. Быға айырыуса Тажикстан һәм Үзбәкстан менән тышҡы иҡтисади бәйләнештәрҙе ныҡытыу булышлыҡ итте".

Шулай итеп, губернаторҙарҙың тотороҡлолоҡ рейтингы ("Дәүләт советы 2.0") 9 критерийҙа бирелгән баһалар буйынса төҙөлә. Йомғаҡлау баһаһы юғарыраҡ булған һайын, губернаторҙың үҙ вазифаһында ҡалыу мөмкинлеге лә юғары. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Дәүләт советы 2.0" рейтингында "һары"нан сәйәси яҡтан тотороҡло "йәшел" зонаға күтәрелде (2025 йылдың сентябрендә 12 балл булһа, хәҙер 16 балл).

# ӨФӨЛӘ - ЯҢЫ ЕТӘКСЕ



**Өфө мэрияһында кадрҙар үҙгәрҙе. Ҡала хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы итеп быға тиклем Хәйбулла районы хакимиәтен етәкләгән Рөстәм Шәрипов тәғәйенләнде. Ул 1 июндә үҙ бурысын үтәүгә тотондо. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Радий Хәбиров белдерҙе.**

"Һеҙ уны беләһегеҙ, таныштырыуҙың кәрәге юҡтыр. Ул 12 йыл хакимиәт башлығы булып эшләне. Биш йыл - Бөрйән районы, ете йыл Хәйбулла районы менән уңышлы етәкселек итте. Хәҙер Өфөгә бер аҙ энергия бирергә кәрәк, тип иҫәпләйем. Беҙ был энергияһыҙ һайлау кампанияһына инә алмайбыҙ, ул еңел булмаясаҡ, ҡала советы һайланасаҡ. Ҙур хужалыҡ, уны ҡарарға кәрәк", - тине Башҡортостан Башлығы.

Рөстәм Шәрипов 1982 йылдың 29 июлендә Бөрйән районының Яңы Мөсәт ауылында тыуған, БДУ-ның Сибай институтын, Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһын тамамлаған. Хеҙмәт юлын 2000 йылда өсөнсө разрядлы маляр булып башлай. Һуңынан төрлө йылдарҙа һатыу буйынса менеджер, кредит белгесе һәм банктарҙа клиенттарҙы хеҙмәтләндереү бүлеге белгесе булып эшләй. 2009 йылда Бөрйән районы хакимиәтенә иҡтисад бүлегенең әйҙәүсе иҡтисадсыһы булып эшкә килә. Һуңынан бер йыл "Башинформ" мәғлүмәт агентлығының иҡтисад, коммерция һәм хужалыҡ департаментында иҡтисадсы булып эшләй. 2012 йылда Бөрйән районы хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләнә.

# БАШЛАНДЫ!

**1 июндә Башҡортостанда Берҙәм дәүләт имтиханын тапшырыуҙың төп осоро башланды. Тәүге имтихандар - тарих, әҙәбиәт һәм химия фәндәренән.**

- Республикала биш меңдән ашыу ун беренсе класс уҡыусыһы өсөн дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы старт алды, - тип хәбәр итте мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙин. - Имтихандар осоронда етди иғтибар тупларға кәрәк, әммә имтихандарҙың билдәле бер ваҡытта белемде тикшереү генә булыуын иҫтә тотоу мөһим. Беренсе һынау алдынан тулҡынланыу тойғоһо һәр кемгә хас. Хәҙер иң мөһиме - үҙеңде ҡулға алыу һәм үҙ көсөңә ышаныу. Һеҙ оҙаҡ әҙерләндегеҙ һәм һеҙ үҙегеҙ уйлағандан күпкә күберәк беләһегеҙ. Барығыҙға ла уңыштар, яҡшы һөҙөмтәләр теләйем! - тип мөрәжәғәт итте ул сығарылыш уҡыусыларына.

Башҡортостандың Мәғариф министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, быйыл БДИ-ла ҡатнашыу өсөн бөтәһе 17 меңгә яҡын уҡыусы теркәлгән. Сығарылыш уҡыусылары араһында иң популяр предмет - профилле математика (ҡатнашыусыларҙың 62 проценты уны һайлаған). Йәмғиәтте өйрәнеү фәненә ҡыҙыҡһыныу бик юғары. Шул уҡ ваҡытта информатика, физика, биология һәм химияның популярлығы арта. Артабанғы имтихан 4-дә - рус теленән булды, 8 июндә иһә сығарылыш уҡыусылары математиканы (база һәм профилле кимәл) тапшыра. 11 июндә - йәмғиәтте өйрәнеү һәм физика, 15 июндә - биология, география, сит телдәр буйынса БДИ-ның яҙма өлөшө, 18-19 июндә - информатика һәм сит телдәр буйынса телдән яуап биреү ("Һөйләшеү").

Бөтә предметтар буйынса имтихандар тапшырыу өсөн резерв көндәр 22-25 июнгә билдәләнгән. Былтырғы кеүек үк, сығарылыш уҡыусыларының һөҙөмтәне яҡшыртыу өсөн өҫтәмә мөмкинлеге бар. Һайлау буйынса предметтарҙың береһен 8 һәм 9 июлдә яңынан тапшырырға мөмкин. Етди сәбәп буйынса имтихан тапшыра алмағандар йәки мотлаҡ фәндәрҙән ҡәнәғәтләнерлек баһаға яҙмағандар өсөн 4 сентябрҙән 25-нә тиклем өҫтәмә осор ҡаралған.

# ТАРИХИ ХӘТЕР...

**Рәсәй Президенты ярҙамсыһы, Рәсәй хәрби-тарихи йәмғиәте рәйесе Владимир Мединский һәм Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй хәрби-тарихи йәмғиәте төбәк бүлексәһенең попечителдәр советы ултырышын үткәрҙе.**

- Рәсәй хәрби-тарихи йәмғиәтенең Башҡортостан төбәк бүлексәһе әүҙем эш алып бара. Шул уҡ ваҡытта ойошма алдында торған көнүҙәк мәсьәләләр ҙә бар. Республика менән бергә уларҙы уңышлы хәл итергә тырышырбыҙ, - тине Владимир Мединский.

- Беҙ бында фән һәм мәҙәниәт вәкилдәре булараҡ ҡына йыйылманыҡ. Беҙ дөйөм миссияны башҡарабыҙ - тарихи хәтерҙе һаҡлайбыҙ, өлкән быуындың хәрби һәм хеҙмәт батырлыҡтарын онотмайбыҙ,- тине Радий Хәбиров. - Махсус хәрби операция үткәреү шарттарында хәрби-тарихи йәмғиәт вәкилдәре өлкән быуындың героик мираҫын хәҙерге көндә Ватанды һаҡлаусыларҙың ҡаһарманлығы менән бәйләргә ярҙам итә, Махсус операцияның тәү сәбәптәре тураһында объектив мәғлүмәт бирә. МХО-ла һәләк булған яугирҙарҙың иҫтәлеген мәңгеләштереү өсөн мәктәптәрҙә мемориаль таҡтаташтар ҡуябыҙ, "Геройҙар парталары"н асабыҙ. Мәктәптәргә, патриотик үҙәктәргә геройҙарҙың исемен бирәбеҙ. Биналарҙа ҙур һүрәттәр - муралдар урынлаштырабыҙ, тематик күргәҙмәләр ойошторабыҙ һәм башҡалар.

Башҡортостан Башлығы республикала Рәсәй хәрби-тарихи йәмғиәте булышлығында "Өфө - хеҙмәт батырлығы ҡалаһы" стелаһын, Советтар Союзы Геройҙарына, Рәсәй Геройҙарына һәм Дан орденының тулы кавалерҙарына 145 мемориаль таҡтаташ, Ишембай, Ҡырмыҫҡалы, Ғафури райондарында Совет һалдатына һәйкәлдәр һәм башҡа мемориаль объекттар ҡуйылыуы хаҡында һөйләнә.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров МХО биләмәһендә хәрби бурыстарҙы үтәгәндә айырылып торған яугирҙарҙы дәүләт наградалары менән бүләкләне. Рәсәй Оборона министрлығының 12271-се ғәскәри часы "Башҡортостан" полкының реактив артиллерия батареяһы командиры Александр Козоногов Салауат Юлаев ордены менән бүләкләнде. Республика етәксеһе Рәсәй Тәфтиш комитетының 125-се хәрби тәфтиш бүлеге тәүтикшереүсеһе Сергей Евстафьевҡа генерал Шайморатов орденын тапшырҙы.

✓ Башҡортостанда "Патриот" хәрби-патриотик паркында мәсет һәм сиркәү төҙөлөшөнә нигеҙ һалынды. Ғибәҙәтханалар Тыуған ил өсөн алышта һәләк булғандар иҫтәлегенә бер-береһенә яҡын ғына итеп төҙөлә. Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ошо турала һөйләне. Билдәләнеүенсә, Ҡорбан байрамы көнөндә Өфө һәм Башҡортостан митрополиты Филарет, Рәсәйҙең Баш мөфтөйө Тәлғәт Таджетдин һәм республика етәкселеге ҡатнашлығында ошо ғибәҙәтханаларға нигеҙ ташы һалынды. Мәсет һәм сиркәүҙе 4 ноябрҙә билдәләнгән Халыҡтар берҙәмлеге көнөндә асырға әҙерләнәләр.

✓ "Ватанды һаҡлаусылар" дәүләт фондының Башҡортостан филиалына 3 йыл тулды. Ошо ваҡыт эсендә фонд Махсус хәрби операция ветерандары һәм уларҙың ғаиләләре өсөн ышаныслы партнерға әүерелде, 115 мең МХО ҡатнашыусыһына һәм уларҙың яҡындарына ярҙам күрһәтелде, шулай уҡ 135 мең мөрәжәғәт хәл ителде. Республикала 140 социаль координатор эшләй, улар өйҙәренә ҡайтҡан һәр кем менән бәйләнеш тота һәм яҡындарын юғалтҡан ғаиләләргә ярҙам итә. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙенең ҡотлауында ошо ҡатмарлы эшкә йәлеп ителгәндәрҙең барыһына ла ихлас рәхмәт белдерҙе.

✓ Авария хәлендәге йорттарҙа йәшәүселәрҙе яңы тораҡҡа күсереү өсөн республикаға федераль бюджеттан 899,9 миллион һум аҡса бүленә, тип хәбәр итә БР Төҙөлөш һәм архитектура министрлығы. Министр вазифаһын башҡарыусы Артем Ковшов әйтеүенсә, 2026-2027 йылдарҙа өсөнсө этап барышында күп фатирлы 31 өйҙә йәшәүселәрҙе күсереү ҡаралған. "Быйыл Баҡалы, Бәләбәй, Белорет, Благовещен, Бөрө, Дүртөйлө, Ишембай, Краснокама, Учалы, Шишмә райондарында, шулай уҡ Нефтекама ҡалаһында йәшәгән 810 кеше яңы торлаҡ асҡыстары алырға тейеш", - тине ул.

✓ Башҡортостанда йәйге миҙгелдә 390 аттракцион файҙаланыуға яраҡлы тип табылған. Был хаҡта Дәүләт техник күҙәтеү буйынса дәүләт комитеты рәйесе Урал Искәндәров хәбәр итте. Аккредитацияланған лабораториялар белгестәре 28 аттракциондың техник торошон яраҡһыҙ тип тапҡан. Рөхсәт бирмәүҙең төп сәбәптәре - идара итеү системаларының боҙолоуы, миҙгел араһы һаҡлау шарттарының үтәлмәүе, ер участкаһын файҙаланыу йәки ҡуртымға алыу ваҡыты тамамланыуы.

✓ *Цехтағы һәйкәл мотлаҡ реставрацияланасаҡ. Уны нисек бар, шулай йүнәтеп, яңы урынға, көмбәҙ аҫтына ҡуйырға тәҡдим ителде. Беҙ һәйкәлдә 2027 йылға тергеҙергә вәғәҙә иттек һәм быға ынтылырға кәрәк буласаҡ.*



*КӨН ТЕМАҺЫ*

# ТАҒЫ ЛА ҺӘЙКӘЛ ТУРАҺЫНДА

**"Салауат Юлаев һәйкәле"н реставрациялау буйынса Күҙәтеү советының сираттағы ултырышы булып үтте. Йыйылыусылар иң тәүге сиратта күптән көтөлгән лаборатория һығымтаһы менән ҡыҙыҡһынды.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, федераль әһәмиәттәге мәҙәни мираҫ объекты булған Салауат Юлаев һәйкәле әлеге ваҡытта постаменттан алынған һәм реставрация цехында тора. Һуңғы ваҡытта йәмәғәтселек вәкилдәре цехта бер нисә тапҡыр булды һәм скульптураның бөтә етешһеҙлеген үҙ күҙҙәре менән күрҙе. Эксперттар шулай уҡ һәйкәлдең сифатһыҙ материалдан эшләнгәнен асыҡланы.

Лаборатория һығымтаһын Мельников исемендәге Үҙәк иретмә һәм металдар ғилми-тикшеренеү институты эшләне. Документ менән реставрациялау буйынса Рәсәй Художество академияһы фонды директоры Анна Пышта таныштырҙы. Ул Салауат Юлаев һәйкәлендәге суйын бронзаланмаған, тип, ҡайһы бер бәхәстәргә нөктә ҡуйҙы.

- Лаборатория тикшеренеүҙәре шуны күрһәтте: суйынға бронза яғылмаған. Бронза авторҙың ниәтендә генә ҡалған, тарихи документтарҙа ғына бар. Скульптура эшкәртелмәгән, - тип белдерҙе Анна Пышта. - Әгәр кемдер беҙҙең отчет менән ҡыҙыҡһынһа, беҙ уны өйрәнеү өсөн бирә алабыҙ, бында бер ниндәй ҙә сер юҡ. Был һығымтаны оҙаҡ көттөк. Беҙ материалдың составын тикшерҙек, һәйкәлдән экспозиция күренешенә йоғонто яһамаҫлыҡ участкаларҙан дүрт өлгө һайлап алдыҡ. Был дүрт өлгө анализға дусар ителде. Беҙ суйын скульптураны бронзалау буйынса бер нисә тапҡыр күтәрелгән бәхәсле мәсьәләне билдәләнек. Материал төрлө. Бында мин күп тапҡырҙар яҡшы суйын барлығын ишеттем. Эш уның насар йәки яҡшы булыуында түгел. Масса өсөн, йыйылма конструкция өсөн был бер төрлө түгел, ул айырым урындарҙа артыҡ көсөргәнеш тыуҙыра, һөҙөмтәлә үҙен-үҙе емереүгә дусар итә...

Ҡыҙыҡлы архив материалдары менән Башҡортостандың Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау Һәм файҙаланыу буйынса ғилми-производство үҙәге директоры, дәүләт тарихи-мәҙәни экспертизаһын үткәреү буйынса аттестация үткән эксперт Данир Ғәйнуллин уртаҡлашты. Баҡтиһәң, был ваҡиға детектив тарихҡа яҡын. Архив документтары, ул саҡтағы РФ Мәҙәниәт министры Екатерина Фурцева һәм БР Мәҙәниәт министры Ғәфүр Вәхитов менән хат алышыуҙарҙан бронзаның нисек суйынға әйләнеүен асыҡ күрергә мөмкин.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, һәйкәлдең авторы, совет скульпторы Сосланбәк Тавасиев башта уҡ Салауат Юлаев һәйкәлен бронзанан ҡойорға йыйынған. Ҡарар ҡабул ителә, бойороҡтар сығарыла, 26 тонна бронзаға аҡса бүленә. Әммә 1962 йылда Ленинградтағы "Монументскульптура" заводында төҫлө металдарҙы ҡулланыуҙы сикләү тураһында күрһәтмә арҡаһында бронзаны суйынға алмаштырырға ҡарар ителә.

Рәсәй Художество академияһы академигы Александр Мирианашвили билдәләүенсә, вариҫтар раҫлаусы документтар тапшырған. "Автор үҙе бронзанан һәйкәл төҙөргә теләгән. Хәҙер Тавасиевтың ниәтен тергеҙеү мөмкинлеге бар. Беҙ һеҙҙән ҡарар көтәбеҙ", - тине Александр Гурамович, совет ағзаларына мөрәжәғәт итеп.

Рәсәй Художество академияһы президенты Василий Церетели Салауат Юлаев һәйкәлен постаменттан төшөрөп, реставрация цехына күсермәйенсә, уның торошо тулыһынса билдәле булмауын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Процесс башланғас, эксперттар металдың арығанлығын һәм күп емереклектәрен тапҡан.

- Дөйөм алғанда, һәйкәлдең автор күсермәһен бронзанан яһап, уны ҡуйыу дөрөҫөрәк булыр. Ә Тавасиевтың уникаль әҫәрен музейға ҡуйырға, һауа шарттарынан нығыраҡ һаҡланған музейҙа граждандар өсөн асыҡ итергә кәрәк, - тип белдерҙе Василий Церетели. - Кәңәшегеҙгә һәм эксперттарға рәхмәтлемен, улар барыһы ла килә, реставрация барышын ҡарай, был бик мөһим. Тәү сиратта, бында теүәл күсермәләр алынасаҡ һәм был формалар Санкт-Петербургҡа, Салауат Юлаев үҙе суйындан ҡойолған "Монументскульптура" заводына күсереләсәк. Ул бронзанан шул уҡ заводта, шул уҡ мейестәрҙә ҡойоласаҡ.

РФ Йәмәғәт палатаһы ағзаһы, БР Йәмәғәт палатаһы рәйесе урынбаҫары, тарихсы Рәмил Рәхимов Салауат Юлаевтың республика өсөн образ



булараҡ мөһим икәнен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Әгәр Ағиҙел йылғаһы өҫтөндәге данлыҡлы ҡурғанға һәйкәлдең ныҡлы бронза күсермәһен ҡуйһалар, ә суйын скульптура музейҙа урын алһа, дөрөҫ буласаҡ. Бронза еңелерәк, һығылмалыраҡ һәм оҙайлыраҡ, тип тағы бер тапҡыр билдәләне совет ағзалары.

Күҙәтеү советы ағзаларының реставрацияның финанс өлөшө тураһында һорауҙарына яуап итеп Салауат Ҡолбахтин һәйкәлде реставрациялауға аҡса һалыныуын, эштәр график буйынса барыуын аңлатты.

Әйткәндәй, Хөкүмәттең был аҙнаалағы кәңәшмәһе барышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров бәхәскә нөктә ҡуйҙы: "Реставраторҙар беҙгә һәйкәлдең 80 процентын үҙгәртергә, яңы элементтар эшләргә кәрәк, тине. Шуға күрә фекер алышыу барышында миндә йәмәғәтселек фекере хөкөмөнә һәм республика халҡының фекеренә тәҡдим иткән идея тыуҙы. Беҙгә артабан ҡатмарлыраҡ, әммә ышаныслыраҡ һәм, минеңсә, стратегик яҡтан отошлораҡ юл менән барырға мөмкин - яңы һәйкәлде төп нөсхәнең тулы күсермәһе итеп бронзанан ҡойорға кәрәк. Әгәр элекке һәйкәлде реставрацияланһаҡ - ул 10, 20 йәки 50 йыл торасаҡ, ә бронза һәйкәл оҙайлыраҡ буласаҡ", -тине ул.

Шулай уҡ республика Башлығы тарихи ҡомартҡының яҙмышын билдәләне: "Цехтағы һәйкәл мотлаҡ реставрацияланасаҡ. Уны нисек бар, шулай йүнәтеп, яңы урынға, көмбәҙ аҫтына ҡуйырға тәҡдим ителде. Был яңы тарихи урынға, музейға әйләнәсәк. Беҙ һәйкәлде 2027 йылға тергеҙергә вәғәҙә иттек һәм быға ынтылырға кәрәк буласаҡ". Радий Хәбиров үҙенең Хакимиәтенә Салауат Юлаев һәйкәлен бронзанан тергеҙеү планын төҙөргә ҡушты.

*ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ*

# ЕТДИ ҺЫНАУҘАР АША



**"Пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итергә теләүселәрҙән шылтыратыуҙар республиканан ғына түгел, башҡа төбәктәрҙән дә килә", - ти Контракт буйынса хәрби хеҙмәткә һайлап алыу пункты офицеры капитан Фәдис Солтанов.**

Уның һүҙҙәренсә, күрше өлкәләрҙә йәшәүселәр Башҡортостанда МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә тәғәйенләнгән ярҙам саралары менән ҡыҙыҡһына. Уларҙың һорауҙарына белгестәр төплө яуап бирә. Шарттарға риза булып, "Защита" һайлап алыу пунктына килгәндәр унда бушлай йәшәй һәм өс тапҡыр туҡлана. Хеҙмәткә һайлап алыу буйынса медицина тикшереүе үтеп, юридик консультация алып, финанс һәм башҡа мәсьәләләр хәл ителгәс, контракт төҙөлә.

"Йәштәр пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәрендә хеҙмәт тураһында күберәк ҡыҙыҡһына. Уларҙың әле тормош тәжрибәһе самалы, шуға күрә беҙ мөрәжәғәт итеүселәргә бөтә кәрәкле мәғлүмәттәрҙе еткерәбеҙ: ҡасан хеҙмәтте ҡалдыра алалар, ниндәй түләүҙәр, льготалар ҡаралған һәм башҡалар. Белешмәләр алғандан һуң, Махсус хәрби операция зонаһында БПЛА операторы булып хеҙмәт итергә теләк белдергәндәр менән беҙҙең инструкторҙар эшләй башлай. Әңгәмәләшеү, тест һөҙөмтәләре, практик дәрестәр йәш кешенең БПЛА операторына яраҡлымы, юҡмы икәнен күрһәтә. Теге йәки был сәбәптәр арҡаһында яраҡһыҙ тип табылғандарҙы пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәренең техник хеҙмәтенә яҙабыҙ", - ти офицер.

Әлеге ваҡытта дрон операторы булып хеҙмәт итергә теләгән ир-егеттәр йәше "олоғая" бара, тип билдәләй ул. Әгәр әле яңыраҡ ҡына пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәренә башлыса 20 йәшлек егеттәр әүҙем яҙылһа, хәҙер улар артынан олораҡтар ҙа эйәрә икән.

"Йәш сикләүе бер аҙ күтәрелә, әммә йәштәр барыбер йышыраҡ мөрәжәғәт итә. Ҡалай ҙа беҙ физик һәм психологик әҙерлек кимәле, моторика, заманса цифрлы ҡорамалдарҙа эшләү һәләте буйынса һайлап алабыҙ. Кандидаттың нәҡ ошо сифаттарына ҙур иғтибар бирәбеҙ. Пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәре бөгөнгө көндә Рәсәй Ҡоралды көстәренең элиталы ғәскәр төрҙәренең береһе булып тора. Шуға күрә күптәрҙең БПЛА операторы булып хеҙмәт итеү мәсьәләһе менән ҡыҙыҡһыныуы һәм Оборона министрлығы менән контракт төҙөүе ғәжәп түгел", - тигән фекерҙә Фәдис Солтанов.

БПЛА подразделениеларында хеҙмәт итеү тураһында тулы мәғлүмәтте башбат.рф сайтында һәм 122 телефоны буйынса алырға мөмкин. Шулай уҡ быны йәшәгән урын буйынса хәрби комиссариата, Өфө ҡалаһы, Революция урамы, 156 адресы буйынса урынлашҡан Контракт буйынса хәрби хеҙмәткә һайлап алыу пункты аша ла эшләп була.

**Ҡасим ҒӘҘЕЛШИН әҙерләне.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓2027 йылда төҙөкләндереү объекттары өсөн тауыш биреү "Тормош өсөн инфраструктура" милли проектының "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" федераль проекты буйынса уҙғарыла. 2027 йылда Салауат Юлаев һәйкәлен һәм уның тирәләй майҙанды төҙөкләндереүҙе тамамлау планлаштырыла. Ошо биләмәнең ниндәй буласағы Башҡортостан халҡынан тора. Башҡортостанда йәшәүселәр Салауат Юлаев майҙанының дизайн-проектын һайларға мөмкин. Архитекторҙар милли батырыбыҙ һәйкәле янындағы майҙандың дизайн-проектын төҙөгән. Республикабыҙҙың йөҙөк ҡашы булған урындың дизайнын һайлауҙа 14 йәше тулған һәр кем ҡатнаша ала.

✓11 июндә Өфөнөң "Башҡортостан" дәүләт концерт залында "Управдом" республика форумы үтә. Сараға торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһендәге көнүҙәк мәсьәләләрҙе тикшереү өсөн күп фатирлы йорттар советы рәйестәре, активистар, йәмәғәт берекмәләре ағзалары, идара итеүсе ойошмалар, министрлыҡтар һәм ведомстволар вәкилдәре саҡырылған. Форум программаһында оҫталыҡ дәрестәре үткәрелә, мөһим мәсьәләләргә ҡағылышлы бер нисә секция эшләйәсәк. Шуларҙың береһе - "Күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәр өсөн ресурстар тотоноу күләмен кәметеү юлдары".

✓8-9 июлдә Сибайҙа "Урал Арьяғы" VIII Бөтә Рәсәй инвестиция һабантуйы уҙа. Ошо көндәрҙә Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров әҙерлек буйынса ойоштороу комитеты ултырышын үткәрҙе. Эшлекле сара быйыл да федераль һәм төбәк власть органдары вәкилдәрен, Рәсәйҙең алдынғы эшҡыуарҙарын, инвесторҙарын, тармаҡ эксперттарын һәм йәмәғәт фекере лидерҙарын йыясаҡ. "Башҡортостандың Һәм Урал арьяғының ыңғай инвестиция имиджын күтәреү көнүҙәк мәсьәлә булып ҡала. Инвестиция һабантуйы тәү сиратта нәҡ ошо маҡсатта ойоштороla", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Андрей Назаров.

✓Республикала "Тәртипле водитель" акцияһы башланды. Ул 30 июнгә тиклем дауам итә. Дәүләт автоинспекцияһының төбәк идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, акцияның төп маҡсаты - юл-транспорт ваҡиғаларын иҫкәртеү һәм һабантуйҙар ваҡытында юлдарҙа тәртип һаҡлау. Автоинспекция хеҙмәткәрҙәре айырыуса иҫерек, транспорт саралары менән идара итеү хоҡуғынан мәхрүм ителгән йәки таныҡлыҡһыҙ руль артына ултырыу, билдәләнгән тәртиптә теркәлмәгән машина менән юлға сығыу осраҡтарына иғтибар итәсәк.

✓Башгидромет синоптиктары Башҡортостанда июнь айына һауа торошона фараз бирҙе. Уртаса тәүлек һауа температураһы нормаға яҡын була (норма +17,4°). Ә бына айлыҡ яуым-төшөмдөң нормаға яҡын һәм унан күберәк булыуы фаразлана (норма 50-70 миллиметр).

***✓ Әммә ямғырҙан һуң бәшмәк кеүек баш ҡала йөҙөн баҫып алған 20-шәр ҡатлы йорттарҙа капремонт башҡарып йөрөгән кешеләрҙе осратҡан юҡ әлегә, ремонтсылар хатта 50-25 йыл буйы ремонт күрмәгән йорттарҙа ла шыпа күренмәйҙәр.***

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# ҮҘ АҠСАҺЫНА ҮҘҘӘРЕ ХУЖА




**Май байрамдары шау-шыуы астында, өҫтәүенә, пилотһыҙ шартлатҡыстар хәүефенән албыраған мәлдәрҙә, халыҡ елкәһенә тағы бер түләү һалынып ҡуйҙы: торлаҡ йорттарҙың күпселеге быға тиклем күрмәгән-белмәгән капиталь ремонтҡа түләү тағы ла арттырылды.**

Дөрөҫ, был хаҡта алдан әйтелә килде-килеүен, ләкин квитанциялағы һандар беҙгә әлегә тәғәйен генә билдәле булмаһа ла, майға түләү ҡағыҙы килгәнсә үк алдан яҡынса хисаплап ҡарарға мөмкин. Ә һандар түбәндәгесә: ағымдағы йылдың 1 майынан күп ҡатлы йорттарҙың 6-сы ҡатына тиклем йәшәүселәр хәҙер торлағының кв метрына - 13 һум17 тин, ә 7-се ҡаттан юғарылар 13 һум 91 тин түләргә тейеш буласаҡ. Был ике "категория" өсөн взнос күләмендәге айырма кв метрына 74 тин тәшкил итә. Ә ни өсөн бер үк йортта йәшәүселәр, нисәнсе ҡатта йәшәүенә ҡарап, төрлөсә түләргә тейеш һуң? "Кемдең ыҙмаһы бейегерәк", тигәндәй, шуларға түләү ҙә арта барасаҡ икән, сөнки, Төбәк операторы аңлатыуынса, бейек ҡаттарҙа, йәнәһе лә, ремонт эштәре ҡатмарлыраҡ, шуға күрә инженер системаларын йүнәтеү ҙә ҡиммәтерәккә төшә, имеш.

Әммә ямғырҙан һуң бәшмәк кеүек баш ҡала йөҙөн баҫып алған 20-шәр ҡатлы йорттарҙа капремонт башҡарып йөрөгән кешеләрҙе осратҡан юҡ элегә, ремонтсылар хатта 50-25 йыл буйы ремонт күрмәгән йорттарҙа ла шыпа күренмәйҙәр. Шуға күрәлер ҙә, Өфөләге үткән быуаттың 70-се йылдарында ашыҡ-бошоҡ төҙөлгән эре панелле йорттарҙың стеналарына тышҡы яҡтан арҡыс-торҡос цемент ҡоршауямауҙар һалынып бөткән. Панель стеналар ярыла, тарала башлағас һалынған инде ул ямауҙар. Сипайлово биҫтәһендә айырыуса күп ундай "йәрәхәтле" торлаҡтар. Ә инде йылдар буйы яҙлыкөҙлө һәм йәйге ҡойма ямғырҙарҙа түшәмдән һыу ағып, яфаланып, даими стресс хәлендә йәшәүсе ғаиләләрҙең иҫәбе-һаны юҡ. Стеналары күгәреп, мүкләнеп бөткән фатирҙар бар, ә бындай торлаҡта йәшәү үлемесле хәүеф менән янай, сөнки дымлы шарттарҙа барлыҡҡа килеүсе үңәҙ (плесень) тын юлдары аша организмға эләгеп, микротоксиндары менән кешене ағыулай һәм сиргә һабыштыра: аллергия, ҡурылдай астмаһы, үпкә-тын юлдары сирҙәре, хәлһеҙлек, баш ауыртыу кеүек билдәләр башлана. Ә Төбәк операторҙары бындай хәлгә төкөрә генә - уларға ай һайын взнос аҡсаһы килеп торһа, шул еткән. Улай тиһәң, был да әҙ әле уларға. Йылдың-йылы взнос күләме арттырыла ғына бара, ә ремонт тигән нәмә - юҡ.

Шуға күрә лә хәҙер, ремонт көтөп-көтөп тә һөҙөмтә булмағас, аптыраған халыҡ дилбегәне үҙ ҡулдарына алырға булды: ҡайһы бер МКД (күп фатирлы йорттар) советтары взнос аҡсаһы "елгә осоп" йә "төпһөҙ ҡоҙоҡҡа" китеп тормаһын өсөн үҙ иҫәптәрен асырға ҡарар итте. "16,5 мең күп фатирлы йорт хужалары үҙ аҡсаларын Төбәк операторына түләп торһа, 700-ләгән йорт халҡы капремонт фондын үҙҙәренең махсус иҫәптәренә туплап бара",- тине БР премьер-министры Андрей Назаров һәм муниципалитеттарға ошо махсус иҫәп фондының һөҙөмтәле файҙаланыуын контролдә тоторға ҡушты. Республиканың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирина Голованова әйтеүенсә, бындай осраҡта МКД советы тупланған аҡсаны үҙҙәре файҙалана, үҙҙәре эшсе көс (подрядсы) таба һәм яллай, үҙҙәре смета төҙөй, ремонт эштәрен ҡабул итеп ала. "Үкенескә, - ти министр, -күп осраҡта был эш капиталь түгел, ә ағымдағы ремонт булараҡ килеп сыға, сөнки махсус иҫәп хужалары тейешле техник һәм юридик квалификацияға эйә булмау сәбәпле, сифат гарантияһын талап иткән килешеү төҙөргә һәләтһеҙ, шулай уҡ эш барышына техник һәм төҙөлөш нескәлектәренән сығып контроллек итә алмай".

Министрҙың был фекере менән ризалашмаусылар ҙа бар, сөнки МКД хужалары ремонт барышын контролләүсе һәм эштәрҙе алып барыусы техник яҡтан белемле төҙөүсе йә прораб яллай алмаҫ инеме ней? Махсус иҫәпте, исмаһам, эшкә ҡушырға мөмкинлек тыуа, юғиһә, дөйөм ҡаҙанға китеп торған капремонт взносын түләүҙән бер ниндәй һөҙөмтә лә юҡ бит!

Ғөмүмән, һуңғы йылдарҙа капиталь ремонт мәсьәләһе, шулай уҡ торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр торошо йәмғиәттә көсөргәнеш тыуҙырыусы киҫкен проблемаларҙың береһенә әүерелде. Ошо тема буйынса эксперт һәм йәмәғәтсе Дмитрий Бондарь матбуғаттағы сығышында һөйләүенсә, әлеге ваҡытта Монополияға ҡаршы федераль хеҙмәт (ФАС) электр энергияһын файҙаланған һәм ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар сығарған өсөн халыҡтан түләтелеүсе хаҡтарҙың хисап тәртибен тикшерә башлаясаҡ икән. Әгәр документтарҙа ысынбарлыҡҡа тап килмәгән осраҡтар һәм закон боҙоуҙар асыҡлана ҡалһа, ФАС үҙ хоҡуғынан файҙаланып, нормативтарҙы кәметеү мөмкинлеген атҡарасаҡ һәм законһыҙлыҡ ҡылған етәкселәрҙе Административ хоҡуҡ боҙоуҙар кодексы нигеҙендә эшенән бушата йә башҡа төрлө яуапҡа тарттырыу сараһын ҡарай аласаҡ. Үкенескә күрә, ФАС-тың ошо һәм быға тиклем дә белдергән изге ниәттәре әлегә тик вәғәҙәлә генә ҡа

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ? Халҡыбыҙҙың оло хазинаһы булған "Урал батыр" эпосы тураһында нимә беләһегеҙ, уны уҡығанығыҙ бармы? Ундағы аҡыл-фекер беҙҙең йәшәйешебеҙҙең нигеҙе, тигәнгә нисек ҡарайһығыҙ?



***Гөлсәсәк ШӘРИПОВА, Урал батыр эпосын яттан һөйләүселәр республика бәйгеһендә Гран-при яулаусы:*** Урал батыр эпосы минең өсөн бик ҡәҙерле. Башланғыс кластарҙа тәүге уҡытыусым Юнысова Әминә Фәрит ҡыҙы асҡайны миңә был серле донъяны. Шул ваҡыттарҙағы был боронғо хазинаға ҡағылышлы булғаным менән ғорурланыу тойғоһо минең кескәй күңелемә уйылып ҡалғайны. Ә 2018 йылда, 9 класта уҡыған мәлдә, остазым Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Әмирханова Фаягөл Тимербай ҡыҙының ҡанаты аҫтында эпосты яттан һөйләп, республика кимәлендә Гран-при яулағайным. Шул осорҙарҙа йәй буйы китапты ҡулдан төшөрмәй, ҡобайырҙы ятлап йөрөгәнем, команда менән сыр-сыу килеп сәхнәләштереү өсөн өҙөк әҙерләгәнебеҙ мәктәп ваҡыттарынан ҡалған үҙе бер йылы хәтирә бит ул. Уҡытыусыларыма һәләттәремде асҡан өсөн сикһеҙ рәхмәтлемен.

Минең өсөн иң яратҡан, эпостың төп идеяһын сағылдырған өҙөктәрҙең береһе - ул үлә алмай тилмереп бөткән ҡарттың Уралға әйткән һүҙҙәре:

*"...Донъяла мәңге*
*ҡалыр эш -*
*Донъяны*
*матур төҙөгән,*
*Бағты мәңге*
*биҙәгән -*
*Ул да булһа*
*яҡшылыҡ..."*

Урал менән Шүлгән Йәншишмәне эҙләп сығып китәләр, әммә эпостың аҙағында үлем - ул йәшәйештең нигеҙе, мәңгелек - ул физик тәндә үлмәйенсә йәшәү түгел, ә әҙәм заты ҡалдырған тап яҡшы эштәр икәнлеге асыҡлана бит. Кешенең яҡшы исеме ("аты") ҡалһа, йәшәһә, тимәк, ул да тере, мәңге. Беҙгә, йәштәргә, үҙ ғүмеребеҙҙә ошо хаҡта онотмаҫҡа кәрәк, тип иҫәпләйем.

Эпосты белеүем менән ғорурланам да, яуаплылыҡ та тоям. Киләсәктә ошо хазинабыҙҙы белеүҙе йола итеп балаларыма тапшырырға, Аллаһ бирһә, уларҙың да был эпосты яттан белеүенә өлгәшергә теләйем.

***Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА, Бөрйән районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе:*** Ысынында, халҡыбыҙҙың оло хазинаһы ул "Урал батыр"ҡобайыры. Унын аҡылына төшөнөр өсөн бер кимәл

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан торлаҡ-коммуналь хужалыҡты яңыртыу темптары буйынса лидерҙар иҫәбенә инде. Төбәктә 2022 йылдан алып 269 километр инженер селтәрҙәре файҙаланыуға тапшырылған. Волга буйы федераль округы төбәктәрендә Милли именлек фондынан льготалы займ һәм федераль бюджет ярҙамы менән коммуналь инфраструктураны яңырталар. Бөгөнгө көнгә округта әлеге программалар буйынса 1000-гә яҡын торлаҡ-коммуналь хужалыҡ объекты сафҡа индерелгән.

✓Башҡортостан дәүләт аграр университетының "Башаҡ" студенттар отряды хеҙмәт семестрын башланы. Өфөлә Йәштәр һарайы алдындағы майҙанда эш миҙгеле стартына арналған тантаналы митинг булып үтте. Сәләмләү һүҙҙәре менән отряд ағзаларына университет ректоры Илдар Ғәбитов мөрәжәғәт итте. Ул теоретик белемде практикала тормошҡа ашырыу ваҡыты еткәнен билдәләне һәм хәүефһеҙлек техникаһы талаптарын үтәү кәрәклегенә иғтибарҙы йүнәлтте. Отрядтар командирҙары төбәктең агросәнәғәт комплексы объекттарындағы эштәрҙе үтәүгә путевкалар алды.

✓Башҡортостанда 1 июндән һыу инеү миҙгеле башланды. Бөтәһе 264 пляж асыла, уларҙа йәмәғәт ҡотҡарыусылары дежурлығы ойоштороla. Йәйге миҙгелгә йәмғеһе 560 ял итеү урыны асыла. Һуңғы биш йылда республикала пляждар һаны 2,2 тапҡырға артҡан. Һөҙөмтәлә һыуҙа һәләк булыусылар һаны 1,5 тапҡырға кәмегән. Синоптиктар фаразлауынса, июнь айы ямғырлы булырға вәғәҙәләй. Метеохеҙмәттәр мәғлүмәттәренә ярашлы, тәүге декадала көндөҙгө һауа температураһының яҡынса +20, +25 градус булыуы көтөлә. Ямғыр яуыуы, ә төндәрен һалҡынса булыуы фаразлана.

✓Былтыр Башҡортостанда 732 кеше сысҡан биҙгәген йоҡторған. "Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, 2 үлем осрағы теркәлгән, - тип белдерҙе Роспотребнадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығы етәксеһе Анна Казак "Башинформ" агентлығында уҙған матбуғат конференцияһында. - Быйыл яҙҙың иртә килеүе һәм һауа температураһының юғары булыуына бәйле сысҡандарҙың популяцияһы артыуын, сирлеләрҙең күбәйеүен фаразлайбыҙ. Ауырыуҙарҙы иҫкәртеү өсөн граждандарҙың гигиенаһы һәм тәртибе мөһим роль уйнай. Кешеләр баҡсала эшләгәндә, өмә ваҡытында, урманда һаҡлыҡ сараларын онотмаҫҡа тейеш".

✓Башҡортостан спортсылары терәк-хәрәкәт аппараты зарарланған ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар араһында велоспорт буйынса Рәсәй чемпионатында еңеү менән ҡайтты. Ярыштар Ижевск ҡалаһында үтте. Беҙҙең командa иҫәбендә дүрт миҙал бар, тип хәбәр итә Спорт министрлығы. Александр Давидович ваҡытҡа шәхси уҙышта (20 километр), шулай уҡ ир-егеттәр араһында 64 километрға төркөм уҙышында көмөш призер булды. Елизавета Штырляева ла ваҡытҡа шәхси уҙышта (20 километр) һәм ҡатын-ҡыҙҙар араһында 60 километрға төркөм уҙышында көмөш миҙал яуланы.

✓ *Йорттағы балкон, лоджияларҙы, шулай уҡ дөйөм файҙаланыу урындарын (баҫҡыс майҙансыҡтары, коридор һ.б.) склад урынына ҡулланып, сүп-сар, кәрәкмәгән иҫке йәки шәхси әйберҙәр менән тултырыу бөтөнләй тыйыла.*



ла килә. Ғөмүмән, ФАС-тың барлығы ни ҙә, юҡлығы ни - барыбер ҡулланыусы өсөн уның файҙаһы - бер тин, сөнки самаһыҙ хаҡтар артыуҙы был "арҡа һөйәкһеҙ" ойошма контролдә тоторға һәм халыҡ мәнфәғәтен яҡларға һәләтһеҙ булып сыҡты.

Әле бына 1 октябрҙән торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн хаҡтар тағы ла артасаҡ: төбәктәргә бәйле тарифтар 8-ҙән алып 22 процентҡаса һикерәсәк. Был коммуналь хеҙмәттәргә хаҡтарҙың бер йыл эсендә генә ике тапҡыр ҡиммәтләнеүе буласаҡ. Ошо хаҡта үҙәк мәғлүмәт саралары "әҙәм башына икеләтә туҡмаҡ" тип яҙып сыҡты. Шуныһы аңлашылмай: уртаса эш хаҡы 200 мең, ә ҡайһы бер тармаҡтарҙа унан да артығыраҡ булған Мәскәүҙә тарифтар ни бары 9,8 процентҡа ҡиммәтләнһә, ике-өс тапҡырға тип әйтерлек аҙыраҡ эш хаҡы алған күп кенә башҡа төбәктәр халҡы өсөн, мәҫәлән, Ставропольела, Төньяҡ Осетияла, Ҡабарҙы-Балҡарҙа, Архангельск, Кемерово, Новосибирск, Орел, Һамар өлкәләрендә коммуналь хеҙмәттәргә түләү 19-13 процентҡаса арта. Башҡортостанда - 10,7 процент: һыу менән тәьмин итеү +10,6 процент (йәғни 44,84 һум/куб.м), һыу үткәреү +12,7 процент (45 һум/куб.м), йылылыҡ+12,7 процент (3584 һум/Гкал), электр энергияһы+11,2 процент (5,55 һум/квт.сәғ.), газ+9,6 (11,67 һум/куб.м). Тарифтар буйынса БР дәүләт комитетында иҫәпләп сығарыуҙарынса, фатир хужаларының сығымдары яҡынса түбәндәгесә буласаҡ: 30 кв.метрлыҡ бер бүлмәле фатир өсөн айына уртаса 600 һум (йәмғеһе 6,5 мең), 50 кв.метрлы ике бүлмәле фатир өсөн 881 һум (йәмғеһе 8,8 меңләп), өс бүлмәле фатир өсөн 1100 һум (11 меңдән артығыраҡ).

Шул да мәғлүм булһын: май баштарынан алып күп фатирлы йорттарҙа йәшәү тәртибен раҫлаусы яңы ҡағиҙәләр индерелде. Ул шулай уҡ күршеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәттәренә лә ҡағыла. Йорттағы тауыш кимәле һәм шаушыуҙарға (был төндә музыка ҡысҡыртып уйнатыуға ғына түгел, ә тыйылған ваҡыттарҙа ремонт эштәре менән булыу һәм хатта көнкүреш техникаһы шауына ла ҡағыла) контроль көсәйтелә һәм ошо йәһәттән ҡағиҙә боҙоу осраҡтарына ҡарата штраф сараһы ҡарала. Йорттағы балкон, лоджияларҙы, шулай уҡ дөйөм файҙаланыу урындарын (баҫҡыс майҙансыҡтары, коридор һ.б.) склад урынына ҡулланып, сүп-сар, кәрәкмәгән иҫке йәки шәхси әйберҙәр менән тултырыу бөтөнләй тыйыла. Фатирын үҙ белдеге менән үҙгәртеп төҙөү йәки инженер системаларын башҡаса тәртиптә ҡороу кеүек "үҙэшмәкәрлек"тәр ҙә ҡәтғи контролдә тотоласаҡ. Фатир хужаларын тәртипкә саҡырыу, баяғыса, ҡағыҙҙа ғына тороп ҡалмаһа...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

гә етеп үҫешергә тейеш кешенең аңы.

Эпосты тәү башлап 1977 йылда Мәскәүҙә 12000 тираж менән ике телдә баҫылған вариантынан уҡығайным. Үҙем ул саҡта Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институты студенты инем, китап миңә фәнни конференцияла ҡатнашҡан өсөн бүләк ителгәйне. Әлбиттә, ул саҡтағы аң кимәлем менән мин уны фольклор әҫәре, әкиәт итеп кенә ҡабул иттем һәм китап, шул уҡыуҙан бүтәнсә асылмайынса, шәхси китапханамда һаҡланды.

Икенсе тапҡыр китапҡа 2003 йылда ғына мәжбүри мөрәжәғәт итергә тура килде. Инде уҡытыусы булып эшләгән дәүерҙә, Стәрлетамаҡ командаһын Баймаҡ районында, Талҡаҫ күле янындағы лагерҙа үтәсәк "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр конкурсына әҙерләп алып барыу бурысы йөкмәтелгәйне миңә. Шул саранан башлап инде 23 йыл ҡобайырҙың төрлө йылдарҙа баҫылған варианттары, уны өйрәнеүсе авторҙарҙың хеҙмәттәре, төрлө йылдарҙағы гәзит-журналдарҙан алынған мәҡәләләр - барыһы ла күҙ уңында.

2013 йылда эпостың серенә төшөнөү өсөн үҙемдең үҙаллы эҙләнеүҙәрем аша килгән фекерҙәремде "Китап" нәшриәтендә сыҡҡан "Йәншишмә ҡайҙан башлана?" исемле баҫмамда сағылдырҙым. Артабанғы эҙләнеүҙәремдә Урал батырҙың бәйғәмбәрлеген Ҡөрьән аша дәлилләп, үткән йыл Рәсәй дәүләт Ислам университетын тамамлағанда, диплом эше итеп уңышлы яҡланым.

Әлеге көндә Мәрйәм апай Бураҡаева етәкселегендә сығарылған "Урал батыр" ҡобайыры - башҡорт халҡының рухи мираҫы" китабын өйрәнеп, М. Буранғолов яҙып алған варианттан ҡайһы бер үҙгәрештәр, тайпылыуҙарҙы күҙ уңында тотоп, тәүге китабымдың дауамын яҙып бөтөү өҫтөндәмен. Был өлкәлә ҡыҙыҡһыныусыларға тәҡдим итерлек бик ҡыҙыҡлы, фәһемле фекерҙәрем, асыштарым булыр унда.

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# УТ МЕНӘН УЙНАЙҘАР

**Май айының һуңғы көнө - 31-енә ҡарай төн эсендә украин дрондары һыныҡтары төшөп, Ростов өлкәһендәге Матвей Курганы ауыл хужалығы етештереүселәрен тәьмин итеүсе хосусилаштырылған предприятие - ягыулыҡ һаҡлағысына ут ҡабына һәм янғын 3 600 кв м майҙанды ялмап ала. Урындағы халыҡ эвакуацияланa. Янғын һүндереүҙә йөҙәрләгән кеше ҡатнаша, белгестәр янғын эҙемтәләренең артабан таралыуына мөмкин тиклем юл ҡуймаҫҡа тырыша.**

Бынан тыш, ошо уҡ төн эсендә самолет рәүешендәге 11 украин дроны Һарытау өлкәһенең граждандар объекттарын утҡа тотто. Торлаҡ йорттарҙа емереклектәр, зыян күреүсе кешеләр бар. ВСУ-ның Херсон өлкәһе Геническ ҡалаһына һөжүме һөҙөмтәһендә 11 кеше йәрәхәттәр ала, 6 йәшлек бала һәләк була. Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнөн фашистик Киев режимы ана шулай билдәләй, тине был турала РФ Сит ил эштәре министрлығы вәкиле Мария Захарова. Киев режимы башлығы Зеленскийҙың маҡсатлы рәүештә балалар һәм үҫмерҙәр ғүмеренә ҡаҫҡыныуы украин армияһының яңы тактикаға - террор һуғышына күсеүе хаҡында һөйләй.

Мәғлүм булыуынса, шунан бер көн алда Украина Ҡоралл ы көстәренең (ВСУ) Запорожье атом электр станцияһына (ЗАЭС) һөжүме аңлы рәүештә, урындағы халыҡты ҡурҡытыу, психологик йәһәттән һындырыу маҡсатында махсус эшләнде, тип билдәләй эксперттар. Киев режимы быны менән хәлде киҫкенләштерергә һәм ядро хәүефе килтереп тыуҙырырға маташа һәм аҙаҡ ғәйепте Рәсәйгә ауҙармаҡсы була. "Росатом" дәүләт корпорацияһы етәксеһе Алексей Лихачев һүҙҙәренә ҡарағанда, дошман дроны реакторҙан ни бары бер нисә метрҙа объект бинаһының стенаһын тишеп сыҡҡан һәм шартлаған. Бәхеткә күрә, ҙур емереклектәр һәм зыян күреүселәр юҡ. Станцияның коммуникация буйынса директоры Евгения Яшина әйтмешләй, атом электр станцияһы майҙаны биләмәһенә теләһә ниндәй һөжүм хәрби ғәмәл булыуҙан туҡтай һәм уның эҙемтәләре яу ялаңы сиктәренән алыҫҡа таралып, бик ҙур территорияны радиация менән зарарлау ҡурҡынысы тыуҙыра. ЗАЭС Днепрҙың һул яҡ ярында, Энергодар ҡалаһы янында урынлашҡан. Берәр гигаватт ҡеүәтле алты энергоблоклы был объект Европала иң ҙур атом станцияһы иҫәпләнә. Мәскәүҙән белдереүҙәренсә, Запорожье АЭС-ы һәм уның эшсәндәренә ҡарата ҡурҡыныс тыуҙырыусы ВСУ-ның көн һайын тип әйтерлек станция инфраструктураһын һәм Энергодар ҡалаһын утҡа тотоуы - ысын мәғәнәһендә аҡылһыҙлыҡ күрһәткесе ул.

Ошо йәһәттән Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы (БМО) Украина конфликты яҡтарының хәүефле инфраструктураларға ҡаршы һөжүмдәрҙе туктатыуҙы ҡәтғи талап итте. Украинаның элекке президенты Леонид Кучманың кәнәшсеһе Олег Соскин белдереүенсә, атом станцияһына һөжүм сит ил белгестәре, туранан-тура Евросоюз ҡатнашлығында ойошторолған. Атом энергияһы буйынса халыҡ-ара агентлыҡ (МАГАТЭ) башлығы Рафаэль Гросси:"Ядро объекттарына һөжүм - ут менән уйнауға бәрәбәр", - тине һәм был хәл айҡанлы етди борсолоуын белдерҙе. РФ Хәүефһеҙлек советы рәйесе урынбаҫары Дмитрий Медведев был һөжүмдең яуапһыҙ ҡалырға тейеш түгеллеге тураһында яҙып сыҡты. Әйткәндәй, ул 2022 йылда уҡ әле Киев властарының Запорожье өлкәһендә "яңы Чернобыль" ойоштороу ихтималлығына әҙер булыуы хаҡында иҫкәрткәйне һәм атом станцияларының Украинала ла, Евросоюзда ла барлығын һәм улар менән дә "осраҡлы хәлдәр" килеп тыуыу хәүефен иҫтәренән сығармаҫҡа саҡырғайны.

Ләкин украин боевиктары телдән иҫкәртеүҙәргә төкөрөп бирә: 31 майҙа улар Запорожье АЭС-ына ҡабатлап һөжүм итте. Был юлы дошмандың ике пилотһыҙ аппараты транспорт цехын сәпкә алды: 6 автобус менән 2 "Газель" автомобиле юҡ ителгән, зыян күреүсе кешеләр юҡ, АЭС штат режимында эшләүен дауам итә. РФ Оборона министрлығы хәбәр итеүенсә, тәүлек эсендә Һауа һөжүменә ҡаршы оборона көстәре тырышлығы менән Рәсәй өҫтөнә яуҙырылған самолет рәүешендәге 405 дрон, ике HIMARS реактив снаряды менән идара ителеүсе 4 авиабомба бәреп төшөрөлгән.

Шул уҡ ваҡытта Зеленскийҙың ҡорал һорап, Дональд Трампҡа яҙған хаты билдәле булды. Пентагон башлығы Пит Хегсет уға яуап итеп, АҠШ Украинаға ярҙам итеү юлдарын эҙләйәсәк, тип вәғәҙәләне, ләкин шул уҡ ваҡытта Европа тарафынан Киевты финанслауҙың бермә-бер артыуына ишара яһаны.

Яҡын Көнсығыш хәленә килгәндә, Иран, Израилдең Ливанды туктауһыҙ утҡа тотоуы арҡаһында, АҠШ менән башланырға торған һөйләшеүҙе өҙөргә мәжбүр булды һәм ЦАХАЛ (Израиль армияһы) Ливан территорияһын баҫып алған биләмәнән үҙ ғәскәрен сығармайынса тороп, Вашингтон менән һөйләшеүҙәргә бармаясағын белдерҙе. АҠШ президенты Дональд Трампҡа Израиль премьеры Нетаньяхуға ҡарата ҡәтғи һәм ашығыс рәүештә баҫым яһарға тура килде һәм ул яҡындағы аҙнала Тегеран менән һөйләшеүҙәрҙең башланыуына иҫәп тотоуын белдерҙе.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө районы хакимиәте башлығы МХО зонаһында хеҙмәт иткән 19 йәшлек "Вишня" менән таныштырҙы. Йәш ҡыҙ гуманитар ылау менән алғы һыҙыҡҡа барған. Унда, яугирҙарҙан беренсе медицина ярҙамы күрһәтә алырлыҡ кешеләрҙең аҙ булыуын ишеткәс, контракт төҙөгән. "Вишня" подразделение эсендә уҡсы-санитар курсын үткән. Часы тарҡалғансы, ярты йыл МХО зонаһында хеҙмәт иткән. Хәҙер "Вишня" әхирәте менән Өфөнөң уҡыу йорттарында ялан медицинаһы нигеҙҙәрен өйрәнә һәм яҙмышын кеше ғүмерен ҡотҡарыу менән бәйләү өсөн медицина колледжына уҡырға инергә йыйына.

✓Өфөнән 15 йәшлек София Илтерәкова Варнала (Болгария) художестволы гимнастика буйынса Европа чемпионы исеменә лайыҡ булды. Ул ҡулса менән күнекмәләрҙә - алтын, ә туп менән күнекмәләрҙә бронза миҙалдар яуланы, тип хәбәр итә Рәсәйҙең Олимпия комитеты. Әйткәндәй, йәш гимнастка быйыл тәүге тапҡыр өлкәндәр кимәлендә сығыш яһай. Был Европа чемпионаты Халыҡ-ара гимнастика федерацияһының (FIG) сикләүҙәрҙе бөтөрөүе менән дә иғтибарға лайыҡ. Рәсәй командаһы һуңғы биш йылда тәүге тапҡыр йәнә үҙенең флагы һәм гимны аҫтында сығыш яһай алды.

✓Өфө хакимиәте башлығы урынбаҫары Агарагим Кагиргаджиев үҙ теләге менән вазифаһын ҡалдырҙы, тип хәбәр иттеләр "Башинформ"ға мэрияның матбуғат хеҙмәтенән. Агарагим Кагиргаджиев 2023 йылдан Өфө хакимиәте башлығы урынбаҫары булып эшләне. Иҡтисад, сәнәғәт һәм эшҡыуарлыҡ мәсьәләләре өсөн яуаплы булды.

✓Өфөнөң Октябрь районынан МХО биләмәһенә сираттағы мотоцикл оҙатылған. Техниканы алғы һыҙыҡҡа дөйөм гуманитар йөк менән алып баралар, тип хәбәр итте муниципалитет башлығы Антон Тарасов. Ирекмәндәр һүҙҙәренсә, Донецк йүнәлешендә хәҙер мотоцикл ныҡ кәрәк. "Бындай техника хәрби бурыстарҙы оператив үтәргә һәм ҡатмарлы шарттарҙа мобиллекте һаҡларға мөмкинлек бирә. Ике тәгәрмәсле ҡеүәтле транспортты Ватан яугирҙары ғаиләләре комитеты ҡабул итте", - тине Тарасов.

✓Башҡортостанда "Башнефть" заправкаларында йәнә хаҡ артҡан. Бензиндың ҡайһы бер маркалары һәм дизель 50 тингә ҡиммәтләнгән. 2026 йылдың башынан хаҡ ун өсөнсө тапҡыр арттырылды. 26 майҙан АИ-100 бензинының бер литры - 88,45 һум. Әйткәндәй, һуңғы тапҡыр уның хаҡы март уртаһында ғына күтәрелгәйне (+30 тин). Дизель яғыулығының бер литры 75,90 һум тора. Солярка 1,3 һумға ҡиммәтерәккә һатыла. "Лукойл" заправкаларында АИ-100 бензины - 95,81 һум, дизель 76,92 һум тора.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Халҡыбыҙҙың оло хазинаһы булған "Урал батыр" эпосы тураһында нимә беләһегеҙ, уны уҡығанығыҙ бармы? Ундағы аҡыл-фекер беҙҙең йәшәйешебеҙҙең нигеҙе, тигәнгә нисек ҡарайһығыҙ?***

*Рәйсә КҮЗБӘКОВА, педагогия ветераны:* Мин "Урал батыр" эпосы менән мәктәптән үк таныш: тәүҙә беҙ уны әкиәт формаһында, ә өлкәнерәк кластарҙа тулыһынса уҡыныҡ. Аҙаҡ үҙем "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр конкурсының ойоштороусылары рәтенә ингәс, балаларҙың бирелеп һөйләүҙәрен тыңлаған сакта, уның мәғәнәһенә, йөкмәткеһенә иғтибар итә башланым. Әйткәндәй, беҙ "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүсе йәш сәсәндәр конкурсын төрләләндерергә, мәшһүр ҡомартҡыбыҙҙы балалар механик рәүештә ятламаһын, ә уның тәрән фәлсәфәүи мәғәнәһенә төшөнһөн ине, тип тырыша инек.

2020 йылда мин етәкләгән "Аҡ тирмә" милли-мәҙәни үҙәгенә Башҡортостандың халыҡ уҡытыусыһы Мәрйәм апай Бураҡаева "Урал батыр мәктәбе" исемле проект тәҡдим итте. Был проект буйынса ныҡлап эшкә тотонғас, был эпоста ысынлап та башҡорт халҡының артабанғы үҫешенең йәшерен коды ятҡанын аңланым. Сөнки унда йәш быуынға дөрөҫ рухи-әхлаҡи тәрбиә биреүҙең тәҙөк концепцияһын, халҡыбыҙҙың быуаттар дауамында һыналған тәрбиә традициялаларын күрҙем. Һәм, иң ҡыҙығы, беҙгә совет мәктәбендә бирелгән һәм динебеҙ күндергән бар рухи ҡиммәттәр ошо 1910 йылда яҙылып алынған "Урал батыр" эсенә һыйған. Һуңынан беҙ ошо "Урал батыр мәктәбе" проектын, дөрөҫ тәрбиә биреү системаһы булараҡ, балалар баҡсаларына һәм мәктәптәргә тәҡдим иттек. Әйтергә кәрәк, балаларға яҡшы белем менән бер рәттән, матур тәрбиә биреү кәрәклеген тәрән аңлаған, үҙ эшенә ижади ҡараған уҡыу ойошмалары байтаҡ булып сыҡты. Бөгөн беҙҙең был проектта 50-гә яҡын уҡыу учреждениеһы ҡатнаша.

Быльтыр "Урал батыр" эпосы көнөн булдырыу тураһында Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Фәрит улы Хәбировтың Указы сығыуы беҙҙең өсөн иң ҡыуаныслы мәлдәрҙең береһе булды. Ҡарар беҙгә тағы ла дәртләнеберәк, уңышлыраҡ эшләргә мөмкинлек бирҙе.

Беҙ быйыл февраль айынан "Ашҡаҙар" радиоһында аҙна һайын "Урал батыр уҡыуҙары"н үткәрә башланыҡ. Тапшырыуҙа төрлө кешеләр, шул иҫәптән уҡытыусылар, ғалимдар, ижадсы йәштәр ҡатнашты. Тапшырыуҙарҙа эпос буйынса тап тәрбиәгә бәйле яңғыраған төрлө фекерҙәрҙе тыңлап, мин халҡыбыҙ был мәшһүр эпосына таяныл йәштәргә тейеш икәнлегенә тағы бер тапҡыр инандым. Яңыраҡ Мәрйәм апай Бураҡаева һәм Мәрйәм апай Солтановаларҙың тырышлығы менән донъя күргән "Урал батыр" ҡобайыры - башҡорт халҡының рухи мираҫы" китабы халҡыбыҙ зыялыларының, педагогтарҙың, йәштәрҙең өҫтәл китабына әйләнер, Алла бирһә. Китапта Мөхәмәтша Буранғолов тарафынан яҙып алынған төп нөсхә бирелә. Ул бигерәк тә йәш ғаиләләр өсөн файҙалы булыр ине. Бөгөн йәштәр балаларын үҙҙәре алған милли тәрбиә йолалары өлгөһөндә үҫтерә, ләкин һуңғы йылдарҙа ошо традициянан ситләшеү күҙәтелә. Мәҫәлән, башҡорттарҙың да, башҡа милләттәрҙең дә тәрбиә ҡанундары бер ҡасан да баланы беренсе урынға ҡуймаған, ә хәҙер балаларҙы батша урынына күреп үҫтерәләр. Икенсенән, баланы хеҙмәттән айырыу шулай уҡ хата ҡараш тип иҫәпләйем. Хеҙмәт тәрбиәһе булмаһа, ғаиләлә лә, мәктәптә лә бала нимә өсөндөр яуаплы булып, шул эште тейешле кимәлдә башҡарып өйрәнмәһә, өлкәндәргә ҙур хөрмәт менән ҡарап, уларҙың һүҙенә ҡолаҡ һалыу кәрәклеген аңламаһа, минеңсә, ул балаға әллә ни ҙур өмөттәр бағларға ярамай.

Йәштәр хәҙер аңлы, тәрбиәгә бәйле лә материалдар күп, әммә ҡапма-ҡаршылыҡлы мәғлүмәт тә етерлек. Ошо самаһыҙ мәғлүмәт донъяһында аҙашмаҫ өсөн, халыҡ педагогикаһына һәм "Урал батыр" эпосына мөрәжәғәт итеү зарур.

ИҢ МАТУР ҒӘҘӘТ

# АҠЫЛЫҢ БУЛҺА, ТАШЛАМА!



**27 майҙа илдә Бөтә Рәсәй китапханалар көнө байрам ителде. 1795 йылдың 27 майында императрица Екатерина II Санкт-Петербургта беренсе дәүләт йәмиғ китап коллекцияһын булдырыу хаҡында ҡарар ҡабул итә, ул хәҙер Рәсәй милли китапханаһы тип атала.**

Китапхана - цивилизация юлдашы. Кешелек, үҙенең мендәрсә йылдар дауамында йыйған мәғлүмәттәрен китаптарҙа туплап, быуындан-быуынға тапшыра килгән. Кешеләр үҙҙәре белгән-танығанды телдән-телгә һөйләп тә һаҡлай ала, әммә яҙма сығанаҡтар булмаған хәлдә кешелектең бихисап асыштары онотолоп, юҡҡа сығыуға дусар булыр ине. Шуға күрә һөйләшеү, аралашыу теленән башҡа яҙма телдәр уйлап табылмаһа, кешелек китап тигән төшөнсәне белмәҫ тә ине. Төрлө эпохаларҙа, төрлө телдәрҙә яҙылған китаптарҙы бар донъяның иң ҡиммәтле рухи мираҫы итеп ҡабул итеү зарур.

Донъя телдәрендә китапхана библиотека тип атала, был һүҙҙең килеп сығышы ла бик ҡыҙыҡлы. Урта диңгеҙҙең көнсығыш ярҙарында, б.э. тиклем 1200 - 800 йылдарҙа Ханаан тип аталған илдә (хәҙерге Ливан) боронғо семит халыҡтарының үҙ яҙмаһы булып, уларҙың уҡымышлы кешеләре төрлө мәғлүмәттәрҙе папирустарға теркәп барған. Папирустар күпләп етештерелгән ҡала Библ тип аталған. Боронғо гректар ошо папирустарҙағы яҙмаларҙы библос тип атай башлай, ул китап тигәнде аңлатҡан. Һуңынан Иисус Христос тәғлимәтен сағылдырған христиан дине текстары Библия тип нарыҡлана.

Әйткәндәй, китап - ғәрәп һүҙе, ул тыслыҡ эсендә төпләнгән күп битле яҙма нәмәне аңлатҡан. Ғәрәптәр Ислам диненең изге яҙмаһын - Ҡөрьән-Кәримде лә ололап әл Китап тип атай. Ә рус телендәге "книга" һүҙенең килеп сығышын ҡайһы бер лингвистар боронғо төрки телендәге "күинг" һүҙе менән бәйләй, ул ҡағыҙ төргәге тигәнде аңлата. Телебеҙҙә әле лә ҡулланылышта булған "кенәгә" һүҙе лә ошо мәғәнәүи ерлектә хасил булғандыр.

Донъялағы иң боронғо китапхана шумер цивилизацияһының бер гүзәл ҡаҙанышы булып, б.э. тиклем 2600 йыл әүәлерәк барлыҡҡа килгән. Шумер "китаптары" балсыҡ табличкаларҙан ғибәрәт: шыйыҡ балсыҡты агас формаға тултырып тигеҙләгәс, уға текст яҙылған һәм ул ҡояшта йә иһә мейестә киптерелгән.

Боронғо Мысырҙа (Египетта) китапханалар "папирус биналары" һәм "тормош өйҙәре" тип аталып, ҡорамдарҙа йәиһә фирғәүен һарайҙарында һаҡланған. Б.э. тиклем 1300 йылдар тирәһендә фирғәүен Рамзес II китапханаһы Рамессеум тип аталған ҡорамда урынлашҡан, уға ингән урында "Йән өсөн аптека" тип яҙылып ҡуйылған була.

Антик дәүләттәр дәүерендә ҙур китапханалар төҙөлә, уларҙа ошо осорға ҡараған китаптар һаҡлана. Мәҫәлән, Птолемей I б.э. тиклем III быуатта Александрия ҡалаһында даны тирә-яҡтағы барса илдәргә таралған ғәләмәт ҙур китапханаға нигеҙ һала. Ундағы ҡулъяҙма китаптарҙа антик авторҙарҙың философия, медицина, астрономия, математика буйынса трактаттары, төрлө телдәрҙә яҙылған әҙәби әҫәрҙәр туплана. Боронғо Грецияның Платон академияһында һәм Аристотель лицейында ошо осор авторҙарының китаптары тупланып, философтар мәктәптәре өсөн алыштырғыһыҙ сығанаҡ булып тора.

XV быуат урталарына тиклем китапханалар тик ҡулъяҙма китаптарҙан ғына тора. 1450 йылдар тирәһендә немец уйлап табыусыһы Иоган Гутенберг механик китап баҫыу станогын яһау ысулын тәҡдим итә: текст алмаштырыла торған металл хәрефтәр ярҙамында баҫыла. Станокта баҫылған беренсе китап - Гутенберг Библияһы 1455 йылда донъя күрә. Артабан камиллаштырыла барған китап баҫыу станоктары Европала һәм донъяның башҡа илдәрендә лә киң ҡулланыла башлай. Рәсәйҙә китап баҫыу эшен Иван Грозный юлға һала - Польшанан махсус рәүештә килтерелгән китап баҫыу станогында эшләү әмәлен Даниянан саҡырып килтерелгән типограф Ганс Мессингейм рус хеҙмәкәрҙәренә өйрәтә. Һуңынан уларҙың иң күренеклеһе, дьяк Иван Федоров беренсе рус китап баҫыусыһы булараҡ тарихҡа инә.

Китаптарҙы күпләп баҫа башлау илдәрҙең цивилизацион үҫешен тиҙләтә, мәғариф, мәҙәниәт, әҙәбиәт, фән һәм сәнғәт өлкәләрен быға саҡлы күрелмәгән бейеклектәргә күтәрә. Баҫма китаптар бар донъя өсөн китапханаларҙың мәҙәни-рухи ролен башҡа бер нәмә менән дә алыштырғыһыҙ итә. Образлы итеп әйткәндә, китапханалар йәмғиәт прогресының эске двигателенә әйләнә.

Хәҙерге заман кешеһен китапһыҙ күҙ алдына ла килтереү мөмкин түгел. Мәғлүмәт технологиялары нисек кенә алға китмәһен, ниндәй генә яңынан-яңы мессенджерҙар уйлап табылмаһын, һәр кемдең аң-белем даирәһенә тәүге аҙымдары китаптан башлана. Хәҙер электрон китаптар киң таралыу тапты, әммә барыбер бармаҡтарың менән яңы китап биттәрен асып уҡыуҙан да ләззәтлерәк башҡа бер хис-кисереш юҡтыр кеүек. XIX быуаттың күренекле философы һәм иҡтисадсыһы Карл Маркс, бер анкета һорауҙарына яуап биргәнендә, үҙенең иң яратҡан шөғөлө тип китаптарҙа ҡаҙыныуҙы атай.

Заманында СССР халҡын донъяның иң күп китап уҡыусылары, тип баһаланылар. Китап магазиндарынан үҙең теләгән китаптарҙы һатып алыуы ла ауырыраҡ булды, сөнки алыусылар шул тиклем күп, барыһына ла етмәй ине. Ҡайһы бер замандаштарыбыҙ, макулатура тапшырып, популяр китаптарға эйә булды. Әлеге ваҡытта халыҡ китапты күп уҡымай, тиҙәр. Бәлки, шулайҙыр ҙа. Әммә республикабыҙҙа китапханалар ҙа күп, ә китап магазиндарында йәнең теләгән баҫманы табып була. Ә йыл һайын йәмле йәй көндәрендә баш ҡалабыҙҙың Совет майҙанында халыҡара "Китап байрамы" уҙғарылыуы үҙе бер маҡтауға лайыҡ ваҡиға булараҡ беҙҙең мәҙәни мөхитебеҙҙе биҙәп тора.

Беҙ мәктәптә уҡыған саҡта туған тел дәреслектәрендә бирелгән бер йомаҡ иҫтә ҡалған: "Ҡат, ҡат, ҡатлама, аҡылың булһа, ташлама!" Эйе, бик фәһемле йомаҡ булған ул: китапты ташларға ашыҡмайыҡ әле, йәмәғәт.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

"Киске Өфө"
гәзитенең
махсус
бите

29

# Ғаиләм-ҡәлғәм

5-11
ИЮНЬ
(һөтай)
2026 йыл
№22 (1217)

АФАРИН!

# ИЛ ҠОТО ЛА УЛАР

**Башҡортостанда "Йыл ғаиләһе - 2026" Бөтә Рәсәй конкурсының республика этабы еңеүселәре билдәле булды. Унда ҡала һәм райондарҙан бөтәһе 130 ғариза килгән. Еңеүселәр ете номинацияла асыҡланды.**



***"Алтын ғаилә" номинацияһында*** - Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Хәйбуллиндар ғаиләһе еңеүсе булды. Улар 49 йыл бергә, өс бала тәрбиәләп үҫтергәндәр. Атай кеше - нейрохирург, әсәйҙәре - юғары категориялы табип-терапевт. Өс ҡыҙҙары ла медицина юлын һайлаған. Ғаиләлә һигеҙ ейән-ейәнсәр үҫә, улар - династияны дауам итеүселәр.

***"Ауыл ғаиләһе"*** - Ҡыйғы районынан Рәхмәтуллиндар. Бергә йәшәүҙәренә 14 йыл, өс бала үҫтерәләр. Уларҙың ҡағиҙәһе - Яңы йыл һәм тыуған көндәрҙе бергәләп билдәләү. Ырыу тарихын ҡәҙерләп һаҡлайҙар һәм уны балаларына тапшыралар.

***"Ватанды һаҡлаусы ғаиләһе"*** - Дәүләкән районынан Шабалиндар. Ғаилә ҡороуҙарына 26 йыл, 11 бала тәрбиәләйҙәр. Өлкән улдары Данил МХО зонаһында һәләк булған. Уның ҡартатаһының атаһы Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан, ҡартатаһы Афғанстанда хеҙмәт иткән, атаһы Чечня һуғышын үткән. Балалар "Купол" клубына йөрөй, ҡул һуғышы, тактика, медицина әҙерлеге буйынса шөғөлләнә.

***"Традицияларҙы һаҡлаусы ғаилә"*** - Стәрлетамаҡтан Ишмөхәмәтовтар **(һүрәттә).** Никахта улар - 18 йыл, ике балаға ғүмер биргәндәр. Биш шәжәрә - төп ғаилә ҡомартҡыһы. Улар ирле-ҡатынлы икеһе лә - Алдар Тархан һәм Ишан Байым вариҫтары. Үҙҙәре башҡорт милли кейемен өйрәнә һәм тергеҙәләр, биҙәүестәр эшләйҙәр һәм башҡаларҙы өйрәтәләр.

***"Күп балалы ғаилә"*** - Бөрөнән Федориндар. Бергә йәшәүҙәренә 33 йыл, 9 үҙ балаларын һәм 2 опекаға алған бала тәрбиәләйҙәр. Улар өсөн сәләмәт йәшәү рәүеше - ҡәҙимгә күренеш. Атай менән әсәй үҙҙәренең шәхси өлгөһөндә балаларға әүҙемлек өлгөһө һәм эшкә ихтирам тәрбиәләй.

***"Тәрбиәгә бала алған ғаилә"*** - Ҡариҙел районынан Ғәлимйәновтар. Ирле-ҡатынлы 24 йыл никахта торалар, 2006 йылдан ата-әсә ҡарауынан ҡалған 10 бала алып тәрбиәләйҙәр. Уларҙың ғаиләһендә бергәләп походтарға сығыу, команда уйындары ғәҙәткә ингән. Балалар олимпиадаларҙа һәм спорт ярыштарында даими еңеүҙәр яулай.

***"Спортсы ғаилә"*** - Октябрьскийҙан Фәйзуллиндар. Ғаилә стаждары - 14 йыл, ике бала тәрбиәләйҙәр. Саңғы, йөҙөү, йүгереү, футбол, велосипед спорты менән мауығалар. "Атай, әсәй һәм мин - спорт һөйөүсе ғаилә" ярыштарында даими ҡатнашалар һәм призлы урындар алалар.

Республика конкурсында еңеүселәрҙе бүләкләү 21 декабрҙә - Башҡортостанда билдәләнгән Күп балалы ғаилә көнөндә тантаналы шарттарҙа атҡарыла. Биш номинацияла еңеүселәр тураһында тулы мәғлүмәт "Йыл ғаиләһе" Бөтә Рәсәй конкурсының федераль этабына тапшырыла. Уның һөҙөмтәһе июлдә билдәле була, ә бүләкләү тантанаһы октябрҙә үтә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ИШӘЙӘЛӘР!

**Башҡортостан ишле ғаиләләр һаны буйынса илдә лидер булып ҡала.**

- Башҡортостанда 75 меңдән ашыу күп балалы ғаилә иҫәпләнә, -тип белдерҙе республиканың хеҙмәт министры урынбаҫары Ирина Небогатова. - Был илдә иң яҡшы күрһәткестәрҙең береһе булып тора.

Министр урынбаҫары мәғлүмәттәре буйынса, республикала өйләнешеүселәр һаны 2,6 процентҡа артҡан һәм айырылышыуҙар һаны дүрттән бер өлөшкә кәмегән. "Беҙҙә сабыйҙарҙың үлем осраҡтары ла кәмей", - тип өҫтәне ул.

## АҠСАҺЫ ЛА МӨҺИМ

**Республикала 1 июндән ғаиләләр өсөн яңы түләү индерелә. Рәсәй Социаль фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһе ғаилә түләүенә ғаризалар ҡабул итә башлай.**

Уны ике һәм унан күберәк балаһы булған, 2025 йылда физик шәхестәрҙең килеменә һалым (НДФЛ) түләгән ата-әсәләр алырға мөмкин. Был хаҡта фондтың төбәк бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итте. Белдереүҙәренсә, түләү килеме юғары булмаған ғаиләләр өсөн тәғәйенләнгән. Ул уҙған йылда түләнгән килем һалымының бер өлөшөн ҡаплай. Уны алыу өсөн ике ата-әсә лә (никахта тороу-тормау иҫәпкә алынмай) мөрәжәғәт итә ала. Уларҙың алимент буйынса бурысы булмаҫы, ата-әсә хоҡуғынан мәхрүм ителмәүе мөһим.

Түләү алыу өсөн 2025 йылда ғаиләнең йән башына уртаса килеме 2025 йылда бер кешегә 23 673 һумдан артмаҫҡа тейеш. Был үткән йылда республикала билдәләнгән 1,5 күләмендәге йәшәү минимумы. Шулай уҡ ғаилә мөлкәтенә комплекслы баһа бирелә.

Түләүҙең күләме индивидуаль. Ул түләнгән НДФЛ (13 процент) һәм 6 процент ставкаһы буйынса яңынан иҫәпләнгән һалым араһындағы айырма булып иҫәпләнә. Әйтәйек, әгәр ҙә әсә бер йылда 600 мең һум килемдән 78 мең һум һалым түләһә, 6 процент ставкаһы буйынса ҡабаттан иҫәпләгәндә 36 мең һум килеп сыға. Бөтә шарттар үтәлгән осраҡта ул 42 мең һумды кире ҡайтара ала.

## ХЕҘМӘТ КОДЕКСЫНА ТӨҘӘТМӘ

**Сентябрҙән ауырлы ҡатын-ҡыҙ хеҙмәткәргә һәм өс йәшкә тиклемге балаһы булған әсәйҙәргә һынау ваҡытын билдәләргә ярамай. Йәғни Рәсәйҙә бөләкәй балалы ҡатын-ҡыҙҙарҙы эшкә алғанда һынау осорон тыйыу нормаларына төҙәтмәләр индерелде. Сентябрь айынан тыйыу 3 йәшкәсә бала тәрбиләгән әсәйҙәргә ҡағыла (балаға йәш ярым тулғансы).**

Башҡортостандың Дәүләт хеҙмәте инспекцияһында белдереүҙәренсә, шулай уҡ 18 йәше тулмаған хеҙмәткәрҙәргә; тейешле вазифаға конкурстан үткән хеҙмәткәрҙәргә; дәүләт аккредитацияһы булған программалар буйынса урта һөнәри йәки юғары белем алған һәм диплом алғандан һуң бер йыл эсендә үҙ һөнәре буйынса тәүге тапҡыр эшкә урынлашҡан белгестәргә һынау ваҡыты билдәләнмәй. Был исемлектә бер ойошманан икенсеһенә күсеү юлы менән эш урынын алмаштырған, шулай уҡ эш биреүсе менән ике айға тиклем хеҙмәт килешеүе төҙөгән хеҙмәткәрҙәр бар.

## ТЫУЫП ТОРҺОНДАР!

**БР Халыҡ фронты республиканың йәштәр һәм йәш ғаиләләре араһында аноним һорау алыу башланы. Маҡсат - бала табыуға ниндәй дәүләт ярҙамы саралары ярҙам итеүен, ә ниндәй проблемалар, киреһенсә, ғаиләне булдырыуҙы йәки киңәйтеүҙе кисектерергә мәжбүр итеүен асыҡлау.**

БР Халыҡ фронты етәксеһе Виталий Брыкин билдәләүенсә, республика ҙур ҡалаларҙы, район үҙәктәрен, бөләкәй тораҡ пункттарҙы һәм ауыл биләмәләрен берләштерә. Шуға күрә төбәктең төрлө өлөштәрендә йәш ғаиләләрҙең йәшәү шарттары төрлө булырға мөмкин. Шуға бәйле республика халҡының фекерен дөйөм формала түгел, ә анығ шәхси тәжрибә аша иҫәпкә алыу мөһим.

"Бала тыуыу тураһында ҡарар һирәк осраҡта түләүгә йәки айырым льготаға бәйле. Йәш ғаиләләр торороҡло эш, торлаҡ һатып алыу йәки ҡуртымға алыу мөмкинлеге, балалар баҡсалары, медицина ярҙамы сифаты, килем кимәле, дәүләт ярҙамы һәм иртәгәһе көнгә ышаныс кеүек шарттарҙы баһалай", - тип билдәләне Виталий Брыкин.

Һорау алыу йомғаҡтары буйынса йәмәғәтселәр ғәмәлдәге ярҙам сараларының кәрәклеген баһалаясаҡ һәм Рәсәй Президенты өсөн яңы тәҡдимдәр әҙерләйәсәк. Йәш ғаиләләр өсөн был - федераль кимәлдә ниндәй льготалар тикшерелеүенә йоғонто яһау мөмкинлеге.

## ТИҘЕРӘК ҠУЛЛАНҒЫҢ КИЛҺӘ...

**Граждандарҙың Әсәлек капиталы менән идара итеү тураһындағы ғаризаларын ҡарау ваҡытын ҡыҫҡартыу тураһында ҡарар ҡабул ителде. Рәсәй Президенты Владимир Путин ошондай йөкләмә бирҙе.**

Хәҙер Социаль фонд мөрәжәғәттәрҙе ике тапҡырға тиҙерәк ҡарай: элекке ун көн урынына биш көн. Әгәр өҫтәмә документтар һорарға кәрәк булһа, ул 12 көн тәшкил итә (элек 20 көн булған). Был хаҡта урынбаҫарҙары менән оператив кәңәшмәлә РФ Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин хәбәр итте. "Ата-әсәләрҙең документ йыйыуға түгел, ә балаларға күберәк ваҡыт бүлеүе мөһим. Ғаиләләргә кәрәкле шарттар тыуҙырып, уларға ярҙамды артабан да киңәйтәсәкбеҙ", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды ул.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Әсәлек капиталы программаһы Рәсәйҙә 2007 йылдың 1 ғинуарынан тормошҡа ашырыла һәм бөгөн "Ғаилә"милли проектының бер өлөшө булып тора. Түләүҙе торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға, баланың белем алыуына, инвалид балалар өсөн тауарҙарға һәм хеҙмәттәргә һәм башҡа маҡсаттарға йүнәлтергә мөмкин. Тәүҙә Әсәлек капиталы 9,5 процентҡа индексацияланды. Хәҙер беренсе балаға - 690 мең һум самаһы, икенсеһенә һәм артабанғыларына 912 мең һумдан ашыу түләнә.

Әсәлек капиталы программаһы 2030 йылға тиклем оҙайтылды.

***✓ Һәр бер ҡурайсының үҙенең үлән ҡурайы булған. Бергәләп уйнау традицияһы булмаған, сөнки үлән ҡурайының стандарты юҡ, бер үлән икенсеһен ҡабатламай, һәр береһенең - үҙ оҙонлоғо, үҙ ҡалынлығы...***

# БӨГӨН БАЛА -

## Бала күңеленә хаҡ шытымлы

**(Башы 1-се биттә).**

**Ижади ғаилә менән осрашыу һәр саҡ күңелдә яҡты эҙ ҡалдыра. Һеҙҙең рухи донъябыҙға индергән үҙ юлығыҙ, үҙ өлөшөгөҙ бар. Был ике ижад кешеһе нисек танышты икән? Ҡайҙа уларҙың юлдары бергә киҫеште? Шуны белге килә иң элек.**

**Таңсулпан:** Беҙҙең осрашыу тарихы ҡыҙыҡлы ғына булды. Бынан ун йыл элек Бөтөн донья башҡорттары ҡоролтайы мине, шағирә булараҡ, III Төрки йәштәр фестиваленә Башҡортостан исеменән сығыш яһарға ебәрҙе. Гөлнара апай Хәлфетдинова менән автобуста иртәнсәк Ҡаҙанға барып төштөк. "Иҙел" йәштәр үҙәгендә таңғы 5-тә ойоштороусыларҙы көтөп торабыҙ. Ишек асылып китте лә, ҡурай тотҡан бер егет килеп инде. Баҡтиһәң, ул егет тә фестивалгә Өфөнән килгән ҡурайсы, Өфө сәнғәт институты студенты икән. Шунда тәүге тапҡыр күрештек Айҙар менән һәм сәхнәлә бергә сығыш яһаныҡ - мин шиғыр уҡыным, ул фонға ҡурайҙа уйнаны. Бына шулай таныштыҡ.

Беҙ фестивалдә бер аҙна булдыҡ. Сентябрь аҙағы ине, Волга йылғаһы күренеп тора. Ағастар яңы һарғая башлаған көҙҙөң ыуыҙ ғына сағы ине, беҙ икәүләп балкондан ҡарап торабыҙ. Ошо тәбиғәттең матурлығын ғына түгел, уның күңел матурлығын да йәнем менән тоя инем. Ул ваҡыт ул миңә күктән төшкән кеше һымаҡ күренде. Сөнки ул шул тиклем эскерһеҙ һәм ихлас ине. Бөтә нәмәгә тәү тапҡыр күргәндәй ҡыуана. Был егетте кем шулай тәрбиәләгән икән, тип уйландым. Мин үҙем был донъяның ағын да, ҡараһын да күп күргәнмен, шуға ла уның тормош бысраҡлығы йоҡмаған халәте, балаларса саф булмышы үҙенә ғашиҡ иттерҙе. Ҡаҙағстанда ла йәшәп алғас, мин ныҡ думбыра тыңларға яратам. Фестивалдә думбыра көйөн тыңлап йөрөгәнемде күргәс: "Әйҙә, мин һине думбыра уйнарға өйрәтәм, Өфөгә ҡайтҡас, сәнғәт институтына килерһең", - тине. Баш ҡалаға ҡайтҡас, институтҡа барып, унан думбыра уйнарға өйрәнә башланым. Ә биш айҙан беҙ өйләнештек. Минән һәйбәт думбырасы сыҡмағандыр ҙа, бәлки, ә яҡшы ҡатын, яҡшы әсәй сыҡҡандыр тип ышанғы килә.

**Айҙар:** Ул минең тормошома шулай ҡапыл килеп инде. Ҡаҙанға төрлө төрки халыҡтары йәштәре менән осрашам, танышам, тип тулҡынланып китеп барғанымда, фестивалдең тупһаһында уҡ уны осраттым. Был үҙ ғүмереңдә бер генә тапҡыр кисерә торған тойғо ине. Тәү күргәндән уның үҙемдең кешем икәнен аңланым һәм бергә булған бер аҙна аҙағына яҡынлаша башлағас, Өфөгә ҡайтҡас, думбыра уйнарға килергә күндерҙем. Шулай, тормошҡа, милли йәмғиәтебеҙгә, сәнғәтебеҙгә, милләтебеҙгә булған бер ҡараш берләштерҙе беҙҙе. Ул башҡаларға оҡшамаған, төплө фекере, аҡылы, матурлығы, шул уҡ ваҡытта ихласлығы, ябайлығы, шаянлығы менән айырылып торҙо.

**Таңсулпан, һин үҙеңде, күпте күргән кешемен, тинең, шуны ла асыҡлап китәйек. Ҡаҙағстанға нисек барып эләктең?**

**Таңсулпан:** Беренсе һөнәрем буйынса мин агроном, микробиолог. "Алексеевка" агрокомплексында башта микробиолог булып, ябыҡ зонала, аҙаҡ инде реализация буйынса агроном ярҙамсыһы булып эшләнем, теплицаның блоктарын карантинға япһалар, уҡыған йәш белгес булараҡ, ҙур-ҙур гектар биләмәләрҙе миңә эшкәртергә тура килә ине. Һаулығым бик яҡшынан булмағас, ауырып, ундай ҡара эштә ғүмер буйы эшләй алмам тип уйлана башланым. Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультетына уҡырға индем. Беренсе курста яңы мәктәпте бөтөп килгән 17-18 йәшлек балалар менән уҡыуы миңә ҡыйыныраҡ ине. Шуға уҡыуҙан китергә лә уйлай башлағайным. Ислам Байғужин тигән таныш егет: "Әхмәт Йәсәүи исемендәге халыҡ-ара ҡаҙаҡ-төрөк университетында уҡырға Башҡортостандан һинең кеүек кеше кәрәк", - тип, шунда барырға тәҡдим итте. Профориентация буйынса төрөк уҡытыусылары килгәйне, улар миңә уҡыу тәртибен аңлаттылар. Мин ысынлап ҡыҙыҡһындым һәм беренсе курстан БДПУ-ны ташлап, Ҡаҙағстанға киттем. Азамат ағай Юлдашбаев "Шоңҡар"ға саҡырып алып, бармайһың, тип әрләне. Ул ваҡыттағы деканыбыҙ Луиза Сәмситова ла ҡаршы булды. Әлбиттә, мине бик оҙаҡ ебәргеләре килмәй шелтәләп йөрөнөләр. Мин, бер урында тик тора алмаған кеше, үҙемә ныҡ ышанғанмындыр, барыбер Ҡаҙағстанға сығып киттем һәм унда бик һәйбәт уҡыным.

Ә күпте күргәнгә килгәндә инде, унда беҙҙең класта ғына 17-18 милләт вәкиле уҡыны. Төрлө милләттәр араһында үҙеңдең асылыңды нығыраҡ аңлайһың бит ул. Унда ғилем алыу миңә бик ҙур тәжрибә булды: үҙеңдең милләтеңә, үҙеңдең республикаңа ситтән ҡарау фекер даирәһен киңәйтә. Күп ваҡиғалар булды, бер генә нәмәне әйткем килә. Беҙ үҙебеҙ аңламай йөрөһәк тә, сит милләттәр Зәки Вәлидиҙе бөйөк кеше итеп күрәләр. Беҙҙең кураторыбыҙ Асыл Шенгүн минең Башҡортостандан икәнде белгәс, беҙҙең төркөмгә: "Таңсулпан - Зәки Вәлидиҙең ейәнсәре. Уға хөрмәт йөҙөнән һине староста итеп ҡуям", - тип әйтте. Башҡа халыҡтар Зәки Вәлидиҙең милләттәше булыуҙы туранан-тура уның туғаны һымаҡ ҡабул итәләр. Әлбиттә, бөйөк шәхестең ейәнсәре тип торғандарында һин халҡыңдың йөҙөнә ҡара килтермәҫкә, үҙеңдән-үҙең лайыҡлы кеше булырға тырышаһың. Шулай итеп, унда миңә "Башҡортостан Республикаһы көнө" байрамын һәм һуңғараҡ Зәки Вәлидиҙең тыуған көнөнә арнап, ғилми-ғәмәли конференция ойоштороу бәхете тейҙе.

**Ғаилә ҡороп ебәргәс, тәүге улығыҙ тыуғас, уны нисек тәрбиәләү тураһында һүҙ булдымы? Ҡала мөхитендә башҡорт телен камил үҙләштереү, шул телде үҫтереү үҙенән-үҙе генә хәл ителмәй бит…**

**Айҙар:** Беҙ ауыл ерендә үҫкәс, шул яҡҡа хас диалектта һөйләшеп телебеҙ асылды. Ҡалаға килгәс, әҙәби тел йоғонтоһона бирелеп, һөйләшебеҙ, тел үҙгәреш кисерҙе. Ҡалала үҫкән баланың диалектта һөйләшеүҙе ишетеү мөмкинлеге юҡ. Шуныһы, атай-әсәй булараҡ үҙебеҙ гел башҡортса һөйләшһәк, балалар туған телде яҡшы үҙләштерә. Минең үҙемә лә башҡорт телендә һөйләшеү үтә еңел тип әйтә алмайым, эштә көнө буйы урыҫса аралашырға тура килә, төрлө милләт балалары менән эш итәбеҙ. Мин ҡатынымдан уңдым, уның менән башҡорт телендә иркенләп һөйләшеп була. Үҙем иһә Сибайҙа, башҡорт класы тип аталһа ла, русса уҡыным. Унда тик башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәресе генә башҡортса булды. Бер мәл ауылда башҡортса математика китабы күргәйнем, бик тырышып уҡыһам да аңламаным. Башҡортса терминдарҙы өйрәтмәгәстәре, ҡайҙан beләһең инде? Ихтияр, Ҡаһарман улдарыбыҙ тыуғас та уларға башҡорт моңон һеңдерҙек. Әсәһе лә сәңгелдәк йыры менән йоҡлатты балаларҙы. Оҙон көйҙәрҙе, халыҡ йырҙарын бергәләп тыңлай инек. Беҙ тыңлағас, бала ла тыңлай. Улдарыбыҙ бәләкәйҙән ҡурай тауышы менән халыҡ көйҙәрен тыңлап үҫеп киләләр.

**Моң, тигәндән, Айҙар, һин үҙең нисек килдең һуң ҡурайға?**

**Айҙар:** Ауылдарҙа элек мандолина сиртеүселәр күп булған. Атайым да йәш саҡта мандолинала уйнаған, шиғырҙар ҙа яҙған. Ошо уйын ҡоралында уйнағас, ижад менән шөғөлләнгәс, ауылдаштары уға "композитор" тигән ҡушамат таҡҡандар. Ул тәүҙә ағаларының мандолинаһында уйнаған, ә Сибайға күскәс, почта аша үҙенә ошондай уҡ уйын ҡоралы яҙҙыртып алырға була. Тик мандолина урынына нишләптер балалайка ебәрәләр. Ул балалайка ғүмер буйы беҙҙең өй стенаһында элеңеп торҙо. Икенсе класта уҡығанда беҙгә Сибай музыка мәктәбе уҡытыусыһы балалар менән килде, улар беҙгә бәләкәй генә концерт ҡуйҙылар. "Әйҙәгеҙ, беҙгә уҡырға килегеҙ!"- тип саҡырҙылар. Дүрт малай шунда яҙылдыҡ. Ә мәктәпкә иң оҙаҡ йөрөгәне мин булып сыҡтым. Музыка мәктәбе ҡурай түңәрәге түгел, унда сольфеджио, музыка әҙәбиәте, хор, башҡа теоретик предметтарға ла йөрөйһөң. Ҡурайсыға теоретик белем яҡын түгел. Боронғо ҡурайсыларыбыҙ сольфеджио уҡып, нота менән ҡурайҙа уйнауҙы күҙ алдына ла килтермәгән. Телдән-телгә күскән халыҡ ижады һымаҡ, олатай нисек уйнаған, ейәне шуны отоп алған. Һәр бер ҡурайсының үҙенең үлән ҡурайы булған. Бергәләп уйнау традицияһы булмаған, сөнки үлән ҡурайының стандарты юҡ, бер үлән икенсеһен ҡабатламай, һәр береһенең - үҙ оҙонлоғо, үҙ ҡалынлығы...

Нисек кенә булмаһын, мин барыбер ҡурайҙы яҡыныраҡ күрҙем. Әсәйем бик тә риза ине минең ҡурай менән мауығыуға. Бер саҡ Өфөлә музыка мәктәбе бар, тигәнде ишеткән дә: "Сибайҙа ғына уҡымаһын, Өфөгә барып белем алһын", - тип, мине баш ҡалаға алып китте. Ниндәй музыка мәктәбе, ҡайҙа, ҡайһы урамда - уныһын белмәй. Таңда Сибай-Өфө поезы менән вокзалға килеп төштөк. Таксиға ултырғас, таксист: "Һеҙгә ҡайҙа?"- тип һораны. Әсәйем: "Музыка мәктәбенә", - тине. Таксист үҙе аңлап, беҙҙе Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге Республика музыка мәктәбенә (хәҙер гимназия) алып барҙы. Ундағы һәм минең музыка мәктәбендәге белемем тура килде, мине һигеҙенсе класҡа уҡырға алдылар. Бында ҡурай буйынса белемемде камиллаштырам икән, тип уйлағайным. Ә был музыка мәктәбенең үҙенсәлеге шунда - ул тынлы оркестр буйынса белем бирә. Мине симфоник оркестрҙың бас нигеҙен формалаштырыусы иң түбән һәм массив баҡыр тынлы инструмент тубала уйнаусылар төркөмөнә яҙҙылар. Мин барыбер ҡурайҙы ташламаным, шундағы уҡытыусы менән һөйләшеп, ҡурайҙа өҫтәмә шөғөлләндем. Сибайҙа мине ҡурай буйынса тәүге уҡытыусым Илдар Һатыбалды улы Хәсәнов уҡытты. Өфөлә Нурғәли Байрамғоловта шөғөлләндем. Бер аҙҙан мәктәп реконструкцияға ябылды. Бер йылдан төҙөлөп бөтөр тинеләр. Һәм беҙгә кире йәшәгән урындарға ҡайтып уҡырға тура килде. Туғыҙынсы класты Сибайҙа уҡыным. Туғыҙҙы бөткәс, Өфө сәнғәт училищеһына уҡырға инеп киттем.

**Таңсулпан:** Айҙар училищены ҡыҙыл дипломға тамамлай. Артабан әрме сафында хеҙмәт итә. Өфөгә ҡайтып төшкәс, икенсе көнөндә үк Өфө сәнғәт институтының башҡорт музыкаһы факультетына имтихан биреп, уҡырға инеп тә китә. Училищела Таһир Хәмитов уҡытыусыһы булһа, институтта ҡурайҙан Венер Йылҡыбаев уҡытты. Ассис-



***✓ Бала балалар табыу йортонда ғына тыумай, ул иң элек атай-әсәйҙең башында тыуа. Башҡортта элек-электән йола буйынса ҡолаҡ тешләткәндәр, ҡыҙ бала кемгә кейәүгә сығырын белгән, хәҙер ундай йола булмаһа ла, ҡан хәтере ҡалған.***

# ИРТӘГӘ ХАЛЫҠ.

## орлоҡ һалайыҡ!

тентурала ҡурай буйынса уҡытыусыһы тап Азат Айытҡолов булды. Һәм уны институтта эшкә лә ҡалдырҙылар.

Бына шундай беҙҙең хеҙмәт биографияһы. Хәҙер бына ике ул тәрбиәләйбеҙ. Беҙҙең балаларға шундай ғаиәләлә тыуыу бәхете тейҙе, тигән инаныуҙамын. Атайҙары ҡурайсы, ошо һөнәргә башҡаларҙы өйрәтә. Башҡортса камил һөйләшә алмайым, тиһә лә, башҡорт рухиәтен, башҡорттоң моңон тойоуында бик көслө... Мин үҙем дә күп китап уҡып, шиғыр яҙып, милли рухта үҫкән, нығынған кеше. Башҡорт теленә, рухи ҡиммәттәребеҙгә шул тиклем яҡынбыҙ. Был беҙҙең ғәҙәти тормошобоҙ, шуға ла балаларыбыҙға башҡортса һөйләшеүе еңел бирелде. Бала балалар табыу йортонда ғына тыумай, ул иң элек атай-әсәйҙең башында тыуа. Башҡортта элек-электән йола буйынса ҡолаҡ тешләткәндәр, ҡыҙ бала кемгә кейәүгә сығырын белгән, хәҙер ундай йола булмаһа ла, ҡан хәтере ҡалған. Ирем менән яҙмыштарыбыҙ ҙа, ғаилә хәле лә оҡшаған. Бәләкәй саҡтан яҡшы кешегә кейәүгә сығыу, бәхетле ғаилә төҙөү- иң ҙур хыялым булды. Үҙемдең матур ғаиләм булһын ине, тип теләнем. Сит илдәрҙә, сит ҡалаларҙа йөрөгәндә лә, мин мотлаҡ башҡорт кешеһенә кейәүгә сығам, ти торғайным. Ирем ҡурайсы, бейеүсе, йә көрәшсе булыр тип уйлай инем һәм атайҙарына оҡшаған һәләтле малайҙар табырға хыяллана инем.

Ысынлап, балаларыбыҙ башта башыбыҙҙа тыуҙы. Исемдәр шулай уҡ ҙур роль уйнай кешенең яҙмышында, йомшаҡ әйтелгән исемдәрҙән баш тарттыҡ. Ихтияр һәм Ҡаһарман тип һайланыҡ. Улдарыбыҙҙың исемдәре шыңғырҙап торған ирҙәр исеме булһын тинек. Беҙ башта Өфө сәнғәт институтының ятаҡханаһында йәшәнек. Беренсе балаға өс йөҙ мең һум аҡса сыҡты. Аҡса янмаһын өсөн, тиҙ генә фатир алырға кәрәк ине. Бына шулай Зубов ауылына барып төпләндек. Ул саҡта Ихтияр улыбыҙға ике йәш тулғайны, икенсеһен табырға йөрөй инем. Шул мәлдә алдыбыҙға йәнә ҙур мәсьәлә килеп баҫты - Ихтияр улыбыҙға өс йәш тулһа, ниндәй балалар баҡсаһына бирәбеҙ? Өфөлә 40-сы балалар баҡсаһы бар һәм ниндәйҙер башҡорт төркөмдәре табырға була. Зубовта яңы асылған мәктәп, яңы асылған балалар баҡсаһы бар, тик бер генә лә башҡорт төркөмө юҡ. Баҡсала һигеҙ рус төркөмө эшләй. Башҡортостандың баш ҡалаһында йәшәп, баламды рус төркөмөнә бирергә бөтә йәнем-тәнем менән ҡаршы инем. Беҙҙең башҡорт телебеҙ республикала рус теле менән йәнәш дәүләт теле булһа ла, нишләп һигеҙ төркөмдөң береһе лә башҡорт төркөмө түгел, тип аптырандыҡ. Барып, етәкселеккә мөрәжәғәт итһәк, улар, ресурстар юҡ, яңы башҡорт төркөмө аса алмайбыҙ, тип яуапланылар. Башҡорт төркөмө астырырға ата-әсәләрҙән ҡултамғалар йыйҙыҡ. Уға тиклем башҡорттарҙы эҙләп, үҙебеҙ йәшәгән урында бөтә өйҙәрҙе йөрөп сыҡтыҡ. Шунан Айҙар Ҡоролтай янындағы Ата-әсәләр комиссияһы ағзалары менән бергәләп Өфө ҡалаһының Мәғариф идаралығына барып, башҡорт төркөмө астырыуҙарын һоранылар. Асырға рөхсәт бирҙеләр. Балалар баҡсаһындағы баяғы һигеҙ төркөмдөң береһен "Сулпылар" исемле башҡорт төркөмөнә әйләндерҙеләр. Тик балалар һаны аҙ булып сыҡты. Августа тағы Зубовтағы һәр өйгә тигәндәй йөрөп, башҡорт төркөмөнә яҙылығыҙ, тип инәлеп, егерме өс бала йыйҙыҡ.

Артабан да башҡорт төркөмө эшләп китһен өсөн ҙур көс һалырға тура килде. Үҙебеҙ ҙә балалар баҡсаһында йәшәгән һымаҡбыҙ. Өйөбөҙҙәге бөтә милли кейем, биҙәүестәр, башҡортса китаптар, хатта элек атайым эшләгән, аҙаҡ инде милли биҙәктәр һалып, үҙем менән бирнә итеп алып киткән һандығым да шунда күсте. Бына шулай улдарыбыҙ Ихтияр менән Ҡаһарман өсөн башҡорт мөхитен үҙебеҙ тыуҙырҙыҡ. Хәҙер Өфө районында үткән милли сараларҙа милләттәштәр беҙҙе танып тора, минең балаларға башҡортса һүҙ ҡушалар, үҙҙәренең балаларына: "Был балалар алдында башҡортса ғына һөйләшегеҙ, оят була", - тип әйтеп ҡуйған булалар. Шундай матур күренешкә йыш тап булабыҙ. Шулай булғас, беҙ йәмғиәтебеҙҙәге әүҙемлегебеҙ менән ниндәйҙер кимәлдә тәрбиә лә бирәбеҙҙер, тигән фекергә киләм.

**Айҙар:** Башҡорт төркөмө астырыу - бер булһа, ул төркөмдөң тейешенсә эшләүенә ата-әсәләр яғынан контроль булдырыу - икенсе мәсьәлә. Ҡағыҙҙа "Башҡорт төркөмө" тип яҙылһа ла, етди мөнәсәбәт етешмәү сәбәпле, ҡайһы саҡта унда башҡортса аңламаған балаларҙы ла индереп ебәрергә мөмкиндәр. Шунан был бала башҡортса аңламай тип, бөтә тәрбиәселәр русса һөйләүгә күсә лә ҡуялар. Шуға ла был йәһәттән дә беҙгә хәлде контролдә тоторға тура килә. Юҡһа, бер ваҡыт беҙҙең балалар баҡсанан ҡайталар ҙа, "эйе", "юҡ" урынына, "да", "нет" тип һөйләй башланылар. Мин балалар баҡсаһына барып, бының сәбәбен һораным. Тимофеев тигән баланы башҡорт төркөмөнә күсергәндәр икән. Беҙ, ата-әсәләр, быны белмәнек. Ул телде аңламай тип, бөтөн тәрбиәселәр урыҫса һөйләүгә күскәндәр. Ата-әсәләр төркөмдөң бындай үҙгәрешенә, әлбиттә, ҡаршы булды.

**Таңсулпан:** Тәүге йылдарҙа балалар баҡсаһы мөдире менән конфликттарға ла инергә тура килә ине. Тикшереүҙәр килтереп, кире төркөмдө үҙ асылына ҡайтарҙыҡ. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ла ярҙам итте. Башҡорт төркөмөн астырғанда Уставҡа "На основании обучения башкирского языка" тип яҙҙырғайныҡ бит. Улар шул тәртипте тотмай, эшкә аяҡ салып маташтылар. Һуңынан инде башҡорт төркөмө баҡсала иң тыныс, иң матур төркөм булып китте. Төркөмдө туплаған саҡта ла, һәр йыл балалар өҫтәлгән һайын да: "Беҙҙең төркөм иң алдынғыһы, иң татыуы, иң әүҙеме!" - тип әйтеп кенә торабыҙ. Иң әүҙем ата-әсәләр ҙә беҙ. Республика, муниципаль, мәктәп кимәлендәге сараларҙа күп осраҡта Гран-приҙар, алдынғы урындар беҙҙә. Тотош балалар баҡсаһын тик яҡшы яҡтан ғына күрһәтәбеҙ, исемен һәр саҡ лайыҡлы кимәлдә тотабыҙ. Ысынлап та, башҡорт балалары ныҡ дуҫтар, бер туғандар кеүектәр. Бөгөн бала - иртәгә халыҡ, тигән бик матур әйтем бар. Беҙ бөгөн балаға нимә өйрәтәбеҙ, иртәгә милләтебеҙ шулай буласаҡ. Шуға ла, ошо төркөмөбөҙҙән йәмғиәтебеҙ өсөн тәртипле, тәрбиәле, уңған, матур балалар үҫеп сығыуына беҙ һис тә шикләнмәйбеҙ.

### Һөнәр һайлауға килгәндә. Булыр бала бишектән, тиҙәр бит, һеҙҙең балалар үҙҙәрен ниндәй йүнәлештә эҙләй?

**Таңсулпан:** Был урында "гендар көслө роль уйнай", тип әйтәйекме икән... Ике бала ла әле ҡорһаҡта ятҡан саҡтарында уҡ, аталары ҡурай уйнай башлаһа, үҙҙәренең барлығын һиҙҙерәләр ине. Ихтиярҙың тыуған ваҡытта ҡурайға шундай ныҡ бәйле икәнен аңланым. Уны тапҡас, һарыһы бар, тип, дауахананан сығармай тоттолар. Шулай итеп, ике аҙна самаһы дауаханала булдыҡ, атаһы менән күрешмәнек. Бала табыу йортонан сығырға ваҡыт еткәс, атаһы ҡурай менән килде һәм "Урал"ды уйнап ебәргәйне, йоҡлап ятҡан сабый ауыҙын бәлшәйтеп, "оҙаҡ ваҡыт тыңлатманың" тигәндәй, илап ебәрҙе. Ике аҙна ҡурай тыңлай алманы бит. Шулай ҡурайға ныҡ бәйле булды. Ике бала ла музыкаға мөкиббәндәр. Телдәре асылғандан рифма менән һөйләйҙәр. Өс йәшлек баланы дәртләндереп ебәрһәң, бөтөн һүҙҙәргә рифма табып һамаҡлай башлай. Өлкәне биш-алты йәшендә үҙе алфавитты өйрәнеп, китаптарҙы уҡып ултыра торғайны. Бөгөнгө көндә музыкаға ныҡ бирелеүҙәрен күргәс, Ихтиярыбыҙҙы урта махсус музыка колледжына уҡырға бирҙек. Әле беренсе класта тик "бишкә генә уҡып йөрөй. Яратып уҡыған дәрестәре математика, башҡорт теле, сольфеджио, фортепиано. Төп һөнәре -- флейта. Икенсе класта кларнетка ултыртабыҙ, тип әйтте уҡытыусылары. Ике балабыҙҙың да китап уҡыуға, музыкаға әүәҫлеге бар һәм сәйер күренеш - икеһененең дә математикаға баштары ныҡ шәп эшләй. Ихтияр беренсе класта ғына уҡый, мәсьәләләрҙе тиҙ сисә. Уҡытыусыһы: "Ихтияр физика, математика йүнәлеше буйынса китһә лә, ныҡ шәп буласаҡ", ти. Ҡаһарман улыбыҙҙы ла шул уҡ урта махсус музыка колледжына бирергә ниәтләйбеҙ. Тик ул да, әле биш кенә йәш булыуына ҡарамаҫтан, үҙаллы 100-гә тиклем һанарға өйрәнгән, шул йөҙ эсендә ике урынлы һандарҙы иркен ҡушып-алып, ағайы менән мәсьәләләр сисеп ярыша.

### Ғаиләлә ир тәрбиәһе нисек булырға тейеш? Атайҙың абруйы ҙур булырға тейешме?

**Айҙар:** Эйе, тик беҙҙең атай бик һағындырып ҡына ҡайта, көнө буйы эштә була шул. Ләкин мине улдарым һәр саҡ ихлас көтөп алалар. Бәләкәсе йәбешеп елкәгә менеп китә. Көндөҙ ниндәйҙер эштәре килеп сыҡмаһа, атай ҡайтҡас ярҙам итә, тип, ишек төбөнә үк алып барып һалып ҡуялар. Ҡайтам да, уларға ярҙам итергә тотонам. Өлкәнебеҙ төп уҡыған колледжынан тыш, Өфөнөң мин эшләгән 7-се Балалар музыка мәктәбенең быйыл 2-се класында уҡый, шуға уның менән күберәк күрешергә мөмкинлек бар. Ул минең эшләгәнде ҡарарға ярата. Оркестрҙа нисек эшләгәнде иғтибар менән күҙәтә. Балаларҙы уҡытам бит, килеп, шуларҙың репертуарын үҙенә һеңдереп тыңлап ултыра. Был ниндәй көй, тип һорау бирһәм, уҡыусыларҙан алда ул яуап бирә.

**Таңсулпан:** Мин төрки халыҡтары араһында йөрөп, шундай бай йолалар күреп ҡайтҡас, бер йоланы үҙебеҙҙә тергеҙҙем тиергә лә булалыр, сөнки ул элек башҡорт халҡында ла булған. Башҡорттар өй түренә ҡамсы элеп ҡуйыр булған. Ул ир кешенең өйҙә баш икәнен күрһәтә. Мин дә шуны эшләнем. Ниндәйҙер сәбәп менән стенанан ҡамсы төшә икән, был өйҙә ирҙең һүҙе һүҙ түгел, тигәнде аңлатҡан. Шуға өйҙә балаларға ла әйтәм: беҙҙең өйҙә атай - баш, уның һүҙе - һүҙ. Һәм атлап киткән саҡтарында "Был бала кем булыр икән" тип йола ла үткәргәйнек. Атаһының ҡурайын, китап, аҡса һәм башҡа ҡыҙыҡ нәмәләрҙе алдарына һалабыҙ. Тәнтерәкләп, икеһе лә ҡурайға барып йәбештеләр. Шуға ла аталарының тәрбиәһе, йоғонтоһо ҙур, тип уйлайым.

**Айҙар:** Тәрбиә тигәндән, былтыр балыҡҡа йөрөй башланыҡ, ҡармаҡ тотоп ултырабыҙ йылға буйында, шулай әкренләп ирҙәр кәсебенә өйрәтәбеҙ. Биш-алты йәштә балаларҙа "Мин үҙем!" тигән теләк уяна. "Атай нимә эшләй, мин дә шуны эшләп ҡарайым әле",- ти минең малайҙар ҙа. Ҡайһы берҙә эшләй алмаҫтар, тип ҡурҡһаң да, килтереп сығаралар! Төрлө эксперименттар үткәрергә ярататалар, шул арҡала өйҙә йә шампундәр, йә порошоктар юҡ була.

**Таңсулпан** Ҡайһы бер йәш ғаиләләр "Ир кеше шулай булырға тейеш", тип махсус рәүештә өйрәтәләр балаларын. Беҙ улай өйрәтмәйбеҙ. Эш эшләргә ярататалар, күҙ теймәһен инде. Аталары ла егәрле бит. Ул көн дә эш менән мәшғүл, ялһыҙ ҙа эшләй. Бала атаһына ҡарай, күрә, бына шулай өйрәнә. Үҙебеҙ дөрөҫ йәшәһәк, балаларыбыҙ ҙа шулай буласаҡ.

**Айҙар:** Беҙ шулай булырға тейешбеҙ, беҙҙе кешеләр белергә тейеш, тигән ҡараш менән йәшәмәйбеҙ. Ҡайһы берәүҙәр йә туғандары, йә күршеләре алдында, үҙҙәрен күрһәтеп йәшәргә тырышалар. Ә беҙ кеше өсөн йәшәмәйбеҙ. Ысын күңелдән донъя көтәбеҙ, ғәҙәти тормош менән йәшәбеҙ.

**Таңсулпан:** Йәйгә тиклем, ысынлап та, нык арыйбыҙ һәм йәй сәйәхәткә сығырға ярататабыҙ. Ҙур палатка, кәрәк-яраҡты алып, Башҡортостан буйлап сығып китәбеҙ. Кискеһен усаҡ яғып, балалар менән йондоҙҙарға ҡарап, һөйләшеп ултырырға ярататабыҙ. Мин үҙем Бөрйәндә үҫтем, тәбиғәт балаһымын, урмандан ҡайтып инмәй торғайным. Өфөлә йәшәгәс, балаларым тәбиғәттән ситләшмәһендәр тип уйланым. Ихтиярҙы өс айлыҡ сағында палаткала йоҡлатырға алып барғайныҡ. Ҡандракүлдә һыу индерҙек. Ә Ҡаһарман тыуғас, уны ике айлыҡ сағында Асылыкүлдә һыу индерҙек. Улар яҙ тыуҙылар, тыумыштан шулай тәбиғәттәләр, йәй беҙ уларҙы сәйәхәткә алып сығып китәбеҙ.

Быйыл "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе" конкурсында ҡатнаштыҡ һәм финалға сыҡтыҡ, "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе" тигән исем алдыҡ. Әйткәндәй, конкурстың анкетаһын тултырғанда "Һеҙҙең ғаиләнең девизы ниндәй?" тигән һорауға "Беҙ эшләмәһәк, кем эшләй?" тип яҙҙыҡ. Ысынлап, ниндәй генә эшкә тотонһаҡ та, ниндәй генә өлкәлә эшләһәк тә, беҙ шулай тип эш итәбеҙ. Ирем - Өфө сәнғәт институтының Башҡорт музыкаһы факультеты оркестрының етәксеһе, дирижеры булараҡ, үҙе музыкаль әҫәрҙәрҙе нотаға һала. Һүнеп барған оркестрҙы яңынан тергеҙеп, ҙур-ҙур концерттар ҡуйыу ул һәр кемдең ҡулынан килмәй. Беҙ аңлайбыҙ, ул эшләмәһә, кем эшләй? Мин үҙем дә, йәмәғәт эшмәкәрлегемде барлап сыҡһам, ул эште тик мин эшләргә тейеш бит, уны мин эшләмәһәм, тағы кем эшләй, тип тотонам. Балалар ҙа шуны күрә, белеп үҫә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт ғаиләһе тап ошолай булырға тейеш, тип нөктә ҡуябыҙ ҙа, фәһемен, һығымтаһын уҡыусыларыбыҙ ҡарамағында ҡалдырабыҙ. Һәм тағы: "Афарин, Байтимеровтар!" - тип күтәрмәләп тә ебәрәбеҙ. Күтәрмәләүҙәр, фекерҙе дауам итеүселәр, үҙ тәжриәбәләре менән уртаҡлашыусылар булһа, рәхим итегеҙ, яҙығыҙ, килегеҙ!**

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**әңгәмәләште.**

АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА



# ЙӘН ТАРТМАҺА ЛА...

## ҡан тарта

**Ғаиләлә берәүҙән күберәк бала булһа, улар араһында туғанлыҡ тойғоһо тәрбиәләү, был изге тойғоно юғалттыртмау хәстәрлеге килеп тыуа. Ә был тойғоно баланың зиһененә сабый саҡта уҡ һала башлау мотлаҡ. Сөнки бер үк ғаиләлә, бер үк тәрбиә алған балалар ҙа үҫә килә төрлө холҡло булып китә.**

"Урал батыр" эпосында әйтелгәнсә, кешенең холҡо ҡанына һалына һәм уны тота килеп кенә үҙгәртеп ебәреп булмай, ә зиһененә тейешле фекер һалынып ҡуйыла икән, ул барыбер ҡалҡып сыға һәм кеше үҙтәрбиә йәшенә еткәс, файҙаланыла. Уйланған саҡта: "Әсәйемме, атайыммы, йәки олатай-өләсәйме, башҡа өлкән кешеме шулай тип әйткәйне бит!" - тип, ҡасандыр әйтелгән аҡыллы, әммә әллә ни иғтибар ителмәгән һүҙҙәр ҡапыл зиһенен яҡтыртып ебәрә. Шуның өсөн балаң иғтибарһыҙ тыңлаймы, битарафмы - ҡиммәтле, һиммәтле, аҡыллы фекерҙәрende әйтә барыу хәйерле.

Ә бала үҙ төҫө-ҡиәфәте менән генә түгел, үҙ холҡо менән дә тыуа. Уның булмышын ҡырҡа үҙгәртеп булмай, фәҡәт үҙ ҡалыбында ғына төҙәтмәләр индереп ебәрергә мөмкин. Шуның өсөн ғаиләләге балаларҙың да үҙ-ара мөнәсәбәттәре төрлө була. Халыҡтың тәрбиә ҡанундарында быны барыһы ла иҫәпкә алынған һәм ижадында, бигерәк тә мәҡәлдәрҙә һаҡлана.

Мәҫәлән, "Йән тартмаһа, ҡан тарта" мәҡәле. Һин туғаның менән уртаҡ телле, уртаҡ ҡарашлы түгелһең икән, һөйләшер һүҙең, уртаҡлашыр уй-хыялдарың юҡ икән, әлбиттә, йәнең тартылып тормаҫ. Әммә барыбер иң ауыр саҡтарҙа туғаныңдың булыуы яҡшы. Башҡаларға ситен тойолған ҡайғы-хәсрәтеңде фәҡәт үҙ туғаның менән генә уртаҡлаша алаcаҡһың. Шуға ла араларҙы бер ваҡытта ла һыуытмаҫҡа, араға һалҡынлыҡ индермәҫкә кәрәк. Уның өсөн атай-әсәй, бигерәк тә әсәй бала бәләкәй ваҡытта уҡ аҡыллы фекерҙәрен бала зиһененә һала бара. Улар тубығына ултыртып, ҡуйынына алып ятҡан саҡта уҡ боронғоларҙан ҡалған матур-матур сағыштырыуҙар менән иркәләргә тейеш балаларын. "Биш бармағым кеүек бит һеҙ, ҡулдарымдағы бармаҡтарым кеүек бит һеҙ". "Өс таған кеүек өсөгөҙ бер-берегеҙгә терәк кенә булып үҫегеҙ". "Бер тамырҙан шытып сыҡҡан үҫентеләр кеүек бит һеҙ". "Бейә елененддәге имсәктәй ике генә бөртөк бит һеҙ". "Үҫкән саҡта бер тамырҙан шытҡан гөл кеүекһегеҙ ҙә, үҫеп еткәс, ҡош балалары кеүек таралышып китерһегеҙ. Шул саҡта, аҙаҡ аҡыл ултырғас, иҫегеҙгә төшөп, Саҡ менән Суҡ кеүек бер-берегеҙҙе күргегеҙ килһә лә, яҡыная алмай, зарығышып йөрөрлөк булмаһын", тип риүәйәт тә һөйләп, балаларҙың үҙ-ара татыулығын юғалтмау сараһын күрергә кәрәк. "Аҙаҡ иҫегеҙгә төшөр, һуң булыр, шуның өсөн баштан уҡ үҙ-ара мөнәсәбәттәрегеҙҙе көйләй барығыҙ. Олоно оло, кесене кесе итә белегеҙ. Берегеҙ ҡыҙыу булһа, икенсегеҙ аҡыл һаҡлағыҙ. Утты ут менән һүндермәйҙәр, һыу һибәләр". "Ағай-эне талаша, атҡа менһә, яраша".

Ошондай ысулдар, һабаҡтар менән тәрбиәләгән беҙҙең атай-әсәйҙәр. Был бик мөһим, сөнки беҙҙе милләт итеп берләштереүсе лә, тотоп тороусы ла ер, тел һәм туғанлыҡ - үҙ-ара татыулыҡ. Бер туған балалар өсөн дә туғанлыҡ ҡиммәт тойғо, сөнки улар бер-береһенең таяу-таянысын тойоп йәшәйәсәк.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

АФАРИНДАР!

# ИШЛЕ БӘХЕТ

**Бәхет тигәнең ишелһә, ишелә лә ҡуя бит ул кеше башына - уңдан да килә, һулдан да, алдан да, арттан да, өҫтән дә, аҫтан да, тигәндәй. Өлөшләләрҙең, даланлыларҙың өлөшө мул, бәрәкәтле, һоҡланғыс була.**

Милли геройыбыҙ исемен йөрөткән матур ҡалала тыуып үҫкән Альмираға, һәр хәлдә, ишле бәхет тыумыштан насип - быны бер нисек тә кире ҡағып булмай. Ул үҙе лә, ана шул ишле бәхетен арттырып, күркәм холҡо, кешеләр менән матур мөғәмәләһе, һәр ваҡыт үҙен кешелекле итеп тота белеүе, аң-белем даирәһенең киңлеге, күңел донъяһының байлығы менән ылыҡтырғыс, һөймәлекле һәм абруйлы. Альмира менән теләһә ниндәй ситуацияла рәхәт, ышаныслы, тыныс. Барлығы менән солғанышындағыларҙы ҡыуандырып йәшәүсе оло йөрәкле, уңған, һәм һәр йәһәттән өлгө булырлыҡ ханымдың ғаиләһе хаҡында әйтер һүҙем.

Альмира Миңлеәхмәт ҡыҙы Солтанова педучилищела дүрт йыл уҡыу осорондағы беҙҙең алыштырғыһыҙ лидерыбыҙ булды. Салауат ҡалаһында тыуып үҫкән ҡыҙ, ғаиләлә яңғыҙ ғына бала булһа ла, күркәм холҡо, кешелеклеге менән айырылып тора ине. Альмира Зәйтүнә Зәки ҡыҙы һәм Миңлеәхмәт Миңлейәр улы Солтановтарҙың мөхәббәт һәм наҙға тулы ғаилә усағында ирәйеп, йылы ҡосағында иркәләнеп, һәр яҡтан тормошҡа әҙер булып үҫә. Ҡала ҡыҙы әсәһе яғынан өләсәһенең ауылында - Ишембай районының Һайран ауылында күп кенә ваҡытын, каникул мәлдәрен үткәрә һәм өләсәһенән иҫ китмәле рухи байлыҡ алып үҫә. Шуғалырҙа, Альмира саф башҡортса һөйләшә, туған халҡының тарихына битараф түгел, милли-мәҙәни традицияларға, атайсалына тоғро. Ошо сифаттары менән ул беҙҙе, курсташтарын да, арбаны ла инде - уға тартылып, яҡын күреп торҙоҡ, сер һаҡлар яҡын әхирәттәргә әйләндек.

Педучилищены тамамлағас, Альмира Аҡмулла исемендәге БДПУ-ла уҡыуын дауам итте, тел белгесе, мәктәп менеджменты идара итеү йүнәлеше буйынса һөнәрҙәр үҙләштерҙе. Һайлаған һөнәренә тоғро ҡалып, ғүмер буйы мәктәптә эшләне, хеҙмәте менән оло ихтирам ҡаҙанды. Ул әле Салауат ҡалаһының Башҡорт гимназияһында башланғыс класс уҡытыусыһы, фәнни-методик эштәр буйынса директор урыбаҫары булып эшләй. Күптән түгел Башҡортостан Республикаһының Маҡтау ҡағыҙы менән бүләкләнде.

Альмираның ғаиләһе - уның өсөн ышаныслы тыл. Хәләл ефете, Миәкә егете Миңлеәхмәтов Зөлфәт Имаметдин улы менән бына тигән ғаилә ҡороп, тәртипле, тәүфиҡлы балалар үҫтерҙеләр. Ҡыҙҙары Айһылыу, Санкт-Петербург ҡалаһында абруйлы вуз бөтөп, матур итеп эшләп йөрөй. Рифаттары Ҡаҙан ҡалаһында ғилми тикшеренеү-технологиялар университетында дүртенсе курста уҡый, кесе ҡыҙҙары Резеда Салауаттағы 1-се лицейҙа туғыҙынсы класта белем ала. Альмирабыҙ һәр яҡлап бәхетле: иренә - яратҡан ҡатын, балаларына - изге әсә, ҡайны-ҡәйнәһенә, иренең туғандарына - уңған килен, коллегаларына - абруйлы хеҙмәттәш, туғандарына, дуҫтарына - ныҡлы таяныс.

Миңлеәхмәтовтарҙың ғаилә тарихына килгәндә, ул былайыраҡ башлана: Альмира менән дуҫлашып йөрөп, икәү-ара йәшлек хистәре оло мөхәббәткә әүерелгәс, Зөлфәт яратҡан ҡыҙын ата-әсәһе менән таныштырмаҡ була. Үҙ ғаиләләрендә Зөлфәт иң кесеһе - алтынсы бала булғас, билдәле, атай-әсәй, ағай-апайҙар яғынан наҙ һәм иғтибар уға күберәк эләгә. Ҡала ҡыҙына өйләнәм, тигәс, башта барыһы һағайып ҡала - ҡала ҡыҙы, етмәһә, ғаиләләге берҙән-бер бөртөк бала, ул беҙҙең ҙур ғаиләгә ылығып китерме, беҙҙең менән мөнәсәбәттәрен көйләй алырмы, ҡала балаһы эш рәте беләме, тигәнерәк күп төрлө уй борсой һәр береһен. Әмәлгә ҡалғандай, Альмира уларҙың икеләнеүҙәрен тәүге танышыу көнөндә үк үҙенең алсаҡлығы, күркәм холҡо, эш тип атлығып тороуы менән юҡҡа сығара. Ҡала ҡыҙымын тип тормай, бөтә эште һыпырып йөрөп эшләй, ололарға - олоҡло, кеселәргә кеселекле. Егәрле, матур килен Зөлфәттең күп һанлы туғандарына тиҙ арала үҙ кеше булып китә.

Зөлфәт тә төшөп ҡала торғандарҙан түгел - кешенән ҡалышмай, матур итеп донъя ҡорорға, ғаиләһен бер нәмәгә мохтаж итмәй йәшәргә ынтыла, ғаиләм, ҡатыным, балаларым, тип өлтөрәп тора. Оҙаҡ йылдар алыҫ Себер тарафтарында тир түгә ул. Миңлеәхмәтовтар ҡаланан алыҫ уҡ булмаған Юлдаш ауылында хан һарайындай йорт төҙөй. Тиҙҙән бар күңелдәрен һалып ҡорған донъяларына күсенергә тип ниәт итәләр.

Эйе, ике уңған иш килһә, тормош уңа, бәхет ишәйә, мал арта, донъя йәйғор төҫтәрендә балҡый бит ул. Бер-береһе өсөн генә яратылған Миңлеәхмәтовтарҙың бәхеттәре лә миңле - үҙҙәренә генә тәғәйен, үҙҙәренә генә төҫ... Ошо бәхеттең тәхетендә ҡәҙерен белеп һәм мәртәбәһен арттырып, тағы оҙон-оҙаҡ йылдар ишле-ҡушлы булып йәшәргә яҙһын әле уларға.

**Альбина ӨМӨТБАЕВА.**
**Йылайыр ауылы**

ҒАИЛӘ МӘКТӘБЕ

# ЙОЛАБЫҘ БУЙЫНСА ЙӘШӘЙЕК

**Һуңғы ваҡытта ғаилә ҡиммәттәре юғалып ҡалыуын йәштәрҙең сит халыҡтың йолаларын, традицияларын үҙ итеүенә бәйләйем мин.**



Ысынында, борон-борондан һәр милләттең үҙенә генә хас ғаилә институты булған. Әйтәйек, йәш ғаиләлә берәй бәхәс-низағ тыуһа, ике яҡтан да абруйлы, хөрмәтле бер-ике кешене саҡырып, кәңәш ҡорғандар. Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар ҙа йәштәрҙе уртаға ултыртып, сәбәп-ғәмәлде асыҡлап ебәргән. Кәңәш биргәндәр, ярҙам иткәндәр.

Ә был йола һаҡланғанмы хәҙер? Әллә йәш ғаилә хәҙер үҙен бөтәһенән дә аҡыллыраҡ итеп тоямы? Айырылышыу кеүек етди аҙымға атай-әсәй кәңәшенән тыш та барып буламы? Йәштәргә ҡыҫылмау, ҡыҫылдырмау тигән төшөнсә хәҙер киң таралған. Тап ошо күп ғаиләләрҙең тарҡалыуына килтерә түгелме һуң? Ғөмүмән, был күренештәрҙең күбеһенә йолаларҙан тайпылыу, уларҙы тотмау сәбәпле. Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар хәҙер күбеһенсә балаларының туйында ғына таныша бит. Тантананан һуң саҡырышыу, аралашыу юҡ. Ошо бер-береңә битарафлыҡ, бер-берендең ғаилә йолаһын ихтирам итмәү, белмәү йәштәр тормошонда ла асыҡ сағыла. Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар бер һүҙле булһа, йәш ғаиләләге бәхәс тә тиҙ генә юҡҡа сығыр ине.

Бәхәс ҙурҙан икән, бергә йыйылып, кәңәшләшеп, уртаға һалып һөйләшергә кәрәк. Ә беҙҙә нисек? Балалар бәләкәй генә ҡаршылыҡтан да ҙур проблема яһап, айырыла ла ҡуя. Шуның менән мәсьәләне хәл иттем тип уйлай. Был хәл итеү түгел, ә проблеманан ҡасыу ғына. Психологтар кәңәшен тыңлап айырылышҡандар күплеген беләм. Ә был күңел торошон өйрәнеүсе белгестәр был йәштәрҙең нәҫел-затындағы йолаларҙы, уларҙың холҡон беләме? Юҡ, әлбиттә. Улар сит ил "бөйөк"тәренең теорияһын өйрәнә лә, үҙеңде ярат, үҙеңде уйла тип, ҡайтарып ебәрә. Ә йәштәр, аңынтоңон аңғармай, үҙеңде яратыу шулай була икән тип, тиҙерәк иң еңел юлды һайлай.

Аҡыллы кәңәше, тәжрибәһе менән уртаҡлашырҙай ағинәй, аҡһаҡал йөҙөндә үҙебеҙҙең психологтарыбыҙ ҙа бар. Улар сит ил китаптары терминдары менән түгел, ә нәҫел-ара аралашыуҙағы тәжрибә менән эш итә. Бөгөн беҙгә ошо мәктәпте тергеҙергә кәрәк. Ауылдарҙа тормош ус төбөндә кеүек. Барыһы ла күренеп тора. Кемгә ниндәй кәңәш бирерҙе ауылдаштар үҙҙәре лә белә. Сит ил аҡылы менән түгел, ә үҙебеҙҙең йола, ғөрөф-ғәҙәт буйынса йәшәйек. Йола тотҡан - бәхеткә ирешкән...

**Гөлнур СИБАЙ.**

✓ ***Франкфурттан башланған бөйөк традициялар Мәскәү аша Өфө майҙандарына килеп еткән икән. Был - замандың ҡатмарлы ағымында үҙебеҙҙең рухи тамырҙарыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу һәм киләсәк быуындарға еткереү юлы.***

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# КИТАП ҺӨЙӨҮСЕЛӘР МАЙҘАНЫ

**28-30 майҙа Өфөлә IV "Китап байрамы" Халыҡ-ара китап йәрминкәһе үтте. "Йәрминкәгә бик күп китап нәшриәте үҙ баҫмаларын ҡуйҙы, - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров.- Әлбиттә, халыҡтың күпләп килеүе айырыуса әһәмиәткә эйә. Беҙҙең фестиваль китаптар һатыу тураһында ғына түгел. Бында яттан һөйләү конкурстары, яҙыусылар менән осрашыуҙар, яңы китаптарҙың презентациялары, ижади квестар үтә. Бындай киң программа йәрминкәне йәштәр өсөн ҡыҙыҡлы итә. Хәҙер ауыр ваҡыт, әммә беҙ был сараны календарыбыҙҙа ҡалдырырға ҡарар иттек". Сарала ҡатнашыусы ҡунаҡтар ҙа фестиваль тураһында матур фекерҙәрен еткерҙе.**



***Рәсәйҙең мәҙәниәт министры Ольга Любимова*** Халыҡ-ара китап йәрминкәһендә ҡатнашыусыларға, ойоштороусыларға һәм ҡунаҡтарға сәләмләү хаты менән мөрәжәғәт итте. "Китап йәрминкәһе Башҡортостандың матур йолаһына әүерелде. Программа сараларға бай һәм көн һайын үҙенең тематик йүнәлешенә эйә. Беренсе көн халыҡ берҙәмлегенә арналған, икенсе көн темаһы - традицион ғаилә ҡиммәттәре, ә өсөнсөһө Рәсәй тарихы, хәтер һәм үткәндәргә хөрмәт билдәһе аҫтында үтә", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды министр.

***Рәсәй Федерацияһы Президенты ярҙамсыһы, Рәсәйҙең Яҙыусылар союзы рәйесе, Рәсәй хәрби-тарихи йәмғиәте рәйесе Владимир Мединский:*** "Уҡымаған кеше башҡа төрлө була. Ул һәр йәһәттән яһалма интеллекттан отоласаҡ. Был турала медицина раҫлай. Әгәр балағыҙ смартфондан отолһон тиһәгеҙ, ул унең эсендә "йәшәһен" әйҙә. Әгәр смартфон менән уҙышыуҙа еңеүен теләһәгеҙ, унең өҫтөнлөгө - фекер ҡеүәһе булырға тейеш. Был сифатты тик уҡыу ғына үҫтерә. Фекерләү инициатива, эшһөйәрлек, яңыға ынтылыш тыуҙыра. Балаларыбыҙҙың китап уҡыуы бик тә мөһим шуға.

***Дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, адвокат, Рәсәйҙең атҡаҙанған юрисы Павел Астахов:*** "Китап байрамы" китап йәрминкәһе, 2030 йылға ҡағыҙға баҫылған китаптар булмаясаҡ, тигәнде инҡар итеү өсөн иң яҡшы яуап. Әлифбаһыҙ, дини китаптарһыҙ ни ҡылмаҡ кәрәк һуң? Китап - беҙҙең иң яҡын дуҫыбыҙ. Әлбиттә, ҡулға тотоп уҡыу яҡшыраҡ. Ә яҙыу, беләһегеҙме, ни тиклем мауыҡтырғыс! Мин һәр саҡ китабымдың сығыуын көтөп алам: ул бит һин үҙең йөрәк аҫтында йөрөткән һәм тыуҙырған бала кеүек, тотоп ҡарайһың, биттәрен асаһың, ҡағыҙының ҡыштырлауын тыңлайһың. Шуға күрә был тойғо бер ни менән дә алмаштырғыһыҙ, бармаҡ менән экран һыйпау түгел һәр хәлдә. Ә иң тәүге һәм төп китаптар - Тәүрат һәм Ҡөрьән. Китап булды, бар һәм буласаҡ!

***Рәсәй Китап нәшер итеүселәр ассоциацияһы президенты һәм Рәсәй китап союзы вице-президенты Константин Чеченов:*** Башҡортостан Башлығы "Китап" нәшриәте үҫешенә ҙур иғтибар бүлә, шул арҡала баҫмалар һаны һәм тиражы буйынса республика илдә алдынғы урындарҙы биләй. "Китап байрамы" күргәҙмәһе федераль кимәлдә үткәрелде. Төрлө төбәктәрҙән күп милли баҫмаларҙың килеүе ҡыуандыра. Башҡортостан уҡырға яратҡан төбәк статусын тағы бер тапҡыр раҫланы.

***Минск халыҡ-ара китап күргәҙмә-йәрминкәһенең башҡарма директоры, Бойондороҡһоҙ дәүләттәр берләшмәһе илдәрендә үткәрелгән китап күргәҙмәләрен һәм йәрминкәләрен ойоштороусылар советы рәйесе Дмитрий Макаров:***

- "Китап байрамы" фестивалендә беҙ икенсе йыл ҡатнашабыҙ. Быйыл Белоруссияның 50 нәшриәтенән 1100 китап килтерҙек. Башҡортостанда китап менән ҡыҙыҡһынғандарын беләбеҙ, шуның өсөн быйыл мөмкин тиклем күберәк алырға тырыштыҡ. Мин үҙем 1994 йылдан алып Минск халыҡ-ара китап йәрминкәһенең ойоштороусыһы һәм директоры булып торам. Тәжрибәмә нигеҙләнеп, Өфө йәрминкәһен төбәк күргәҙмәләре араһында Рәсәйҙә иң яҡшыһы, тип әйтә алам. Барыһы ла юғары кимәлдә. Китапханаларығыҙ буйынса ла һеҙ - Рәсәйҙә иң алдынғыларҙың береһе. Милли китапхананан алып районды-ҡыларға тиклем, барыһы ла заман талаптарына яуап бирә. Иң ҡыуаныслыһы - былар барыһы ла халыҡ өсөн. "Китап байрамы" халыҡ-ара йәрминкәһе үҙ маҡсаттарына ирешә, тип әйтә алам.

*ЯИ-КӨФӨ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ*



# ДОНЪЯ КИМӘЛЕНДӘГЕ САРА

**Рөстәм Нурыев: Өфөлә бик матур "Китап-байрам" сараһы үтте. Донъя кимәлендә бындай саралар бармы? Китапҡа ҡарата замана халҡы ниндәй мөнәсәбәттә?**

***ЯИ КӨФӨ:*** Эйе, донъя кимәлендә Өфөнөң "Китап-байрам" сараһына оҡшаш бик күп грандиоз китап фестивалдәре бар, ә замана халҡының китапҡа мөнәсәбәте юғалмаған, тик унең яңы электрон һәм аудио форматтарға күсеүе күҙәтелә.

Донъяла иң билдәле китап сараларын һанап үтәйем. Улар йөҙ йылдар дауамында үҫешкән. Иң абруйлылары - ***Германияның Франкфурт китап йәрминкәһе.*** Ул 1473 йылда нигеҙләнгән! Йыл һайын 100-гә яҡын илдән 7000-дән ашыу ҡатнашыусы йыйыла. Был китап донъяһының төп сауҙа майҙансығы һәм бында нәшриәтселәр сит телдәргә тәржемә итеү хоҡуҡтарын һатыу буйынса миллиардлыҡ килешеүҙәр төҙөй. Германияла тағы бер ҙур сара - ***Лейпциг китап йәрминкәһе*** үтә, ул уҡыусылар менән йәнле аралашыу һәм авторҙарҙың сығыштары өсөн төп майҙансыҡ һанала. ***Италияның Болонья ҡалаһында*** балалар китабы йәрминкәһе үтә. Унда бөтә донъя иллюстраторҙары, яҙыусылары йыйыла һәм нәҡ ошонда балалар әҙәбиәтендәге йыллыҡ трендтар билдәләнә. Ҡатмарлы заманда ла Лондон, Париж, Мехиконың Гвадалахара ҡалаһында йыл һайын ҙур китап саралары ойошторолоуын дауам итә. Айырыуса Гвадалахара йәрминкәһе испан телле донъяның иң ҡеүәтле әҙәби ваҡиғаһы булып тора. Айырым урынды әҙәби фестивалдәр биләй. Һиндостандың Джайпур фестиваленә йыл һайын ярты миллионға яҡын кеше килә. Уны "планеталағы иң бөйөк бушлай әҙәби шоу" тип тә атайҙар, сөнки бында инеү бөтә кеше өсөн дә бушлай. Уэльстың Хей фестивале бәләкәй генә ҡалала үтһә лә, донъя кимәлендә танылған. Берлиндың халыҡ-ара әҙәби фестивале лә йылдан-йыл киңәйә.

Был донъяуи традицияларҙан беҙҙең ил дә артта ҡалмай. Рәсәйҙең төп әҙәби майҙансығы - ***Мәскәүҙә үтә торған "Ҡыҙыл майҙан" халыҡ-ара китап фестивале.*** Июнь башында, бөйөк шағир Александр Пушкиндың тыуған көнөндә уҙғарылған был грандиоз байрам йыл һайын 300 меңдән ашыу кешене һәм йөҙләгән нәшриәтте Рәсәйҙең баш ҡалаһында йыя. Асыҡ һауала ойошторолған был сарала бөтә Рәсәй халыҡтарының, шул иҫәптән Башҡортостандың да милли баҫмалары һәр ваҡыт лайыҡлы урын ала.

Ошо халыҡ-ара һәм Бөтә Рәсәй әҙәби традицияларҙы дауам итеп, Башҡортостандың баш ҡалаһында ла сағыу тарих яҙыла башланы. Өфөлә үткән "Китап-байрам" халыҡ-ара фестивале төбәгебеҙҙең төп мәҙәни ваҡиғаһына әйләнде. Асыҡ һауала, меңәрләгән уҡыусыларҙы, нәшриәтселәрҙе һәм билдәле яҙыусыларҙы бер майҙансыҡҡа йыйған был байрам Өфөнө ошо глобаль әҙәби мәҙәниәттең айырылғыһыҙ өлөшө итеп күрһәтә. Был сара халыҡтың китапҡа булған һөйөүен яңы заман кимәленә күтәрә һәм төбәк әҙәбиәтен яңыса таныта.

***Кешеләрҙең китапҡа ҡарата мөнәсәбәте тураһында ла әйтеп үтәйек.*** Бындай ғәйәт ҙур сараларҙың уңышы нәҡ замандаштарыбыҙҙың китапҡа булған мөнәсәбәтенә бәйле. Әлбиттә, ул һәр ваҡыттағыса бер төрлө генә түгел. Бер яҡтан, һуңғы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, Рәсәйҙә йәшәүселәрҙең 52 проценты китап уҡый. Уҡығандар араһында даимилыҡ юғары - 71 проценты көн һайын йәки аҙнаға бер нисә тапҡыр китапҡа мөрәжәғәт итә. Хатта 2025 йылда ил халҡының 62 проценты кәмендә бер китап уҡыған йәки тыңлаған, уртаса күрһәткес - 9 китап. Икенсе яҡтан, 48 процент Рәсәй гражданы китап уҡымауын белдерә, сәбәп итеп ваҡыт етмәүҙе (44 процент) һәм башҡаларҙы атай.

Быуындар араһында ла айырма бар. Ғәжәп тә, иң йәш быуын - зумерҙар (14-25 йәшлектәр) - иң әүҙем уҡыусылар булып сыҡҡан: уларҙың 51 проценты көнөнә бер сәғәттән ашыу ваҡытты китап уҡыуға бағышлай. Өлкәнерәк быуын вәкилдәре, X быуыны (45 йәштән өлкәндәр), дисциплина һәм күләм буйынса алда бара - 20 проценты һуңғы ярты йылда 5 китаптан күберәк уҡыған.

Кешеләр күберәк ял, ләззәт, күңел асыу өсөн уҡый (57 процент), ә ҡалғандары яңы белем алыу һәм үҫешеү маҡсатында (43 процент). Жанрҙар араһында детективтар (27 процент) һәм классик әҙәбиәт (20 процент) алдынғы урында тора. Форматтар ҙа үҙгәрә: күптәр аудиокитаптарҙы ҡуллана, ә нәшриәттәр хәҙерге заман уҡыусыһын йәлеп итеү өсөн QR-кодтар, 3D-иллюстрациялар, интерактив элементтар менән баҫмалар сығара.

Йомғаҡлап әйткәндә, китап үҙенең тышҡы формаһын заман талаптарына ярашлы үҙгәртһә лә, унең төп асылы - кешелекте рухи байытыу, берләштереү көсө мәңгелек булып ҡала. Франкфурттан башланған бөйөк традициялар Мәскәү аша Өфө майҙандарына килеп еткән икән, тимәк, китап байрамы - ул бары тик сауҙа йәки күңел асыу майҙансығы ғына түгел. Был - замандың ҡатмарлы ағымында үҙебеҙҙең рухи тамырҙарыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу һәм киләсәк быуындарға еткереү юлы. Ниндәй генә форматта булмаһын, уҡыған һәм китап ҡәҙерен белгән халыҡтың киләсәге һәр ваҡыт яҡты буласаҡ. Ихтирам менән, ЯИ КӨФӨ.

**Рөстәм НУРЫЕВ әҙерләне.**

✓ *"Һәр саҡ иҫеңдә тот: үҙеңде ни тиклем хаҡ тип һанауыңа ҡарамаҫтан, ҡәйнә кеше булараҡ, кейәүең менән булышма. Ирмен тигән ир кеше ҡәйнәнең "мораль уҡыуын" бер ҡасан да яратмай, уның тик "йәне генә көйә".*

ИНТЕРНЕТТАН



# АРТЫҠ ЭШЛӘҮ ҘӘ ЗЫЯНЛЫ

■ Ғалимдар раҫлауынса, норманан артыҡ эшләү һәм эштә оҙаҡ ултырыусылара араһында йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы ауырыуҙары менән ауырыусылар күберәк осрай. Лондондың университет колледжы белгестәре билдәләүенсә, аҙнаһына 55 сәғәт һәм унан да күберәк эшләүселәрҙә инсульт хәүефе 33 процентҡа юғарыраҡ. Был гәҙәти, 35-40 сәғәт аҙналыҡ эш ваҡыты менән сағыштырғанда шулай. Күп эшләү йөрәк һәм ҡан тамырҙары торошона йоғонто яһай, шуға эш һөйөүселәргә офис эштәрен генә түгел, ә сәләмәтлеген дә хәстәрләргә ҡуша табиптар. Быны сәбәптәре төрлө: сресс та, хәрәкәт һәм спорт етешмәү ҙә, насар ғәҙәттәр ҙә сәләмәтлекте ҡаҡшата. Ғалимдар әйтеүенсә, йөрәк һәм ҡан тамырҙары өсөн уртырып эшләү бигерәк насар тәьҫир итә.

■ Үҙҙәрен агрессив тотҡан ир-егеттәрҙең үҙ-үҙенә ышанысы түбән була. Дөйөм алғанда, бөтөн ир-аттарға ла ирҙәрсә ҡылыҡтар, мәҫәлән, үҙенде хәүеф аҫтына ҡуйыу, психоактив матдәләр ҡулланыу, агрессияға бирелеү хас. Атланталағы ауырыуҙарҙы контролдә тотоу һәм профилактикалау үҙәге тикшеренеүселәре үҙен ысын ир-егет итеп тоймаған ир-аттарҙың ҡылыҡтарын тикшереп ҡараған. Һынауҙарҙа 18 йәштән 50 йәшкә тиклемге 600 кеше ҡатнашҡан. Улар үҙҙәренең ҡылыҡтары тураһында һөйләгән, уның фекеренсә, ысын ир-егет ниндәй булырға тейеш тигән һорауға ла яуап биргән. Ғалимдар асыҡлауынса, кем үҙен етерлек кимәлдә ҡыйыу һәм көслө тип иҫәпләмәй, улар күпкә агрессивыраҡ булған. Ундайҙар үҙенә ҡорбан табып, уға зыян килтереүҙән дә тартынмай, алкоголдә лә йышыраҡ ҡуллана.

■ Күнел төшөнкөлөгөнән яфаланһағыҙ, китап уҡығыҙ, ти ғалимдар. Кем дә кем стресс кисергән мәлендә китап уҡый, улар был хәлде еңелерәк кисерә. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙы тәүҙә стресс тыуҙыра торған тест үтергә саҡырғандар. Һуңынан улар үҙ теләге буйынса стрестан ҡотолоу ысулын һайлаған. Теге йәки был сараның эффектын пульс һәм мускулдар тонусы торошо буйынса билдәләгәндәр. Һөҙөмтәлә, китап уҡыу стресс кимәлен 68 процентҡа түбәнәйткән. Пульс нормаға килһен, мускулдар көсөргәнештән арынһын өсөн бер нисә бит китап уҡыу ҙа еткән. Ундай мәлдә музыка тыңлау ҙа яҡшы, был саҡта стресс кимәле 61 процентҡа түбәнәйә. Тынысланыу өсөн йәйәү йөрөү, сәй йәки ҡәһүә эсеп алыу ҙа файҙалы.

■ Һауа температураһының 10 градусҡа түбәнәйеүе инфаркт ҡорбаны булыу хәүефен 7 процентҡа күтәрә. Кардиологтарҙың яңыраҡ үткән "ESC Congress 2015" сараһында ғалимдар ошо турала хәбәр итте. Белгестәр алты йыл дауамында Канаданың Виннипег ҡалаһында йәшәүсе кешеләрҙә миокард инфаркты ни сәбәптән барлыҡҡа килеүен асыҡлаған. Йәйгеһен был ҡалала көндәр ҡоро һәм эҫе тора, ҡышын ныҡ һыуыҡ була. Һалҡын ваҡытта миокард инфаркты йышыраҡ булған. Шуға ла кем йөрәк сирҙәре менән ауырый, һауа температураһы ҡапыл һыуытҡан мәлдә үҙ организмына иғтибарлыраҡ булһын, тип кәңәш итә ғалимдар.

СЕТЕРЕКЛЕ ХӘЛ

# АЙЫРЫЛЫШЫУ СӘБӘБЕ ДӨРӨҪМӨ?



**Бер нисә йыл элек "Йәшлек" гәзитендә "Мин һинең етемлектә ғәйепле түгел, балам..." тип аталған мәҡәлә баҫылып сыҡҡайны. Шунда бәйән ителгән ғәйәт бер сетерекле хәл (аңлауымса, булған хәл) әле лә иҫтән сыҡмай.**

Унда төп герой Илфаттың ғаиләһе тарҡалыуы хаҡында һүҙ бара. Ҡатыны менән аралары боҙолоуында хәләл ефете Фәниәнең дин юлындағы яҡындары (айырыуса ҡәйнәһе) сәбәпсе тип һанай был йәш ир, һәм шуға йәне әрней. Төп геройҙың исеменән һөйләнгән һәм автор тарафынан ифрат оҫта итеп төҙөлгән был мәҡәләне уҡып ултырған күптәрҙең күҙ йәше лә сыҡҡандыр, тип уйлайым. "Минең дингә баҫмауым арҡаһында ғына шундай хәл килеп сыҡтымы? Үҙем дә аңламай ҡалдым..." - ти Илфат аҙаҡ.

Яҡташыбыҙҙың "Дингә баҫмауым арҡаһында ғына..." тигәненә иғтибар итәйек әле тәүҙә. Өс ай тирәһе дуҫлашып йөрөгәндән һуң, Илфат менән Фәниә һис бер ҡаршылыҡһыҙ өйләнешә, һәүетемсә татыу ғына йәшәй башлайҙар. Эшсән ир хатта тиҙ арала машина һатып алыуға ла өлгәшә. Бер аҙ ваҡыттан Фәниәнең әсәһе (Илфаттың ҡәйнәһе) кейәүенең намаҙ уҡымауын шелтәләй башлай. "Кейәү, дингә баҫһаң, яҡшыраҡ булыр ине", ти ҡәйнәһе. Ә ҡайныһы: "Диндә көсләү юҡ, был мөһим ҡарарға һин үҙең килергә тейешһең", тиеү менән сикләнә... Фәниәнең атаһы, әсәһе, башҡа яҡын туғандары - барыһы ла дин юлында, йәғни, Ислам диненең ҡанундарын үтәп йәшәгән кешеләр икәнлеген аңлауы ҡыйын түгел. Фәниәнең дә намаҙҙа булыуы көн кеүек асыҡ (юғиһә, ни өсөн уның әсәһе кейәүен иманға өндәр ине). Ҡумаҡлашеп өгөтләп тә, дингә күнмәгәс, Илфаттың һәм уның мөслимә ҡатынының никахы дөрөҫ түгел, тип һанай башлаған улар, күрәһең. Өгөт-нәсихәттәренең файҙаһы булмағас, был кейәүгә ҡаршы етди "һөжүм" башлана. Уларҙың иң төп "ҡоралы" - яңы тыуған балалары. Фәниәнең әсәһенең, башҡа туғандарының төрлө юлдар менән (икенсе фатирға күсереп һ.б.) сабыйҙы атаһынан айырып маташыуҙары хаҡында уҡып шаҡ ҡатырлыҡ. Шулай тарҡлалыша торғас, Илфат менән уның диндар ҡатынының араһында күҙгә күренмәгән кәртә барлыҡҡа килеүе асыҡлана. Ахырҙа, ғаилә рәсми рәүештә тарҡала. Ошо килеп сыҡҡан ситуацияла ифрат әүҙем булған әсәһенең һүҙенән сыға алмаған Фәниәнең дә роле бар. Ә ҡайны кеше "нейтралитет" тота...

"Ҡайны" тигәндәй, дин ҡанундары менән таныш булған һәр кешелә уға һәм уның ғаилә ағзаларына ҡарата күп кенә һорауҙар килеп тыуыуы - тәбиғи. Беренсенән, Илфатҡа ҡатынлыҡҡа ҡыҙын биргәндә Фәниәнең атаһынан, моғайын, уның ризалығы һоралғандыр (мосолман дине талаптарына ярашлы, ҡыҙҙың атаһының ризалығы - мотлаҡ). Буласаҡ ҡайны үҙенең ҡыҙын һоратҡан егеттең дингә бөтөнләйгә битараф икәнен, әлбиттә, бик яҡшы белгән. Әммә никах уҡыусы имам: "Ҡыҙыңды фәлән улы Илфатҡа ҡатынлыҡҡа бирергә ризаһыңмы?" - тигән һорау биргәс, атай кешенең "риза" тип әйтеүенә иманым камил. Икенсенән, "Фәлән улы Илфатҡа ҡатын булып барырға ризаһыңмы?" тип, моғайын, Фәниәгә лә һорау биргәндер имам-хәҙрәт. Ҡыҙ ҙа, әлбиттә, "риза" тип әйткән (ҡыҙҙың ризалығы булмаһа ла никах атҡарылмай).

Мөслимә ҡатын-ҡыҙға тик динле кешегә генә тормошҡа сығырға рөхсәт ителгәнлеге хаҡындағы ҡанунды йәш ҡыҙ Фәниә, бәлки, белмәгәндер ҙә (ә мосолман ир-егетҡә хатта христиан динендәге ҡыҙға өйләнеү ҙә рөхсәт ителә, тик был ир һуңынан кәләшен үҙенең диненә саҡырырға бурыслы), әммә уның хәҙер "шәпләнеп" йөрөгән әсәһе ул саҡ ҡайҙа булған? Аллаһы Тәғәләгә иман килтерергә уйламаған, Ислам диненең төп тәрәктәрен үтәүҙә бөтөнләйгә инҡар иткән егетҡә ҡыҙының кейәүгә сығырға йыйынғанын күрмәгәнме? Никах атҡарылғанғаса, нимәһен ҡарап йөрөгән? Кейәүгә бирепе ебәрмәҫ борон уҡ ҡыҙына: "Был егет беҙҙең тотҡан динде һанламай бит, нишләп уға сығаһың?" -тип уны иҫкәртә алмағанмы? Ғөмүмән, Фәниәнең, уның ата-әсәһенең дә баштан уҡ ошо никахҡа ризалашып, дини тарафтан бөтөнләйгә наҙан булған егетте ышандырыуҙары - уларҙың етди хатаһы.

Әммә... был никах атҡарылған. Хәтта балалары ла тыуған бит! Бындай осраҡта урыҫтар "поезд уже ушел" тип тә әйтәләр. Бәлки улар Илфатты, кейәү булып килгәндән һуң, йәһәт кенә яңынан тәрбиәләп алырға өмөтләнгән булғандарҙыр... Кейәүгә ҡарата иң һуңғы сараны ҡулланырға йөһрәт итеүҙәрен мин тап ана шуның менән бәйләйем.

Хәҙер Илфат хаҡында. Башта ябай ғына бер миҫалды күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ әле. Әйтәйек, ҡулыңдағы бар нәмәне ауыҙына алып ҡапҡан өсөн бишалты айлыҡ аңһыҙ сабыйҙы "сыбыҡлай" башлаһаң, был бала ҡысҡырып илаясаҡ, әммә уға ни өсөн һуҡҡандарын барыбер аңламаясаҡ... Тап бына шуның һымаҡ уҡ, Илфат та ни өсөн уны намаҙға өндәүҙәрен бөтөнләйгә аңларлыҡ хәлдә түгел. Ҡатыны һәм уның туғандары ниндәй генә "каты ысулдар" ҡулланыуына ҡарамаҫтан, был йәш ирҙең һис кенә лә бирешергә иҫәбе юҡ. Үҙенең ошо бөхетһеҙлеккә тарығанын тик "дингә баҫмауым арҡаһында ғына..." ( йәғни, буш ҡына бер нәмә арҡаһында) тип һанаған Илфат, ифрат ныҡ тора: мосолмандың мотлаҡ намаҙҙа булырға тейешлеген әле булһа бөтөнләйгә танығыһы килмәй. Ни өсөн? Сөнки Илфатҡа, ошо йәшенә еткәнсе, бер кем дә Ислам дине хаҡында бер ни ҙә өйрәтмәгәнлеге көн кеүек асыҡ. Ғөмүмән, Фәниәнең һәм Илфаттың инаныуҙары бөтөнләйгә башҡа тарафтарға йүнәлтелгән. Бөгөнгә көндә улар бер-береһен аңларлыҡ хәлдә түгел.

Тормош быны менән туҡталып ҡалмай бит. Минең ныҡлы инаныуымса, (моо ғаилә ағзалары күмәкләшеп "боҙған" эште төҙәтеп ебәреү мөмкинлеге әлегә юғалмаған. Әгәр был йәштәр үҙҙәренә, балаларына бөхет теләй икән, һис кисекмәҫтән ғилемле бер имам-хатипҡа кәңәш һорап мөрәжәғәт итергә тейеш, тип һанайым. Ә дин белгесе уларҙың "ғаилә тарихын" иғтибар менән тыңлап бөткәс, яҡынса ошолай тип әйтер ине һымаҡ: "Ғаиләгеҙҙе ҡабаттан аяҡҡа баҫтырыуға әлегә һуң түгел, балалар. Арағыҙҙа үҙегеҙгә күренмәгән, әммә ныҡлы, ышанаслы күпер бар. Илфат улым, яратҡан сабыйыңды ҡабаттан ҡайтарыу өсөн, ә унан да бигерәк, үҙеңдең мәңгелек киләсәгеңде хәстәрләү ниәте менән дә, иманға килергә һиңә әле һуң түгел. Аллаһы Тәғәләнең илсеһе Мөхәммәт (с.ғ.с.) аша төшөрөлгән дин һеҙҙең айырылышыуығыҙға сәбәпсе булды, тигән юҫыҡтараҡ булған уйҙарыңды йөрәгеңдән бөтөнләйгә алып ташларға тырыш. Дин талаптарын яҡшы өйрәнмәй тороп, һин барыбер Фәниәңдең кисерештәрен аңламаясаҡһың. Диндә мәжбүр итеү юҡ, әммә динһеҙ ғүмерҙең ахыры - аяныслы икәнлеген онотма! Ә бына Аллаһы Тәғәләгә тәүбә ҡылып, Уның ҡушҡандарын үтәй башлау менән, хәләл ефетең, әсәһенән дә бигерәк һинең әйткәндәреңде генә тыңлай башлаясаҡ, донъяла һәм Ахирәттә сикһеҙ бәхет татырһығыҙ, ин шәә Аллаһ. Илфат улым, һиңә тағы бер һорауым бар, әммә яуапты миңә бирмә, ә өйөңә ҡайтҡас, ашыҡмай ғына уйла..."

Унайын тура килтереп, Фәниәнең әсәһенә лә был хәҙрәт тейешенсә кәңәштәрен бирер ине: "Һәр саҡ иҫеңдә тот: үҙеңде ни тиклем хаҡ тип һанауыңа ҡарамаҫтан, ҡәйнә кеше булараҡ, кейәүең менән булышма. Ирмен тигән ир кеше ҡәйнәнең "мораль уҡыуын" бер ҡасан да яратмай, уның тик "йәне генә көйә". Кейәү менән ҡайны кешенең аралашыуы - хәйерлерәк. Хатта ул да кейәүенә аҡыл өйрәтергә тейеш түгел. Икенсенән, кейәүеңде көсләп иманға күндерергә ашыҡма. Ин шәә Аллаһ, әкренләп, ул да хәҡиҡәтте аңлар. Тормош ҡатмарлы бит ул: моғайын, үҙен дә, ҡартың да йәп-йәш көйө намаҙҙа булмағанһығыҙҙыр, ҡасандыр хатта "комсомол" булып та йөрөгәнһегеҙҙер... Ҡатыны намаҙға баҫҡас, ир кеше бер нисә йылдан һуң ғына тәүбәгә килеп, дин ҡабул иткән осраҡтар ҙа булғылай. Үҙегеҙҙең ғаиләә эсендәге мөхитегеҙ кейәүегеҙ өсөн үрнәк алырлыҡ булырға тейеш. Ә инде кейәүең дингә килеп, ҡыҙың менән татыу ғына йәшәй башлай икән, шуға һөйөнөп, үҙеңдең ҡартың менән тыныс ҡына, көңгөр-ҡаңғыр итеп йәшәп ятыу кәрәк. Ҡыҙыңа, уның сабыйына (үҙеңдең ейәненә) бөхет теләһәң, балаларыңдың һәр аҙымын "контролгә" алып, тормоштарына ҡыҫтырылыу ғәҙәтен бөтөнләйгә ҡуй! Юғиһә, кейәүең намаҙға баҫыу түгел, хатта үҙе имам булып киткән хәлдә лә, уларҙың татыу йәшәүен күрә алмаясаҡһың..."

Ә ҡәйнәнең йәнәшәһендәге "йыуаш" ҡайны, үҙенең хәләл ефетенә уҡылған бына ошо нәсихәтте һүҙһеҙ генә тыңлап, эстән генә йылмайып, Аллаһ Тәғәләгә зекер әйтеп ултырыр, моғайын... Тап ана шулай эшләгәндә, был ғаиләнең хәле төҙәлеп тә китер, тигән өмөттәмен. Сабыйҙарын өҙәләп яратҡан Илфат менән Фәниәнең бер-береһенә ҡарата ихтирам тойғоһо ла уяныр, мөхәббәт уттары ҡабыныр. Ғаиләлә ҡабаттан татыулыҡ хөкөм һөрөр. Ә иң мөһиме: аталы һәм әсәле үҫеп килгән бала һәр саҡ шат йөҙлө, бәхетле булыр. Ин шәә Аллаһ. Ә һеҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар, ошо сетерекле хәлдән сығып китеү мөмкинлегенә нисек ҡарайһығыҙ?

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ДӨРӨҪ ҺӨЙЛӘШӘЙЕК!

**"Киске Өфө" гәзитен арыуыҡтан бирле алдырып уҡып та, бер ҙә төңөлгәнем юҡ әле. Уны ҡулыма алһам, үҙем ниндәйҙер йылылыҡ тойоп, баҫманың үҙен дә йылы ғына, тәмле генә гәзит тип атағым килә лә китә. Бындай тойғо, бәлки, бала сағымда әсәйемдән ишеткән "Тәмһеҙ һөйләмәгеҙ, кәрәген генә, ялғанламай, тәмле генә итеп һөйләшеп өйрәнегеҙ!" тигән һүҙҙәрен һеңдереп үҫкәнгәлер, бәлки, тип уйлап ҡуйған булам ҡайсаҡ.**

# ӨНДӘШМӘҮ - АЛТЫН ТИП...

## алтын һүҙең йәшермә




Гәзиттә баҫылған тәрбиә мәсьәләләре тураһындағы мәҡәләләр, тормош-көнкүрешкә ҡағылышлы яҙмалар, "Донъя шаңдауы" рубрикаһы, рәсми сығанаҡтарҙан алынған яңылыҡтар - барыһы ла аңлайышлы ла, уҡыу һәм үҙләштереү өсөн дә еңел. "Киске Өфө" материалдарының уҡытыусыларға класс сәғәттәрен үткәреү өсөн әҙер сығанаҡтар икәнен һиҙеп ҡалып, ҡыҙым менән икәүләшеп үҙнәшер менән "Тырышлыҡҡа әйҙәп етәкләйем уҡыусымды тормош юлынан" исеме аҫтында методик ҡулланма йыйынтығы ла әҙерләп сығарғайныҡ бер заман.

"Киске Өфө"нөң "Тәрбиә мәктәбе" рубрикаһы, телмәр байлығына һәм уның таҙалығына арналған мәҡәләләргә ҙур иғтибар бүлеүе лә оло маҡтауға лайыҡ, минеңсә. Телебеҙгә һәм телмәребеҙгә ҡуйылған талаптарҙы теүәл үтәп, йыйнаҡ ҡына, әммә белем һәм тәрбиәүи яғы көслө мәҡәләләр яҙған авторҙар Хәлил Һөйөндөков, Вәлиәхмәт Бәҙретдинов, Фәүзиә Иҙелбаева, Самат Мөхәмәтйәновтарҙың һ.б. бик күп авторҙарҙың мәҡәләләрен яратып уҡыйым. Бына бит тағы ла уйландырырлыҡ, һығымталар яһарлыҡ мәҡәләләр сыҡты ошо арала килгән гәзит номерҙарында.

Яҙыусы Гөлсирә Ғиззәтуллинаның гәзитебеҙҙең 17-23 апрелдәге номерында баҫылған "Алламы? Аллаһмы?" мәҡәләһен уҡығандар автор биргән ошо һорауға яуапты, бәлки, үҙаллы ла эҙләп ҡарағандарҙыр. Авторҙың гәзит уҡыусыларға биргән һорауы Ҡөрьән уҡырға өйрәнеү теләге менән беренсе тапҡыр мәсет ишеген асып, тәүге дәрестә ултырған көнөмдө хәтерләтте. Мөғәлимәбеҙҙең "Аллаһ" тигәнен абайлап:

- "Алла" тигән һүҙҙең аҙағында "һ" өнө бармы ней? - тинем.

- Әлбиттә, бар! - булды яуап. Шул ваҡыттағы оялғанымды! Йә, Аллаһым! Беҙ атай-әсәйҙәребеҙҙең ғүмер буйына "Аллаға шөкөр", "Йәәә Хоҙайым, Аллам!", "Алла һаҡлаһын!" тигәнен ишетеп үҫкән быуын бит! Был ни ғиллә? Был изге һүҙ менән ҡатын-ҡыҙ исеме йөрөтөлөүенә лә аптырағайным әле мин.

"Аллаһы Тәғәлә ҡушмаһа, сүп башы ла ҡыбырламай, бер япраҡ та өҙөлөп төшмәй! Аллаһы Тәғәләгә һүҙ тейҙермә! Минән ҡурҡмаһаң, Алланан ҡурҡ! Аллаға шөкөр! Аллам һаҡлаһын!" Үҙем үҫкән ғаиләлә һәр ваҡыт атай- әсәйҙең Аллаһы Тәғәләнең барлығы һәм берлеге тураһындағы ошондай иҫкәртеүҙәре өҙөлмәне. ***Ни тиклем ауыр замандарҙа ла динебеҙҙе дөрөҫ тотоп, Ислам диненең ҡеүәтләнеүенә үҙ өлөшөн индергән быуынға "Аллаһ" һүҙен дөрөҫ әйтмәгәнһегеҙ тип, үпкә белдереү - үҙе үк тәкәбберлек, наҙанлыҡ булыр ине, минеңсә. Илебеҙҙә диндарҙарҙы эҙәрлекләү булған осорҙа ла бер намаҙын ҡалдырмай, ураҙаларын тотоп, аулаҡ өйҙәрҙә тәрәүих намаҙҙарына йөрөгән быуын инәй-олатайҙарының динебеҙҙе һаҡлап ҡалыуы - беҙҙең быуын өсөн оло бәхет бит ул!*** Диндарҙарыбыҙ ололарҙан үҙҙәре һеңдергән дини мәғлүмәттәрҙе беҙгә, балаларына, тапшырмаһа, бөгөнгө көндәге ҡайһы бер мәхшәр хәлдәр әллә ҡасан уҡ донъябыҙҙы болғар ине инде. "Ә ни өсөн ошо быуын "Аллаһ" һүҙендә "һ" өнөн төшөрөп ҡалдырған һуң?" тигән һорау тыуғандыр, моғайын, гәзит уҡыусыларҙа. Динебеҙҙе өйрәтеү һәм таратыу телдән-телгә күсеп, Төп Китапты уҡый белеүселәрҙең бик аҙ һанда булыуы йәки бөтөнләй булмауы бөгөнгө көндә ошондай бәхәс тыуҙырыуға сәбәп булған, минеңсә.

Ҡөрьән уҡырға өйрәнгәс, был һүҙҙә "һ" хәрефен үҙ күҙҙәрем менән күреп инанғас, үҙемдә бүтән ундай икеләнеү-шикләнеүҙәр булманы. Интернет селтәрҙәрендә лә ошо темаға ҡағылышлы күп кенә бәхәстәр, фараздарҙың донъя күреүе халҡыбыҙҙың был изге һүҙҙең дөрөҫ яҙылыш- әйтелешенә битараф булмауы ул, минеңсә.

"Алламы? Аллаһмы?" мәҡәләһенең авторы әйтеүенсә, төп тамыр һүҙҙе - "Аллаһ" һүҙен - "Аллаһы", "Аллаһу" тип үҙгәртеүҙә ҡытыршылыҡтар килеп тыуыуы "һ" өнөн төшөрөп ҡалдырған өсөн проблемалар эҙләүгә күсеүгә оҡшағаныраҡ яңғырай. Проблемалар тейеүем шул: алфавитыбыҙҙағы 42 хәрефтең тартынҡы өндәренең береһен дә (бигерәк тә бер нисә тартынҡы өн бер рәттән килгәндә) таҙа ғына итеп әйтеп булмай. Мәҫәлән, "р"- ры, "ҡ"- ҡы, "һ"- һы, с- сы һ.б. Ҡайсаҡ хатта һүҙҙәрҙе әйткән осраҡта ла, мәҫәлән, ыстакан (ы), трактор-тырактыр(ы), сеперәк (е), икемәк (е) һ.б. тип, еңелсә генә "ы-е" өн-хәрефтәрен өҫтәп ҡуябыҙ түгелме? Шулай итеп бәхәс тыуҙырған һүҙҙең тамыры "Аллаһ" икән, һүҙ аҙағына - ы, йәки -у өн-хәрефен ҡушыу (был осраҡта Аллаһ+ы йәки "Аллаһ+у") һүҙҙең мәғәнәһенә бер ниндәй ҙә үҙгәреш индермәй.

...Нисек кенә булмаһын, беҙҙән алдағы быуын күпкә итәғәтлерәк, дингә ихтирамлы булған, тип ышаныслы итеп әйтергә нигеҙ бар, минеңсә. Атай-олатайҙарыбыҙ бер ваҡытта ла хәҙерге быуын кеүек "аят-маят, мулла-һалла, намаҙ-һамаҙ", шулай уҡ "сәждә" һүҙе урынына "туңҡайып" тигән һүҙҙәрҙе ҡулланманы. Ошоларға өҫтәп, тағы ла шуны әйтергә кәрәк, өлгө алырлыҡ оло быуын милләттәштәребеҙ бер ваҡытта ла "ҡояш сыға", "ҡояш бата" тимәй, "ҡояш ҡалҡа", "ҡояш байый", йәки "сәсе ағарған" тип түгел, "сәсенә сал төшкән", "аҡ ат" тип түгел "күгат" тиер ине. Хәтеремдә, туйҙа йәштәргә теләктәр теләгәндә: "Сал сәсле, һары тешле булғансы бергә йәшәгеҙ!" тип теләрҙәр ине.

Тағы ла шуны әйтеү мөһимдер: телмәребеҙҙең төҙөк һәм таҙа булыуына өлгәшеүгә өлөш индереү - ул юғары уҡыу йорттарының да төп бурыстарының береһе. Журналистика факультетын тамамлаған ҡайһы берәүҙәрҙең телмәрҙәрендә "һынала" менән "һанала" һүҙҙәренең, йәки халҡыбыҙ араһында "Аллаһ беҙҙе был донъяға яралтҡан" тийәһе урынға "беҙҙе был донъяға яратҡан" тип, "яралтҡан" менән "яратҡан" һүҙҙәрен дөрөҫ ҡулланмауҙары ла эсте бошороп ҡуя.

Юғарыла яҙылғандарға өҫтәп, тағы ла шуны әйтергә ине: һуңғы ваҡыттарҙа гәзит- журналдарҙа "сөнки, ләкин" һ.б. теркәүестәр менән башланған яңы (!) һөйләмдәр йыш осрай. Баш һөйләм менән эйәрсән һөйләмде бергә теркәп килгән ошондай теркәүес- һүҙҙәр менән яңы һөйләмдең башланмауын аңлатыу өсөн түбәндә бер генә миҫал килтереп үтмәксемен. Мәҫәлән, көтмәгәндә генә урамда осраған танышымдың ҡаршыһына баҫып, баш һөйләмде әйтмәйенсә: "Сөнки был көндө мин бигүк хәтерләргә яратмайым" тиһәм, йә булмаһа: "Ләкин мин быға бөтөнләй риза булманым" тиһәм, танышымдың башында нисә төрлө һорау тыуыр ине икән? Һөйләм бәйләнешле һәм тамамланған фекерҙе белдереүен атай- олатайҙарыбыҙ ҡағиҙәләр ятлап түгел, ә телебеҙгә ихтирам һәм һөйөү аша быуындан- быуынға тапшыра килгән бит.

Һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйтмәксемен, күп халыҡ хатаһыҙ һөйләү зарурлығын аңлап, бергәләшеп, дөрөҫ юлды һайлау өсөн һәр төрлө ысулды ҡуллана, бер-береһенә аңлата, уртаҡ фекергә килә. Халҡыбыҙҙың "өндәшмәгән - өйҙәй бәләнән ҡотолған"ын ғына түгел, ә "өндәшмәү - алтын тип, алтын һүҙең йәшермә" тигән алтын һүҙҙәренә таянып, атай-олатайҙарыбыҙҙың алтынға тиң һүҙҙәрен халҡыбыҙҙан, бигерәк тә йәштәребеҙҙән йәшермәй, уларға тапшыра килһәк ине.

Ә "Киске Өфө" гәзитенең бындай бәхәсле мәсьәләләрҙе күтәреп, уҡыусыларының фекерҙәрен өйрәнеп, йәнле һөйләшеү- әңгәмәләшеүенең һөҙөмтәһе булыр һәм уның киләсәктә баһаһы тағы ла юғарыраҡ күтәрелер, ин шәә Аллаһ!

**Назия БИКБОВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, хеҙмәт ветераны.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

### Ҡара барҡылдаҡ

**(Черный дрозд)**



Эре барҡылдаҡ. Ата ҡош тулыһынса ҡара төҫтә, бары тик суҡышы һәм күҙҙәрен уратып торған түңәрәк кенә ҡыҙғылт һары. Инә ҡош, шулай уҡ йәш ҡоштарҙың түҫө көрән, ҡойроҡтары ҡара, түштәрендә буй һыҙыҡтары бар, боғағы һәм ҡорһағы аҡ. Йыры - флейта һыҙғырыуы, ҡысҡырыуы - ҡоро ғына шыҡырлау, сутылдау.

Япраҡлы һәм ҡатнаш урмандарҙа йәшәй. Ояһын ваҡ сыбыҡтарҙан, һаламдан, япраҡтарҙан тупраҡ ҡушып үрә, ул ерҙә лә, ҡыуаҡлыҡ һәм ағастарҙа ла урынлаша. 4-6 йәшкелт йомортҡа һала, ҡыҙғылт таптары бар.

Урал алдында ла, Көньяҡ Уралда ла һирәк осрай торған ҡош. Н.А. Зарудный (1897) ҡара барҡылдаҡтың ояһын республиканың көньяҡ сиктәрендә Оло Ыҡ йылғаһы буйында ултырған Спасское ауылы тирәһендә тап итә. С.И. Снигиревский (1947) Көньяҡ Уралдың көнбайыш яғындағы урмандарҙа ла ояһына осрай. В.Д. Ильичев, В.Е. Фомин (1988) Шүлгәнташта яңғыҙ ғына ҡара барҡылдаҡты күрә. Ошо уҡ ғалимдар Йылайыр платоһында Ҡаҫмарт йылғаһының үрге ағымындағы мышар үҫкән яланда бер пар ҡара барҡылдаҡты осрата.

Беҙ иһә ҡара барҡылдаҡты 1964 йылдың октябрендә Иглин районы Сыуаш Ҡобау ауылы тирәһендә мышар барҡылдаҡтары араһында күрҙек. 1965 йылдың 12 октябрендә Нуриман районы Никольское ауылы эргәһенән аҡҡан Һалдыбаш йылғаһы үҙәнендә шулай уҡ мышар барҡылдаҡтары төркөмөндә бер пар ҡара барҡылдаҡ та бар ине. 1966 йылдың 29 авгусында 6 ҡара барҡылдаҡтан торған төркөмдән йәш ҡошто ауланыҡ. Был Иглин районы ине. Ошо уҡ йылдың 2 октябрендә Бөрө районы Шишмә ауылы эргәндә ҙур ғына төркөмдән ата ҡошто тотоҡ. Башҡортостан ҡурсаулығында бик һирәк осрай. Бына был мәғлүмәттәр республикалағы ҡара барҡылдаҡтарҙың ареалын ярайһы киңәйтә.

### Йырсы барҡылдаҡ

**(Певчий дрозд)**



Арҡаһы йәшкелт-һоро, ҡабырғалары аҡһылерән, түшендә һәм ҡорһағында ҡара таптары бар, ҡанаттарының аҫҡы яғы шулай уҡ аҡһылерән. Йыры - сағыу, әллә ҡайҙан ишетелә, уны шулайыраҡ һүҙгә һалырға булыр ине: "филип-филип-чайпить-пить-витю-витю".

Ябай, ғәҙәти ҡош, төрлө урмандарға оя ҡора. Колониялар менән йәшәмәй. Ояһын шыршы ботаҡтарынан, мүктән яһай, урман батҡағын шыйыҡлап, уны һылап та ҡуя, шуға ла әҙер оя тип-тигеҙ ҡатлам менән уратып алынғанлығы менән хайран итә. 4-7 сағыу зәңгәр, ҡара таплы йомортҡа һала.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**



## 8 ИЮНЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30, 1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Между нами химия". [16+]
0.05 "Время героев". [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башҡортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.20, 3.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Загляни ему в голову". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Три мушкетера". [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 16.00 "Урал батыр". [6+]**
**12.15 Навигатор истории. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Асыш. Дети. [6+]**
**16.15 Формула здоровья. [12+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Башҡорттар. [6+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 "Память". [16+]**
**21.00 Специальный репортаж. [16+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**0.00 Х/ф "Сокровища Ермака". [12+]**
**1.45 Спектакль "Урал-батыр". [12+]**
**3.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 9 ИЮНЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Между нами химия". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башҡортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.20, 3.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Загляни ему в голову". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Три мушкетера". [12+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**16.45 Республика LIVE. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Моя планета - Башҡортостан. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]**
**21.00 Креативный код. [12+]**
**22.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры-2026". [12+]**
**23.45 На своей земле. [12+]**
**0.00 Х/ф "Киноальманах "Свидетели". [12+]**
**1.45 Спектакль "Оль-ля-ля". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 10 ИЮНЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Между нами химия". [16+]
0.00 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башҡортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.20, 3.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Загляни ему в голову". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Три мушкетера". [12+]**
**11.00 Специальный репортаж. [16+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Формула здоровья. [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 "Экологично". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**16.45 Материнство и детство. [12+]**
**17.00 "Просто физика". [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Дуҫтар. [16+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Специальный репортаж. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2026". [12+]**
**0.00 Х/ф "Не свадебное путешествие". [12+]**
**1.45 Спектакль "Эх, друг Байтимер!" [12+]**
**3.30 Подкаст. Интонации. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 11 ИЮНЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30, 18.40, 23.00 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.20, 14.15 "Время покажет". [16+]
16.15 Давай поженимся! [16+]
17.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Между нами химия". [16+]
0.00 "Время героев". [16+]
1.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 20.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башҡортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.40 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
22.00 Х/ф "Холоп-2". [12+]
0.15 Х/ф "Холоп. Великолепный век". [16+]
2.20 Х/ф "Непутёвая невестка". [16+]
5.23 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Три мушкетера". [12+]**
**11.00 Д/ф "Угрозы современного мира". [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Дознание. [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 "Сулпылар". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Навигатор истории. [12+]**
**16.15 Уралым. [12+]**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 "Инспектор travel". [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Материнство и детство. [12+]**
**20.30 Формула здоровья. [12+]**
**20.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Женский детектив". [16+]**
**2.15 Спектакль "Ах, Сапатера". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 12 ИЮНЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10 Д/с "Россия от края до края". [12+]
7.00 "День России". Праздничный канал.
10.15 Д/ф "Награды России". [16+]
11.10 Д/ф Премьера. "Народные промыслы". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Т/с "Государь". [16+]
16.30 "Михаил Задорнов. "Только русский человек..." [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Мой дом - Россия". Праздничный концерт в Кремле. [12+]
19.55 Т/с Премьера. "10 историй о любви и смерти". "Филармония". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Что? Где? Когда?" Экспериментальная серия. [16+]
22.45 Премьера. "Команды". [16+]
23.50 Премьера. "ТопФест" в Лужниках. [0+]
1.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.30 Х/ф "Ни к селу, ни к городу..." [12+]
9.00, 20.00 Вести.
9.20, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
9.30 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 13.00, 15.00, 17.00 Вести. День России.
11.20 Х/ф "На деревню дедушке". [6+]
14.00 Москва. Кремль. Церемония вручения Государственных премий Российской Федерации.
15.50 Д/ф "Время героев". [12+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.30 Большой праздничный концерт, посвящённый Дню России.
23.40 Х/ф "Огонь". [6+]
2.05 Х/ф "Тарас Бульба". [16+]
4.23 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Концерт "С днем рождения, моя столица!" [12+]**
**7.30, 5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.15, 12.00, 15.30 "100 имен Башҡортостана". [12+]**
**9.15 Сәләм представляет… [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 Навигатор истории. [12+]**
**10.00 "Йома". [6+]**
**10.30 "С праздником, моя столица!" Детский концерт. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "ЭХО БДФ". Репортаж. [6+]**
**12.30 Спектакль "Любовь и голуби". [12+]**
**14.45 Мосты. Михаил Чванов. [12+]**
**16.00 Хазина о хазине. [6+]**
**16.30 Д/с "Не иностранец". [12+]**
**16.45 "Несломленный дух". Концерт ко Дню рождения Салавата Юлаева. [12+]**
**18.15 Квадратные метры. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 На своей земле. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Репортаж с Межрегионального фестиваля вокалистов, исполнителей музыкальных инструментов имени легендарного композитора Рима Хасанова. [12+]**
**20.45 "Башҡорт йыры-2026". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Интервью. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.00 Дуҫтар. [16+]**
**23.30 Концерт "Трилогия искусства". [12+]**
**1.15 Х/ф "Дорога без конца". [12+]**
**2.45 Спектакль "Незваный гость". [12+]**
**4.30 Подкаст. Интонации. [12+]**
**5.30 Территория счастья. [12+]**

## 13 ИЮНЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Любимые куклы взрослых". К 90-летию "Союзмультфильма". [0+]
11.10 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Т/с "Государь". [16+]
16.40 "ТопФест" в Лужниках. [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.50 Х/ф "Далекие близкие". [16+]
1.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
4.30 Х/ф "Ни к селу, ни к городу... Продолжение". [12+]
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 13.30, 16.30, 20.00 Вести.
11.45 Х/ф "На деревню дедушке". [6+]
14.00 "Аншлаг и Компания". [16+]
17.00 Большой праздничный концерт Валерия Сёмина. [12+]
20.50 Местное время. Вести-Башҡортостан.
21.00 Х/ф "Женщина в белом". [16+]
0.40 Х/ф "Холоп-2". [12+]
2.55 Х/ф "Холоп. Великолепный век". [16+]
4.46 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.15 Материнство и детство. [12+]**
**8.30 На своей земле. [12+]**
**8.45 Хазина о хазине. [6+]**
**9.15 Сәләм представляет… [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 МузКәрәҙ. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Ҡурсаҡ". [6+]**
**11.30 Экологично. [6+]**
**11.45 "Ат уйнатып!" [6+]**
**12.00 "Елкән". [6+]**
**12.30 Навигатор истории. [12+]**
**12.45 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**17.45 Подтекст: инструкции к себе. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Формула здоровья. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2026". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 5.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.30 Концерт группы "Тарпан". [12+]**
**1.15 Х/ф "Дачный романс". [16+]**
**3.00 Спектакль "Море мечты". [12+]**
**5.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

## 14 ИЮНЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.10 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/с "Победа". [16+]
13.10 "Будем жить!" [16+]
14.05 "Видели видео?" [0+]
15.15 Д/ф "Тульский Токарев. Он же ТТ". К 155-летию легендарного оружейника". [16+]
16.15 Х/ф "Зимняя вишня". К 70-летию Елены Сафоновой". [12+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 "До Ре". [12+]
21.00 "Время".
23.00 "Большая игра". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.25 Х/ф "Не говорите мне о нём". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00, 1.40 Д/с "Рассказы из русской истории". [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башҡортостан.
15.00 "Весёлые ребята". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.28 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45, 20.30 Автограф. [12+]**
**8.15 Формула здоровья. [12+]**
**8.30 "Ҡурай даны". [12+]**
**8.45 Күстәнәс. [12+]**
**9.15 "Мама". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45, 19.30, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Сулпылар. [6+]**
**12.00 "Ат уйнатып!" [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 Ап-асык. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**14.45 Дорога к храму. [6+]**
**15.15 Честно говоря. [12+]**
**16.00 Д/с "Трудности перевода". [12+]**
**16.45 Полезные новости. [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.45 Спектакль "Ак калфак". [12+]**
**19.15 Квадратные метры. [12+]**
**19.45 Әлләсе. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Подтекст: инструкции к себе. [12+]**
**23.00 Концерт Загира Исанчурина. [12+]**
**1.15 Х/ф "Запах вереска". [16+]**
**3.00 Спектакль "Последние". [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**
**5.30 Дуҫтар. [16+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**



РЕКЛАМА

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ
*1447 һижри йыл.*

| Июнь (Зөлхиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 8 (22) дүшәмбе | 3:10 | 4:41 | 13:30 | 18:58 | 21:49 | 23:19 |
| 9 (23) шишәмбе | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 18:58 | 21:50 | 23:20 |
| 10 (24) шаршамбы | 3:09 | 4:40 | 13:30 | 18:59 | 21:51 | 23:21 |
| 11 (25) кесе йома | 3:09 | 4:39 | 13:30 | 18:59 | 21:51 | 23:21 |
| 12 (26) йома | 3:09 | 4:39 | 13:30 | 19:00 | 21:52 | 23:22 |
| 13 (27) шәмбе | 3:08 | 4:39 | 13:30 | 19:00 | 21:53 | 23:23 |
| 14 (28) йәкшәмбе | 3:08 | 4:38 | 13:30 | 19:01 | 21:54 | 23:24 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

✓ *Йәштәребеҙ республика менән бәйләнеш тотһон өсөн күп нәмә эшләйбеҙ. Улар менән осрашабыҙ, Башҡортостандың нисек үҫешеүе хаҡында һөйләйбеҙ.*



ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ

# БАШҠОРТОСТАНҒА ҠАЙТЫҒЫҘ!

**Йыл һайын Башҡортостандан егет-ҡыҙҙар Берҙәм дәүләт имтиханында юғары балл йыйып, илебеҙҙең баш ҡалаһы вуздарына уҡырға инә. Әлеге ваҡытта 15 меңдән ашыу студент республикабыҙҙан ситтә белем ала, тип хәбәр иттеләр төбәктең Рәсәй Федерацияһы Президенты ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкиллегендә.**



Улар Мәскәүгә, Санкт-Петербургҡа, Өфөгә һәм башҡа ҡалаларға диплом алырға китә. Дөрөҫөн әйткәндә, ҙур ҡалаларҙа йәшәү ҡиммәткә төшә, конкуренция юғары, ә уҡыуҙы тамамлағандан һуң "шәп" диплом һәм тәжрибәһеҙ килеш хеҙмәт биржаһына эләгеү мөмкинлеге лә юҡ түгел. Башҡортостан был мәсьәләне хәл итеү өсөн йыл башында республиканың Кадрҙар стажировкаһы үҙәген асты. Был баш ҡаланың юғары уҡыу йорттары студенттарын тыуған яҡта төп эш биреүселәр менән бәйләүсе реаль карьера лифты булып тора. "Студенттарҙың һәм юғары уҡыу йорттарын тамамлаусыларҙың республикабыҙ иҡтисадында, йәки дәүләт хеҙмәте, муниципаль хеҙмәт органдарында стажировка үтеү мөмкинлеге барлыҡҡа килә. Быны беҙ мотлаҡ эшләйәсәкбеҙ", - тип вәғәҙәләне республика етәксеһе Радий Хәбиров февралдә Үҙәкте асыу тантанаһында.

***Был нисек эшләй?*** Ғариза ҡалдырала һың. Кураторҙар һинең менән бәйләнешкә инеп, юғары уҡыу йортона, һөнәргә һәм курсҡа ҡарап, түбәндәгеләрҙе тәҡдим итә:

1-се курс: каникулдарҙа еңелсә генә таныштырыу стажировкаһы. Бер ниндәй ҙә бюрократия юҡ - министрлыҡҡа йәки ҙур заводҡа киләһегеҙ, эштең нисек ҡоролғанын ҡарайһығыҙ, бер юлы күпме аҡса эшләргә мөмкин икәнен беләһегеҙ.

2-4-се курс. Бында инде производство практикаһы. Юғары уҡыу йорто рәсми һорау ебәрә, өҫ яҡлы килешеү төҙөлә, шунан һуң һеҙ реаль кейстарҙы хәл итергә бараһығыҙ. Был эш биреүсегә үҙендә күрһәтеү, шулай уҡ "тороп ҡалыу" мөмкинлеге лә булып тора.

Сығарылыш курсы. Үҙәк Башҡортостанда хыялыңдағы эште табырға ярҙам итә ала, тимәк, эшкә урынлашыу мәсьәләһе хәл ителгән тип иҫәпләргә мөмкин.

***Кем әле уҡ стажерҙарҙы көтә?*** Үҙәк директоры Тигран Карапетян әйтеүенсә, ошондай стажировка үтеү урындары тәҡдим ителә:

дәүләт власы органдарында: республика министрлыҡтарында, ведомстволарында һәм Башҡортостан Хөкүмәте аппаратында;

муниципаль хеҙмәт органдарында: республика ҡалалары һәм районлары хакимиәттәрендә;

закондар сығарыу власы органдарында: мәҫәлән, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа;

иҡтисадтың реаль секторында: төбәктең төп коммерция һәм сәнәғәт предприятиеларында.

Башҡортостан студенттарын стажировкаға ҡабул итергә әҙер булған 40-ҡа яҡын предприятие бар.

"Мәскәүҙә һәм Санкт-Петербургта ғына түгел, башҡа ҡалаларҙа белем алған республикабыҙ студенттары ла практика үтә ала. Ҡаҙан һәм Силәбе студенттарынан ғаризалар бар, - тип һөйләне "Башинформ"ға Тигран Карапетян. - Кире йүнәлештә лә стажировка үтергә мөмкин. Өфө студенттары беҙҙең тулы хоҡуҡлы вәкиллектә эшләй, эшебеҙ менән яҡындан таныша ала. Әлеге ваҡытта ошондай 7-8 ғариза бар, барыһын да төрлө ваҡытта ҡабул итергә әҙерҙәр".

Стажировка өсөн түләнмәй, әммә ҡайһы бер предприятиелар аҡса түләргә һәм һуңынан уҡыу йортон тамамлаусыларҙы эшкә урынлаштырырға әҙер. Стажировка урынына барып ҡайтыу өсөн юл хаҡын түләү мөмкинлеге әлегә юҡ, әммә Үҙәктә ошо турала уйлана башланылар, тип өҫтәне уның директоры.

***Проекттың тәүге һөҙөмтәләре.*** Был тема студенттар араһында ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы - 106 кеше Үҙәккә ғариза биргән. Был старт ҡына. Уларҙың ҡайһы берҙәре Башҡортостан Республикаһы Башлығы хакимиәтендә һәм республика Ҡоролтайында стажировка үткән. Бер үк ваҡытта Үҙәк бизнесты штурмлай: Башҡортостандың билдәле предприятиеларына стажерҙарға һорау ебәрелгән. Логика ябай: компанияларға - баш ҡала бәкгрунды менән яңы белгестәр, ә студенттарға портфолиоға шәп кейстар һәм киләсәктә лайыҡлы эш кәрәк.

***Етәкселек нимә ти?*** "Маҡсат студентты практикаға ебәреү генә түгел. Уның менән ныҡлап шөғөлләнергә лә кәрәк. Кеше предприятиеға практикаға килә һәм яҡшы һөҙөмтә күрһәтә һәм, әгәр ул үҙенең бында кәрәклеген аңлаһа, уның эшкә ҡайтыу ихтималлығы ҙур. Бөтә студенттарҙың да башҡа ҡалаларҙа ҡалмауын аңлайбыҙ, уларҙың күбеһе кире ҡайта. Был беҙҙең стратегик резерв, - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров.

- Йәштәребеҙ республика менән бәйләнеш тотһон өсөн күп нәмә эшләйбеҙ. Улар менән осрашабыҙ, Башҡортостандың нисек үҫешеүе хаҡында һөйләйбеҙ. Яңыраҡ беҙҙең предприятиеларҙа һәм власть органдарында стажировкалар ойоштороу буйынса системалы эш башланыҡ. Йыл йомғаҡтары буйынса беҙгә 100-ҙән ашыу егет-ҡыҙ килер тип көтәбеҙ. Кемдер практиканан һуң эшкә ҡалырға теләр. Беҙ шат булыр инек".

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!



# ЯНҒЫНДЫ ИҪКӘРТЕҮ ФАРЫЗ

**Республикала 12 июнгә тиклем янғынға ҡаршы махсус режим үҙ көсөндә ҡала.**

Был осорҙа:

- ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙә, төбәк әһәмиәтендәге айырыуса һаҡланған тәбиғәт биләмәләрендә, запастағы ерҙәрҙә, юлдар буйында, йылға һәм күл зоналарында, ҡала һәм ауыл биләмәләре, баҡса ширҡәттәре, предприятиелар һәм ойошмалар биләмәләрендә, сүплектәрҙә һәм ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары полигондарында усаҡ яғыу тыйыла;

- урындағы үҙидара органдары билдәләгән махсус урындарҙан тыш, 1-3 хәүефлелек класына ҡараған пиротехник изделиеларҙы ҡулланыу тыйыла;

- төрлө тәғәйенләнештәге объекттарҙан һәм ҡоролмаларҙан алып урманға тиклемге биләмәлә ут яғыу тыйыла.

Бынан тыш, янғынға ҡаршы махсус режим осоронда административ штрафтар ике тапҡырға артты: граждандар өсөн - 20 000 һумға; вазифалы кешеләр өсөн - 60 000 һумға; юридик шәхес булдырмайынса эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеген алып барған кешеләр өсөн - 80 000 һумға; юридик шәхестәр өсөн 800 000 һумға тиклем штраф һалыу ҡаралған.

Әйткәндәй, Башҡортостан урмансылары, янғындарға юл ҡуймау маҡсатында быйыл 4469 саҡрым һөрөлгән урман сите һыҙаттары һалған. "Бындай һыҙат - урман янғыны юлында төп кәртә. Ул утты туҡтата һәм сыҡҡан янғын менән көрәште еңеләйтә", - ти Республика урман хужалығы министры Марат Шәрәфетдинов.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**5 июнь "Итекле бесәй"** (Ш.Перро, В.Ганзенко, И. Ҡаҙаҡбаев), әкиәт. 10:30. 6+

**8 июнь "Әкиәт илендә мажаралар"** (В. Коростылёв, Ф. Ғарипов), әкиәт. 10:30. 6+

**8 июнь "Урал батыр"** (А. Борисов), башҡорт халыҡ эпосы буйынса. 19:00. 12+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**5 июнь "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский, Р. Хакимов), мюзикл. 10:30. 0+

**9 июнь "Жила-была деревенька"** йәштәр һәм балалар өсөн "Балаганчик" музыка һәм поэзия драма театры тамашаһы. 10:00 һәм 12:00. 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**5 июнь "Доктор Айболит һәм уның дуҫтарының мажаралары"** (К. Чуковский). 11:00. 0+

**5 июнь "Чем пахнут одуванчики?"** (В.Щербакова). 16:00. 0+

**6 июнь "Доктор Айболит һәм уның дуҫтарының мажаралары"** (К. Чуковский). 12:00. 0+

**6 июнь "Чем пахнут одуванчики?"** (В.Щербакова). 15:00. 0+

**8 июнь "Жил-был король"** (С.Седов). 11:00 һәм 12:30. 6+

**9 июнь "Доктор Айболит һәм уның дуҫтарының мажаралары"** (К. Чуковский). 10:00 һәм 11:30. 0+

**11 июнь "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). 10:00 һәм 11:30. 0+

**11 июнь "Путь Победы"** (Д. Ғәрәева, К. Баязитова). 12:00. 6+

## Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**8 июнь "На златом крыльце сидели..."** Бөтә ғаилә өсөн музыкаль әкиәт. 11:00 һәм 12:00. 6+

**9 июнь "Кот в сапогах по-русски"**, мюзикл. 12:00. 12+

**10 июнь "Жизнь прекрасна. Летние вечера в Органном зале"** Эльвира Ямалова һәм БДФ-ның камер оркестры концерты. 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**5 июнь "Безопасные каникулы"** интерактив спектакль-лекторий. 0+

**6 июнь "Сказка о рыбаке и рыбке"** (А.Пушкин), әкиәт. 0+

**8 июнь "Урал батыр"** эпосы көнөнә ҡарата йәнһүрәт. 0+

**9 июнь "Снежная Королева"** (Г.Андерсен, Р.Ғәйнуллина), әкиәт. 6+

## БР Милли музейы

**5 һәм 6 июнь "Ткачество"** оҫталыҡ дәресе. 12:00. 6+

**5 июнь "Урал батыр"** ҡобайыры тематик экскурсияһы. 15:00. 6+

**11 июнь "Йөрәк саҡырыуы буйынса"** күргәҙмәһен асыу. 11:00

**11 июнь "Аксаков менән Өфө буйлап сәйәхәт"** экскурсия-квесы. 11:00. 6+

*МӘҘӘНИ МАЙҘАН*

# ЙЫЛ КИТАБЫ БИЛДӘЛӘНДЕ




**Китап байрамының йомғаҡлау көнөндә "Урал батыр ерендә йыл китабы" конкурсының еңеүселәре тәбрикләнде. Ойоштороусылар әйтеүенсә, быйыл конкурсҡа 26 нәшриәттән 85 китап тәҡдим ителгән, улар - Рәсәйҙең 13 төбәге, Беларусь һәм Ирандан. Ғәҙәттәгесә, Яҡут, Удмурт, Татарстан, Марий Эл республикаларынан әүҙем ҡатнашҡандар.**

Ете номинацияла 38 дипломант һәм лауреат бүләкләнде. Гран-при - Башҡортостан Башлығының махсус призына З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтенең рус телендә баҫылған "Көс - берҙәмлектә. Күп милләтле Рәсәй. Классиктар әҫәрҙәре" тигән баҫмаһы лайыҡ булды. Награданы конкурстың жюри рәйесе, Рәсәй китап сығарыусылар ассоциацияһы президенты Константин Чеченев тапшырҙы. Китап Рәсәй халыҡтары берҙәмлеге йылына арналып, илебеҙҙең милли әҙбиәттәре классиктарының әҫәрҙәренән тора. Баҫмаға баш һүҙҙе Башҡортостан Республикаһы етәксеһе Радий Хәбиров яҙған. Уҙған йылда махсус бүләккә Мәскәүҙең "Аҡ ҡала" сауҙа йорто" нәшриәте баҫтырған "Еңеү йылъяҙмаһы. 1941-1945" китабы лайыҡ булғайны. "Конкурсҡа килгән һәр китап иғтибарға лайыҡ. Күп милли нәшриәттәрҙең беренсе премияны алыуы - ҡыуанысҡлы күренеш. Улар һәр китапхананы биҙәй ала, уларҙы уҡырға кәңәш итергә була. Үҙҙәренең төбәге тарихы һәм мәҙәниәте тураһында бәйән итә, Рәсәй халыҡтары телдәрендә яҙылған", - тип билдәләне К. Чеченев.

# МОСТАЙҘЫҢ ҺУҢҒЫ ӘҪӘРЕ...

**Өфөлә Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең "Киске табын" әҫәре буйынса спектаклдең премьераһы була. Спектаклдең ҡуйыусы режиссеры - Илсур Ҡаҙаҡбаев. Премьера 19 июндә театрҙың ҙур сәхнәһендә күрһәтелә.**

"Киске табын" - Мостай Кәримдең һуңғы пьесаһы, унда классик 1980 йылдар аҙағындағы һынылыш осорона байҡау яһай. Режиссер Илсур Ҡаҙаҡбаев һүҙҙәренсә, автор был пьеса өҫтөндә бик оҙаҡ эшләгән. "Мостай Кәрим заман һулышын тойорға, 1980 йылдар аҙағындағы ҡатмарлы ижтимағи процестарҙы күрһәтергә тырыша. Пьесаның үҙәгендә - тормоштоң бөтә өлкәләренә үтеп ингән ялғанлыҡ тураһында уйланыу. Төп герой былай ти: "Мине ялған радиацияһы ағыулай. Тыштан да, ғаилә эсендә лә", - тип билдәләй режиссёр.

Ҡаҙаҡбаев өсөн был - эске намыҫын һәм донъяла һөйөүҙе һаҡларға тырышҡан кеше хаҡындағы тарих ул. Унда дөрөҫлөк төшөнсәһе хәүеф аҫтында ҡала. Хәл-ваҡиғалар 1989 йылдың 25 авгусында Өфөлә бара. Советтар Союзында үҙгәртеп ҡороуҙар гөрләй. Берәүҙәр илдәге хәлдәрҙе дәртләнеп-рухланып, икенселәр хәүефләнеп күҙәтә. Ә Артыҡовтар ғаиләһендә иҫтәлекле көн: Әхмәтша менән Йәннәт көмөш туйҙарын - сирек быуат бергә йәшәүҙәрен байрам итәләр. Уларҙың берҙән-бер улы Алпамыша ата-әсәһенә үҙенсәлекле бүләк әҙерләгән. Байрам уңайынан ҡоролған киске табын иман килтереү төнөнә әйләнә...

Спектакль өҫтөндә танылған театр оҫталары төркөмө эшләй. Рәссам - Ләйсән Хөсәйенова, хореограф - Ольга Даукаева, композитор - Магуля Мезинова. Рәссам-яҡтыртыусы - Сергей Гаевой.

Башҡорт академия драма театрында спектаклде сәхнәгә 1994 йылда режиссёр Азат Нәҙерғолов сығарҙы. Ниһайәт, өс тиҫтә йылдан һуң әҫәр Башҡорт академия драма театры сәхнәһенә яңынан ҡайта. Премьераға әҙерлек барышында театр 1980 йылдар аҙағындағы реквизиттар эҙләүе тураһында иғлан итте. Спектакль өсөн сумаҙан тибындағы патефон һәм диапроектор кәрәк. Театр ошо әйберҙәрҙе бүләккә ҡабул итергә әҙер, бының өсөн рәсми төркөмдәргә яҙырға мөмкин.

# ЗӨЛФИӘ ТАҒЫ СӘХНӘЛӘ

**Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы Зөлфиә Ҡудашеваның юбилей кисәһе үтте.**

Юбиляр сәхнәгә композитор Бәхти Ғайсиндың 50 йылға яҡын яңы ҡаҙаныштарға илһамландырған "Зөлфиә" көйөнә бейеп сыҡты. Зөлфиә Иҙрис ҡыҙы әйтеүенсә, был кисәлә ул үҙе күп бейемәҫкә, ә тамашасыларға үҙенең бейеүҙәрендә йәшәүен дауам иткән артистарҙы, тәрбиәләнеүселәрҙе, ижади дуҫтарын һәм коллегаларын күрһәтергә булды. Ошо йылдар дауамында ул туплаған белемен һәм тәжрибәһен йәш быуынға тапшырырға өлгөрҙө. Режиссер һәм сценарист, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Сулпан Асҡарова төҙөгән концерт программаһы бай йөкмәткеле ине. Тамашасылар Зөлфиә Ҡудашеваның тормошонан һәм ижадынан бик күп ҡыҙыҡлы факттар менән танышты. Башҡорт филармонияһы солисы булараҡ ул Бельгияла, Перуҙа, Сүриәлә, Төркиәлә, Швейцарияла, Австрияла, Германияла, Голландияла, Ҡытайҙа һәм Финляндияла сығыш яһап, бихисап илдәрҙең һәм ҡитғаларҙың сәхнәләрен яулай. Бөйөк бейеүсе Мәхмүт Эсамбаев 1989 йылда Кишиневта уҙған I Бөтә Союз эстрада бейеүе фестивалендә уға "Мисс Фестиваль" исемен тапшыра.

Педагог булыу өсөн Зөлфиә Ҡудашева 50 йәшендә Силәбе мәҙәниәт һәм сәнғәт академияһының хореография факультетына уҡырға инә. "Мин ғүмерем буйына бейенем, остаздарым һәм хореографтарым бар ине. Һуңынан башҡаларҙы өйрәтергә кәрәклеген аңланым", - тип һөйләй ул.

# БҮЛӘК АРТЫНАН БҮЛӘК!

**Башҡортостандың AY YOLA төркөмө һәм йырсы Алһыу тарихта тәүге тапҡыр милли телдәге трек менән RU.TV телеканалының музыка премияһы еңеүселәре булды.**

Улар "Ай, былбылым" халыҡ йыры менән "Оло илдең музыкаһы" номинацияһында еңеү яуланы. Ә йырҙың премьераһы 2026 йылдың башында күрһәтелде. 20 йыл дауамында рус телле хиттарҙы ғына күрһәткән RU.TV телеканалы тәүге тапҡыр милли телдә яңғыраған композицияны эфирға сығарҙы. "Был ысынлап та тарихи мәл. Беҙ беренселәр булдыҡ", - тип билдәләне артистар бүләкләү тантанаһында.

**Әйткәндәй, 7 июндә Белорет районында "Урал батыр" эпосы көнө байрамында AY YOLA төркөмө сығыш яһай. Үҙенсәлекле стиле менән билдәлелек яулаған музыкаль коллектив бай программаның бер өлөшө булмаҡсы. Шулай уҡ был көндө Урал батырҙың һуңғы төйәгенә барыу, балаларҙың "Урал батыр" эпосынан өҙөктәр һөйләүе, ҡурайсылар, яҙыусылар, ғалимдар һәм ижади коллективтар ансамбленең сығыштары көтөлә. Байрам Үрге Әүжән һәм Исмәкәй ауылдары араһында ойоштороласҡ. Сараға инеү ирекле.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# НИМӘ МӨҺИМ:

## үткәнме, киләсәкме, бөгөнгөмө?

Ашыуһыҙ булһа - тауҙан биҙ, үткеһеҙ булһа - һыуҙан биҙ, икмәге юҡ сәйҙән биҙ, хәйере юҡ байҙан биҙ, ирен яманлаған ҡатындан биҙ, ҡатынын яманлаған ирҙән биҙ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Түҙемлек һәм күндәмлек янында асыу һәм ҡыҙыулыҡ юҡ.

**(Франциск Ассизский).**

Кеше йәне бик ябай, ә асыу үтә ҡатмарлы.

**(Филипп Сидни).**

Азатлыҡ һәр кемгә тәтемәй торған байлыҡ ул.

**(Отто фон Бисмарк).**

Һаулыҡ барлыҡ рәхәтлектәрҙән дә өҫтөн. Сәләмәт ярлы ауырыу батшанан бәхетлерәк.

**(А. Шопенгауер).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Өс ил ағаһы кеше өсөн нимә мөһим - уның үткәнеме, бөгөнгөһөмө, әллә киләсәгеме, тигән темаға бәхәс ҡорған. Уларҙың беренсеһе:**

**- Үткәндәрем бөгөнгө минемде барлыҡҡа килтерҙе. Мин үткән ғүмеремдә батырсылыҡ итеп өйрәнгәндәремде эшләйем, шул шөғөлдәрем менән йәшәйем. Үткән тормошомда танышҡан кешеләр - минең өсөн иң яҡындары һәм тоғролоҡта һынау үткәндәре, - тигән.**

**- Һинең менән һис ризалашып булмай, - тигән икенсе ил ағаһы. - Һин хаҡлы булһаң, кеше үҙенең ҡылыҡтары ауында буталып ултырған үрмәкес кеүек булыр ине. Кешене киләсәге йәшәтә. Минең әле эшләй белгәндәрем мөһим түгел - мин киләсәк талап иткәндәргә былай ҙа өйрәнәсәкмен. Ике йылдан һуң мин ниндәй кеше буласаҡмын, нимәгә өлгәшәсәкмен, тигән күҙаллауым ике йыл элек мин ниндәй булғанмын, тигән күҙаллауға ҡарағанда мөһимерәк тә баһа. Унан һуң, миңә үткән тормошомдағы кешеләргә оҡшамаған яңы таныштарым күберәк оҡшай...**

**- Һеҙ үткәндәр һәм киләсәк беҙҙең уйҙарҙа ғына йәшәй икәнен бөтөнләй күҙҙән ысҡындырҙығыҙ, ахры, - тип һүҙгә ҡыҫылған өсөнсө ил ағаһы. - Үткәндәр инде юҡ. Киләсәк әлегә юҡ. Үткәндәр тураһында хәтерләүегеҙгә, киләсәк тураһында хыялланыуығыҙға ҡарамаҫтан, һеҙ бөгөн йәшәйһегеҙ. Һеҙ бары тик бөгөнгө көндә генә тормошоғоҙҙағы ниҙелер үҙгәртә алаһығыҙ, бары бөгөн генә ижад итә, ярата, дуҫлаша - бәхетле була алаһығыҙ. Үткәндәрҙәге бәхет тураһында хәтерләү - күңелле түгел, киләсәктәге бәхетте көтөү - тулҡынландырғыс. Беҙ йәшәгән берҙән-бер көн - ул бөгөнгө көн..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.
1 582218 911006 26022

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
**"Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (347) 226-99-48.**
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 4.06.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 4.06.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 5.06.2026 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2677
Заказ - 976